РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ МӘҒАРИФ ҺӘМ ФӘН
МИНИСТРЛЫҒЫ
ЮҒАРЫ ПРОФЕССИОНАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ БУЙЫНСА
ДӘҮЛӘТ МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫ

**Солтанбаева Х.В.**

# ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ЯРҘАМСЫ ҺҮҘ ТӨРКӨМДӘРЕ

**юғары уҡыу йорттарының
филология факультеты студенттары өсөн
уҡыу ҡулланмаһы**

Өфө – БДУ – 2010

УДК 811. 512. 141

ББК 81.2 (Баш)

**Солтанбаева Х.В.**

Хәҙерге башҡорт телендә ярҙамсы һүҙ төркөмдәре: юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн уҡыу ҡулланмаһы – Өфө: БДУ, 2010. – 95 бит.

***Рецензенттар:***

М.Аҡмулла ис. Башҡорт дәүләт педагогия университетының
башҡорт теле кафедраһы;
Филология фәндәре докторы, профессор **Абдуллина Г.Р.**
*(Зәйнәб Биишева ис. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы)*

Уҡыу ҡулланмаһында хәҙерге башҡорт телендәге ярҙамсы һүҙ төркөмдәре бер система итеп тикшерелә. Хеҙмәт функциональ аспектта һәм бай фактик материалға нигеҙләнеп яҙылған. Студенттарға, аспиранттарға, филологтарға тәғәйенләнә.

© БДУ, 2010

ISBN

© Солтанбаева Х.В., 2010

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ И НАУКИ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
ГОСУДАРСТВЕННОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ВЫСШЕГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ

**Султанбаева Х.В.**

# СЛУЖЕБНЫЕ ЧАСТИ РЕЧИ В СОВРЕМЕННОМ БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ

**Учебное пособие**
**для студентов филологического факультета**
**высших учебных заведений**

Уфа – БашГУ – 2010

УДК 811. 512. 141

ББК 81.2 (Баш)

**Султанбаева Х.В.**

Служебные части речи в современном башкирском языке: учебное пособие для студентов филологического факультета высших учебных заведений – Уфа: РИЦ БашГУ, 2010. – 95 с.

***Рецензент:***

Кафедра башкирского языка Башкирского государственного педагогического университета им. М.Аҡмуллы;
Доктор филологических наук, профессор **Г.Р. Абдуллина**
*(Стерлитамакская гос.пед.академия им. Зайнаб Биишевой)*

В учебном пособии служебные части речи в современном башкирском языке рассмариваются как единая система. Работа написана на функциональном аспекте и основана на богатом фактическом материале. Предназначена студентам, аспирантам, филологам.

© БашГУ, 2010

ISBN © Султанбаева Х.В., 2010

# ИНЕШ

Хәҙерге башҡорт телендә ярҙамлыҡ һүҙҙәр түбәндәге өс төркөмсәгә бүлеп йөрөтөлә: бәйләүес, теркәүес, киҫәксә.

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы шунда: 1) Ярҙамлыҡ һүҙҙәр үҙ аллы реаль мәғәнә белдермәйҙәр.

2) Улар үҙ алдарына ҡулланылмайҙар һәм һөйләм киҫәктәре була алмайҙар.

3) Ярҙамлыҡ һүҙҙәр грамматик категориялар менән үҙгәрмәйҙәр, уларҙың һүҙ яһау функцилары юҡ.

Ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙең һөйләмдәге төп функциялары шунан тора: улар үҙ аллы һүҙҙәр йәки һөйләмдәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе күрһәтәләр, грамматик мәғәнәләрҙе йәки мәғәнә төҫмөрҙәрен белдерәләр.

Уҡыу ҡулланмаһы өс бүлектән тора: “Киҫәксәләр” тип исемләнгән 1-се бүлектә хәҙерге башҡорт телендәге киҫәксәләрҙең функциональ-семантик үҙенсәлектәре сағылдырыла; 2-се бүлектә башҡорт теленең теркәүестәре тикшерелә; 3-сө бүлек бәйләүестәргә арналған.

Материалды практик яҡтан ныҡлы үҙләштереү маҡсатында уҡыу ҡулланмаһында түбәндәге эш төрҙәре бирелгән: 1) күҙәтеүҙәр өсөн текстар һәм улар буйынса күнегеүҙәр; 2) тест варианттары.

Уҡыу ҡулланмаһында бирелгән теоретик материалды тәрәнерәк үҙләштереү маҡсатында ошо проблема буйынса ғилми әҙәбиәт исемлеге тәҡдим ителгән.

## КИҪӘКСӘЛӘР

Айырым һүҙҙәргә, һөйләм киҫәктәренә йәки һөйләмдәргә өҫтәмә эмоциональ-экспрессив һәм төрлө модаль мәғәнәләр биргән ярҙамсы һүҙ төркөмдәре **киҫәксәләр** тип атап йөрөтөлә. Хәҙерге башҡорт телендә киҫәксәләр түбәндәге төркөмсәләргә бүленә: 1) модаль; 2) көсәйтеү; 3) һорау; 4) сикләү; 5) билдәләү; 6) оҡшатыу-сағыштырыу.

### *Модаль киҫәксәләр*

Модаль киҫәксәләр мәғәнәләре буйынса төрлө. Улар шикләнеүҙе, ышанып бөтмәүҙе, ихтималлыҡты, мөмкинлекте, мәжбүрлекте, сикләүҙе, раҫлауҙы, кире ҡағыуҙы һ.б. белдерә.

***Модаль*** киҫәксәләр мәғәнәләре буйынса түбәндәгеләргә бүленә: 1) раҫлау киҫәксәләре; 2) йөкмәтеү киҫәксәләре; 3) гипотетик модаль киҫәксәләр.

**Раҫлауҙы белдергән киҫәксәләр:** *да баһа /дә баһа, та баһа / тә баһа, ла баһа/лә баһа, ҙа баһа/ҙә баһа, да/дә, та/тә, ла/лә , ҙа/ҙә, бит, шул, ул, әле.*

**Да баһа/дә баһа, та баһа/тә баһа, ла баһа/лә баһа, ҙа баһа/ҙә баһа** киҫәксәләре башҡорт теленең яҙма һәм һөйләү телмәрендә киң ҡулланыла. Улар һөйләмдә бирелгән уй-фекерҙең дөрөҫлөгөн, хәл-ваҡиғаларҙың реаль булыуын йә реаль булмауын раҫлауҙы белдерә: Байҙың кәйефен боҙорлоҡ бер нәмә лә эшләмәгәндәр ***ҙә баһа*** улар (Я.Хамматов). Былай барһа, дарманы үҫеп, көҙгәсә тамам һауығып китә ***лә баһа*** ул (Ә.Хәкимов). Кешенең рухын һындырырға ла, күңелен ҡанатландырырға ла күп нәмә кәрәкмәй, тиҙәр ***ҙә баһа*** (Р.Солтангәрәев). Ағиҙел күпере төбөндәге пляжға барып, һыу инһә, ҡыҙынһа, үҙе бер ял ***да баһа*** (Н.Мусин).

Башҡорт теленең диалекттарында һәм һөйләштәрендә *да баһа* киҫәксәһенең ҡыҫҡартылған формаһы ла осрай*: даһа/дәһә, таһа/тәһә, лаһа/ләһә, ҙаһа/ҙәһә*: Әйтеп торам *даһа*, мин уға бер ни тип тә әйтмәнем (Һ. Дәүләтшина). Атаҡ, атаҡ! Оло ҡунаҡтар, атлы ҡунаҡтар *ҙаһа!* (Р.Байымов).

*Да баһа/дә баһа* һәм башҡа киҫәксәләр төрлө хис-тойғоларҙы белдереп килергә мөмкин: *а) аптырауҙы, һоҡланыуҙы*: Ҡарасы, үҙәкте өҙҙө лә ҡуйҙы *ла баһа!* (З.Биишева). Тауышы ниндәй бит, тауышы! Таш йөрәктәрҙе иретерлек *тә баһа* (З.Биишева). Амантаев шағир икән *дә баһа!* (Ә.Бикчәнтәев). Ҡара һин, онотмаған *да баһа,* күреү менән хәтеренә төштө (С.Агиш); *б) үпкәләүҙе, хәтер ҡалыуҙы:* Беҙ әрепләшергә тип килмәгәйнек *тә баһа* (С. Мифтахов). Улай ашығып ат үлтерерһегеҙ *ҙә баһа* (С.Агиш). Туй була, тип бөтә дуҫ-дошманға белдереп бөткәйнек *тә баһа!..* Кеше күҙенә күренерлегебеҙ ҡалманы *ла* баһа! (З.Биишева). Әле Миңзифаның миңә был тылсымлы һүҙҙе телдән бер ҡасан да әйткәне булманы *ла баһа* (Ш.Бикҡол); в) *ҡыуаныСты*: Эштәр ыңғайға бара *ла баһа* (Ә.Хәкимов).

Үҙебеҙҙең улыбыҙ менән киленебеҙ *ҙә баһа!* (З.Биишева. [Ҡояшбикә:] Атаҡ... Ни эшләп урамға ҡапыл ҡот инеп китте, нур өҫтәлде тиһәм, ҡәйнәм ҡайтып килә икән *дә баһа* (Н.Асанбаев). Институтты тамамлағас, ул ошонда эшләйәсәк *тә баһа!* (Ә.Хәкимов).

*Да/дә, та/тә, ҙа/ҙә, ла/лә* киҫәксәләре башҡорт телендә күп осраҡта раҫлау-көсәйтеү функцияһын үтәп йөрөй: Мәликә йәйләүен бөтә һыйыр һауыусылар өсөн дә тәжрибә мәктәбе итеп ҡуйыу уйы тыуҙы Әхнәфтә. Бына хәҙер шул турала ҡыҙҙар менән һөйләшеү өсөн Ҡамышлы үҙәнендәге баҫыу юлы буйлап ерән алашаһын *ашыҡтыра ла* (Д.Исламов). Шул саҡ Йомағоловтың башына ҡапыл бер уй төштө: әгәр уҡыусыларҙы йыйып утауға ҡушҡанда?.. Мәктәп директорын да саҡырып алып, шулай хәл *иттеләр ҙә* (М.Хисмәтуллина). Алдар батыр, кафырҙарҙы илдән тамам ҡыумай тороп, туктау юҡ, ти ҙә ҡуя. *Ҡыуырбыҙ ҙа* (Н.Мусин). Бына беҙ ошо поезд менән күпме оҙон юлдарҙы ҡыҫҡарттыҡ. Ул шуның өсөн уйлап *сығарылған да* (Д.Юлтый).

*Да/дә* киҫәксәһе ҡылымдың төрлө һөйкәлешенең юҡлыҡ формаһы менән ҡулланылғанда ниндәй ҙә булһа эштең үтәлеүенә ҡәтғи тыйыуҙы, кире ҡағыуҙы белдерә: Шундай байҙың килене булыу кемгә тейә? Был хаҡта *һөйләмә лә* (Ф.Чанышева). *Килмә лә, йөрөмә лә* («Ағиҙел» журналы. – *Һөйләмә лә, нитмә лә,* апайғынам. Билдәре өҙөлөп торған Фәтих менән урамды бер итеп әйләнеүҙәре ни тора! (Х.Ғиләжев).

Һөйләү телендә *да/дә, та/тә, ҙа/ҙә, ла/лә киҫәксәләре* бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылымдар менән ҡулланылып, эштең көтөлмәгәнлеген сағылдыра, мәҫәлән: Килә торғас, ниндәйҙер бер тимергә *эләк тә йығыл* (Т.Ғиниәтуллин).– Ана шул Йәстәфәйгә бирәйем тип, үҫтергән инде уны хоҙай, Ваһапҡа булһын тип, үҫтергән тиһеңме әллә, – Ваһап һаман шаярып һөйләүен дауам итте, —тары инде генә бешкәйне, мин барып *ур ҙа ал* тегене (Ж.Кейекбаев). Егерме ике йыл буйы көнләп, сәғәтләп, минутлап йыйылған ғүмерҙе бер юлы ғына *түңкәр ҙә ташла,* имеш (М.Кәрим). Мин *кыҙ ҙа кит* (Һ.Дәүләтшина).

Был киҫәксәләр күп осраҡта ҡылымға, уның формаларына ҡушылып, хәл-ваҡиғаларҙың мәғәнәһен көсәйтә: Дейеүҙең өс башлыһы ул ҡамсыны күтәреп иҙәнгә төшөрә, әммә уралтып һуға алмай; алты башлыһы уралтып һуға ала; ун ике башлыһы *күтәреп тә* ала, *уралтып та* ала, башҡаһын да эшләй («Алтындуға батыр» әкиәте). Бибисара абыстай шулай һөйләнде-көйөндө лә килгәндәге кеүек елпелдәп *сығып та китте* (З. Биишева). Бына ул йәнә ялтанды, тик ҡырҡыу хәрәкәт менән алға уҡталды ла һөлгөһөн Торсонбайҙың биле аша *уратып та* алды (Н.Мусин). Камилә апай *килеп тә* инде, һыҙланыуға түҙмәй мөйөштә, үҙенең койкаһында, ыҙаланып ултырған Емеште *күреп тә* өлгөрҙө (З.Биишева). Бында *килгәс тә,* беҙҙе иркен йорттарға урынлаштырҙылар (Д.Юлтый). Хәлле генә йәшәгән хужалар, былар *килеп туктағас та,* дөйөм солан менән тоташҡан йорттоң бер

бүлмәһен бушатып та өлгөрҙөләр (Р.Өмөтбаев). Туры айғыр, бер нисә аҙым *атлағас та,* Ғафарҙың ат тота белеүен һиҙенде, уйнаҡлауын ҡуйып, буйһондо (А.Таһиров). Ҡояш байып, күҙ бәйләнерлек ҡараңғы *төшкәс тә,* Стәрлетамаҡтың Усман бай йортона төрлө яҡтан кешеләр йыйылдылар (А.Таһиров).

*Ла/лә...* киҫәксәһе ҡушма ҡылым компоненттары араһында килеп, улар сағылдырған дөйөм мәғәнәне көсәйтә: [Ғимай:] – Урынһыҙ ҡулланылған һөжүм (көлкө, ирония) ул һүҙҙәреңдең мәғәнәһен генә ашай, – тип *әйтте лә һалды* (И.Насыри). Ир-егет һымаҡ ул Һырбикә, көн буйы һыбай йөрөһә лә, арыу тигәнде белмәй, уҡ-һаҙаҡ аҫып ала ла иң алыҫтағы көтөүҙәр артынан *сыға ла китә* (Н.Мусин). Азамат *йығылды ла китте* (С.Агиш). Шулай ҙа балыҡтар һис тә абайлап тормай *килә лә ҡабалар* (З.Биишева).

Ҡабатланып килгән ҡылымдар араһында килеп, эш-хәлдең дауамлы йәки өҙлөкһөҙ булыуын күрһәтә: Алдар иһә баҫҡан ерендә *тора ла тора* (Н.Мусин). Ә ул һаман, хәл йыймайынса, *йүгерҙе лә йүгерҙе* (Я.Хамматов). Тирә-яғына иғтибар менән ҡарай-ҡарай, ҡолағын һағайтып *бара ла бара* (Н.Мусин).

Шарт һөйкәлешендәге ҡылымдарға ҡушылып, был киҫәксә ҡаршылыҡ мәғәнәһен бирә: Йылы һүҙең *булмаһа ла,* йылы ашың алдында торһон (М.Кәрим). Ул биш-алты быуын *айырылған булһа ла,* бер ырыуҙан булғанлыҡтан Ныязғолға ағай-эне һанала ине... (Һ.Дәүләтшина). Баһам түбәнерәк *булһа ла,* тамыр йәйгән еремдә ҡалам (М.Кәрим). Байғош ҡына *булһа ла,* маҡтаныуҙан башҡаны белмәй торғайны, — тип кенә һөйләштергеләп алғандар (Ф.Исәнғолов).

*Да/дә, та/тә, ла/лә, ҙа/ҙә* киҫәксәләре шулай уҡ һөйләмдә ниндәй ҙә булһа һүҙҙе айырып күрһәтә: Әллә ҡайҙарға китте беҙҙең баш, *манара ла* күренмәй (Б.Бикбай). – Алтын *ҡылыс та* ысын түгел, уның шәүләһе генә, – ти ҡола бейә. – Шәүлә генә булған өсөн уны *дейеү пәрей ҙә* ала алманы («Ҡыран батыр» әкиәте.) Лотфулланың йортона килеп ингәс, *баҫыуҙан да* әрнеп ҡайтҡан Әлфиәнең күңелендә ниндәйҙер ауыр тойғо уянды (Ф.Әсәнов). Тиреҫ ер туңын өйҙөң эс яғына үткәрмәй, ер иҙәнде *ҡоро ла* тота (Н.Мусин).

Башҡорт телендә *да/дә* һ.б. киҫәксәләр теркәүес функцияһын да үтәй: [Емеш:] – Һәйбәт булған. Минең бөгөн *бер кемде лә, бер кемде лә күргем дә, һөйләшкем дә* килмәй, беләһеңме? (З.Биишева). Иҫәкәй ул менеп еткәнсе *ҡурҡып та, һоҡланып та,* телен йотҡандай өндәшә алмай торғайны, хатта тамағы кибеп киткән һымаҡ булды (Н.Мусин). *Әсеһен дә күрҙем, сөсөһөн дә,* үкенесем ерҙә ҡалманы (З.Биишева). Алдарбайы еңел-елпе уйлап эш итә торған егет түгел. *Көс-ғәйрәт тә, ҡыйыулыҡ та* етерлек (Н.Мусин). Был осраҡта төрлө һөйләм киҫәктәре һанала:

1) эйәләр: Гармун тауышы *ла,* Әлфиәнең йөрәк түренән урғылып, ташып сыҡҡан йыр тауышы *ла* һаман көсәйә барҙы (Ф. Әсәнов). Уның

сәйҙең тәме *лә*, уйындың йәме *лә* булмаҫ (Ф. Әсәнов). Ошо буранда атайым да, әсәйем *дә* өйҙә юҡ (М.Кәрим). Туҡтағолдоң ҡурҡҡаны *ла*, инанғаны *ла* күрәҙә ине (Ғ.Ибраһимов). Әбүбәкерҙең ҡапҡаһын ҡағыусы *ла*, ишеген шаҡыусы *ла* булманы (Р.Ғабдрахманов);

2) тултырыусылар: Әхәт Аҙнаев, контораһына ингәс, урман участкаһындағы эшселәр менән һөйләшкән саҡта йомшарып ҡалыуын *да*, яңғыҙлыҡ тойғоһон *да* онотто (Н.Мусин.) Илмырҙа менән Хөсәйенгә һөрөнтө ерҙе *лә*, бесәнлекте *лә*, үҙ теләктәренән тыш, шулай йәнәшә алырға тура килде (К.Мәргән). Ләкин бәләкәйҙән ул (Айбулат) атаһынан *да*, Ниязғол ағаһынан *да* файҙа күреү түгел, үҙенең булған ғына донъяһын бөтөрөшкәндәрен күреп өйрәнде (Һ.Дәүләтшина). Ә пуля һайлап тормай, батырын да, ҡурҡағын да үлтерә лә ҡуя шул (Т.Ғиниәтуллин);

3) аныҡлаусылар: Бөтә нәмәләрҙең *дә* йәндәре бар – ағастарҙың *да*, таштарҙың *да* , үләндәрҙең *дә* (М.Кәрим). Асыулы *ла*, һөйкөмлө *лә* үҙе... (Г.Ҡотоева). Күренеш ҡурҡыныс *та*, ҡыҙыҡлы ла төҫкә әйләнде (С.Агиш). Тормошта хәтер ҡалдырышҡан *да*, ыҙғышып киткән *дә* саҡ аҙ булмай (Ғ.Хисамов);

4) хәлдәр: а) ваҡыт хәлдәре: Һыуыҡта *ла*, эҫелә *лә* унын ике бит алмалары гел ҡыҙарып янып тора (М.Кәрим). Өндә *лә*, төштә *лә*, аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә, серҙе сисмәҫкә булдыҡ (М.Кәрим);

б) урын хәлдәре: Баҫыу эшендә *лә*, йорт эшендә *лә* гел ҡатын-ҡыҙ (К.Мәргән). Әйтәм бит, йөрөмәгән еребеҙ ҡалманы – йәшелсә баҡсаһында *ла*, умарталыҡта *ла*, кирбес һуға торған ерҙә *лә* булдыҡ (М.Кәрим);

в) рәүеш хәлдәре: Хәҙерге заманда башҡортса *ла*, русса *ла* берҙәй матур һөйләй белгән таланттарҙы театр артистары араһында ла табыуы ҡыйын («Ағиҙел» журналы). Вәлиулла йыш ҡына ҡыҙығып *та*, ҡыҙғанып *та* ҡарап тора: былай ҙа күҙ ҡамаштырғыс матур Гөлсибәр («Ағиҙел» журналы);

г) күләм хәлдәре: Күп *тә* түгел, аҙ *ҙа* түгел – йөҙ гектар (К.Мәргән).

**Бит** киҫәксәһе хәл-ваҡиғаларҙың булыу-булмауын раҫлауҙы, дөрөҫләүҙе көсәйтеү өсөн бик актив ҡулланыла.

Был киҫәксә лә модаль мәғәнәгә эйә: а) раҫлауҙы көсәйтә: Насип булғас, бына тағы килеп тап булыштыҡ *бит!* (М.Хәйҙәров). Бер тура килһә, килә *бит* (Ә.Вәли). Беҙҙең тағы ла бер әсәйебеҙ бар, тигәйнем *бит* һиңә, Йәмил (М.Кәрим). Ә ул әлифба һәр кем өсөн бөтәһенән элек үҙен тыуҙырып үҫтергән ғаиләнән башлана *бит* инде... (З.Биишева).Күрше-тирә аптырап китте: донъяла барлығы-юҡлығы ла беленмәгән Аллаяр ҡайтып төшкән *бит* (Ф.Иҫәнғолов). Үҙегеҙ Өфөгә киткән саҡта саратский гармунығыҙҙы атайыма бүләк итеп биргәнһегеҙ *бит!* (Ф.Әсәнов). Бәләкәй саналар менән булһа ла, ихатаға утыҙ йөк шыҡылдап торған ҡоро утын килеп инде *бит!* (Ф.Иҫәнғолов); б) һоҡланыуҙы, аптырауҙы белдерә: Һеҙҙең яҡтарҙың тәбиғәте бик гүзәл *бит!* (Д.Исламов). [Гөлшат:] Ҡарасы, был «Урал» көйө

*бит!* (С.Мифтахов). Ә буйға ла, аҡылға ла ете йәшлек Йәнештән иҫлерәк *бит* ул! (З.Биишева). Бойҙай ҙа шәп *бит,* Әнүәр ағай (Ә.Вахитов); в) үкенесте, ҡәнәғәтһеҙлекте күрһәтә : Хәҙер был урында бер генә матур нәмә лә ҡалмай *бит!* (З.Биишева). Һинең ҡайҙа уҡығаныңды һорамайҙар *бит* (С.Агиш). Быйыл шул мейесте боҙоп, яңынан сығарырға ҡул тейМәне *бит* (Һ.Дәүләтшина). Шул старшина тамам елкәгә тейҙе *бит* (Б.Бикбай); г) шатлыҡты белдерә: Йөҙөкәй, был ағайымдар *бит!* (З.Биишева). Килеп сығып, арыу иттең *бит* әле, хоҙайҙың рәхмәте төшкөрө (Н.Мусин). Беҙ килеүгә егеттәр бына ниндәй эш урыны әҙерләп ҡуйғандар *бит* (Р.Өмөтбаев).

Башҡорт теленең һөйләштәрендә әйтелгән фекерҙе көсәйтеү өсөн -*ҡуй/-ҡый, -ғуй* киҫәксәләре лә ҡулланыла: Мин һиңә әйттем *ҡый*, эшкә барҙым *ҡый* һ.б. Был киҫәксәнең төп мәғәнәһе раҫлауҙы, конкретлыҡты, ышанысты белдереүгә ҡайтып ҡала: Алыҫ тип ни, ат етмәҫлек ер түгел *ҡуй* (Һ.Дәүләтшина). Беҙҙә уға тиң булырлыҡ егет табылмаҫ *ғуй* (М.Тажи).

Саҡырҙым *ҡый*, килмәнең *ҡый,*
Йәндәремде ҡыйҙың *ҡый* (Йырҙан).

Башҡорт телендә **ул** алмашын киҫәксә функцияһында ҡулланыу осрай. Был киҫәксә раҫлауҙы, дөрөҫләүҙе көсәйтеү өсөн ҡулланыла: Батшаның манифесы – ҡапҡан ғына *ул* (Һ.Дәүләтшина). Башлап ҡуйған сирек сәй эсмәһәң дә бөтә *ул* (Халыҡ йыры). Улай күкрәк киреп йөрөү ярамай... Эйелгән башты ҡылыс сапмай *ул* (Һ.Дәүләтшина). Шымбай ҡарт быны яҡшы хәтерләй *бит ул!..* (З.Биишева). Дөрөҫлөктөң үҙ яғында икәнен белгән кеше сыҙам була *ул!..*(Д.Исламов).

*Ул* киҫәксәһе нигеҙҙә *ине, икән* ярҙамсы ҡылымдары менән килә: – Ҡайҙа йөрөһәң дә, илгә-көнгә файҙалы кеше булырға кәрәк. Ир маҡсаты шулай булырға тейеш. Донъяға ике тыуһаң *ине ул,* — тине Шәйхетдин бабай (М.Хисмәтуллина). Булат, арлы-бирле йөрөштөрөп, үҙе һаҡлай торған посты бөтә яҡтан күҙәтергә тырышты... – Берәй батырлыҡ күрһәтәһе *ине ул* ауылға ҡайтҡансы, – тигән уй йүгереп үтте уның башынан (Р.Байымов). Ә бына хан өлөшө теңкәгә тейә лә баҫҡаҡ өлөшө елкәгә менә *икән ул!* (К.Мәргән). [Айһылыу:] Эй Гөлбикә дуҫҡайым, үгәй әсәй менән тороуы бик ҡыйын *икән дә ул!* (С.Мифтахов).

Ҡабатлауҙарҙа *ул* киҫәксәһе дөйөм мәғәнәне көсәйтә: [Юламан:] – Һай, килмәгән ере юҡ был сабыйҙың: *ул* буй, *ул* һын, *ул* һиҙгер, изге йөрәк (З.Биишева). Ғәләмәт шәп ине Сәлимгәрәй бабайҙың баҡсаһы. *Ул* емеш ағастары, *ул* еләктәр (Ф.Рәхимғолова). Ҡыш уртаһына тиклем тиерлек орлоҡто берәмләп сүпләне. Азоты-маҙары ҡалманы. *Ул* тиреҫ, *ул* көл, *ул* ҡош тиҙәге ташыу – барыһы ла иң элек уға! (Д.Исламов). Депутат та, делегат та булды, йөрөтмәгән ер ҡалдырманылар – *ул* Өфө, *ул* Мәскәү, ә районды инде иҫәпкә алған да юҡ (Р.Солтангәрәев).

Раçлауҙы, дөрөçләүҙе белдереүсе модаль киçәксәләр функцияһында **шул** күрһәтеү алмашы  ла актив ҡулланыла:  Осор инем, шашынып осор инем, онотолған *шул* бала шатлығым (Х.Ҡунаҡбай). Мин алйот ни, шул көндәштең һүҙен тыңлаған булдым *шул* (Һ.Дәүләтшина). Килеп-килеп тороп «Буранбай»ҙы йырлап ебәргәйнем, малай, бабайҙың күҙ йәштәре һаҡалы буйлап тәгәрәне *шул* (Һ. Дәүләтшина). Беҙ унда иң бәхетле көндәребеҙҙе йәшәнек *шул* (Ф. Иçәнғолов).

*Шул* киçәксәһе ҡылым-хәбәр менән килеп, модаль мәғәнә төçмөрләктәрен дә белдерә, мәçәлән, үкенеүҙе, ҡәнәғәтһеҙлекте: [Айһылыу:] Мин һине алдап торамдыр *шул* (С.Мифтахов). Йәйҙәр ҡыçҡа *шул* беҙҙең яҡтарҙа (Ф.Иçәнғолов). Тик мәҙрәсәләре бәләкәй ине *шул* (Ғ.Хөсәйенов). Донъялағы булған һәммә нәмәләр ҙә бер туҡтауһыҙ хәрәкәттә булһалар ҙа, һағындырып килә торған йәй көндәре бигерәк тә ашығыслыҡ менән үтәләр *шул!* (Ғ.Дәүләтшин). Беҙҙең йәш саҡтарҙы һағынып иçкә алырға ғына ҡалды *шул,* улым! (Ф.Әсәнов).

### *Йөкмәтеү киçәксәләре*

Йөкмәтеү киçәксәләре һөйләүсенең, тыңлаусының һәм башҡа субъекттарҙың ихтыяры, эшмәкәрлеге менән бәйләнгән эш-хәлдәрҙе, саҡырыуҙы, өндәүҙе, үтенеүҙе, инәлеүҙе, ялбарыуҙы белдерә. Был төркөмсәгә *-һана/-һәнә, -сы/-се, -со/-сө, әле, инде* киçәксәләре инә.

**-сы/-се, -со/-сө** киçәксәләре

*-сы (-се, -со, -сө)* киçәксәләре бойороҡ, шарт, хәбәр һөйкәлешенән килгән хәбәр формаларына ҡушылып, төрлө мәғәнә нескәлектәрен белдерә, мәçәлән, үтенеүҙе, инәлеүҙе: Туҡтағыҙ, көтөгөҙ, ул хәтле *ашыҡмағыҙсы*, күҙ алдымдан юғалмай *торогоҙсо*, минең ҡәҙерле минуттарым! (З.Биишева). [Тәнкәбикә:] Аҡһаҡалдар! Сабыр *итегеҙсе*. Һүҙҙәремә ҡолаҡ һалығыҙ! (М.Кәрим). – *Ҡуйсы*, ағай, ерле юҡты *һөйләмәсе* (Ғ.Ғүмәр). Рәхим итеп ҡабул *ҡылығыҙсы* (Н.Мусин). *Ҡуйсы,* бейем, юҡҡа юрап *тормасы,* — тип, Өммөгөлсөм апай илай башланы (З.Биишева).

Бойороҡ һөйкәлеше формалары  менән ҡулланылғанда, был аффикс бойороуҙы йомшарта: Сабыр *итсе*, апай, исмаһам, һин йәнемә теймәç инең (Б.Рафиков). Шулай уҡ был киçәксә бойороҡ һөйкәлешенә ҡушылып, үкенесте лә белдерә: Әй, *китсе-китсе,* ошондай көндө өйҙә *тормасы* (З.Биишева). *Ҡуйсы,* харап иткәндәр үҙен («Ағиҙел» журналы).

Шарт һөйкәлешенән килгән хәбәр формаларына ҡушылып, түбәндәге мәғәнә нескәлектәрен белдерә:

а) көслө теләк, үтенеү: – Эх, күгәрсенем минең, исмаһам, ҡош телендәй генә хәбәр *ебәрһәңсе!* (Д.Бүләков). Үҙең дә миңә бер ҙур рәхимлек *күрһәтһәңсе!* (Ғ.Ибраһимов).

Эй кешеләр, үҙе иҫән саҡта

*Белһәгеҙсе кеше* ҡәҙерен!.. (Р.Ғарипов).

Сыбар-ала тайың *менһәңсе,*

Егетеңде барып *күрһәңсе.* («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әкиәте).

б) саҡырыу, кәңәш: – Бында һинең дә ғәйебең бар, ҡустым. Элегерәк, һис юғында көндөҙөрәк килеп *әйтһәңсе,* — тине ул ниндәй ҡарарға туҡталырға белмәйенсә (Я.Хамматов). Өйрәнгән ер сабыуға яҡшы, тигәндәр. Шул байыңа ғына хеҙмәт *итһәңсе* (Ғ.Ибраһимов. – Бынау тиреләрҙе алып *һалһаңсы,* Талип, - тип, Оло инәйем йомошон йомошларға ашыҡты (М.Кәрим). – Бынау ыжғыр далала ҡышҡы һыуыҡта мал артынан йөрөү бала-саға эшеме? Һис юғы күс тирәһендәге йомош-юлға *ҡуйҙырһаңсы* шуны, - тип ялынды (Ә.Хәкимов).

*-сы/-се, -со/-сө* киҫәксәләре халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, поэзияла киң ҡулланыла:

Сыбар ала тайың *менмәсе,* балам,

Ир-зат ҡашына *йөрөмәсе,* балам. («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әкиәте)

*Ҡысҡырмасы*, кәкүк, ай, янымда,

*Ҡысҡырһаңсы* кәкре ҡайында. (Халыҡ йыры).

Изге фатиханды *бирсе,* әсәй,

Башыбыҙға һал шәфҡәт ҡулыңды. (М.Кәрим).

**Әле** киҫәксәһе

**Әле** киҫәксәһе ҡылымдың бөтә заман һәм һөйкәлеш формалары менән ҡулланыла: *килде әле, килгән әле, килгәйне әле, килдем әле, кил әле, килһен әле, килер ине әле, киләйек әле, килмәксе әле, килһенсе әле и һ.б.*

*Әле* киҫәксәһе түбәндәге мәғәнә төҫмөрлөктәре бирә:

а) үтенеү: — Йә ташла *әле,* Ефим ағай, һөйлә *әле!* (Ғ.Хәйри).– Һеҙ, Ғаһил Ғималович, тағы ла бер тапҡыр һөйләшеп ҡарағыҙ *әле* (Т.Сәғитов). – Уландарым, килегеҙ *әле* (М.Кәрим). – Ҡустым, хәҙер һиңә бер йомошом бар, Талха менән Сәхипте, Рәжәпте, Ғазали ҡартты, Мазһарҙы йәһәт кенә саҡырып кил *әле* (Я.Хамматов);

б) саҡырыу, һорау: — Альберт, һөйләмә юҡты. Әйҙә, *ҡайтайыҡ әле,* һүрел әҙерәк (Р.Солтангәрәев. Ҡана, бер һәйбәтләп, сәхрәлә иркенләп сәй *эсеп алайыҡ әле* (Һ.Дәүләтшина). Башта бөйөклөк, олуғлыҡ мәсьәләһен *асыҡлап бөтөрәйек әле* (Б.Рафиков). – Ял иткәндә лә шул һыйырҙар тураһында *һөйләшмәйек әле* (Д.Исламов);

в) талап итеү: – Эй, иптәш рәйес, миңә һүҙ *бир әле!* (Ғ.Хәйри). [Ғариф:] – Ниңә ҡабат ҡайтҡан ул? Бына шуны *әйтһен әле* ул беҙгә (Б.Бикбай). [Дейеү:] – Ярар, яҡшы булған. Тик *әйт әле,* кейәү, тормошта нимә әсе, нимә йомшаҡ, нимә ҡаты? (Әкиәттән). Минең күршегә *теймәгеҙ әле* (З.Биишева). Киленгә һис нәмә *әйтмәгеҙ әле* (Ғ.Ибраһимов);

г) бойороуҙы белдерә: – Солтанов! Ебәр *әле* берәй кешеңде! (Н.Мусин). – Йырма *әле* шул ауыҙыңды! («Ағиҙел» журналы). – Һүҙҙе бүлмә *әле*, – тип Мәликәгә ябырылды Ғариф ҡарт (Д.Исламов). Хәҙрәт был гонаһлыларға бик асыу менән күҙ йөрөтөп алғандан һуң, һүҙ башлап: – Йә, кемдәр күргән?.. Шулар алғараҡ *сыҡһындар әле!..* (М.Ғафури);

д) аптырау, һоҡланыу, ҡәнәғәтһеҙлек төҫмөрөн бирә: – Йә, ошо йәшенән туйғансы һөт-ҡатыҡ эсмәй үҫһен *әле!* (З.Биишева). – Ҡара *әле*... Еләк бешкән икән дә... («Ағиҙел» журналы). Был көндәрҙә Йөҙшишмә ауылы ҡымжып торҙо. Өфөнөң үҙенән, ҡаланы ташлап, уларҙыҡы кеүек ҡараңғы, хатта телевизорҙары ла булмаған ауылға ауыл хужалығы академияһын бөтөргән кеше үҙе килеп төшһөн *әле!* (Д.Бүләков). Әҙәм көлкөһө бит, алты ай ҙа ун көн ҡулыңа мылтыҡ тотмай тиңтерәп йөрө *әле* (А.Таһиров). *Карале*, малай ғына килеш һаҡал ебәргән (Н.Мусин). Туҡта, был ниндәй тауыш булды һуң *әле?* (С.Агиш). Йә инде, ейәнсәрем уҡыһын тип, шул йәшкә еткәс, бура бурап йөрөһөн *әле* (Н.Мусин). Ниндәй матур исем, үҙе Ғамир менән һүҙмә-һүҙ тип әйтерлек, йәтеш кенә тап килеп тора *бит әле* (Б.Бикбай). – Йәйҙең матурлығын әйт *әле,* – тип һоҡланды ҡыҙҙар (Д.Исламов). – Ҡара *әле*, малай, мунсала, ысындан да, матур ишетелә икән гармун тауышы! – тип һоҡланды Әхәт (Ф.Әсәнов). Мин молитва уҡып ултырырлыҡ бабай түгел бит *әле* (Һ.Дәүләтшина) – Юлыҡтырыу юлсынан тиһәләр ҙә, Ҡотлоюл сотник йүнле әйтә алманы бит *әле.* – Шулай уйланып башланы һүҙен аҡһаҡал (Ғ.Хөсәйенов). Әллә ни эшләп һаман сапҡыны юҡ бит *әле* (Һ.Дәүләтшина). Һинең туй һыйыңды һаман күргән юҡ *әле* (Б.Бикбай);

е) раҫлау: Бик бәләкәй шул, сабыйҡай *әле* (М.Кәрим). Йәш шул *әле* (Ғ.Ибраһимов). Иң ҙур һынауҙар алда *әле* (Ә.Бикчәнтәев). Мин һуғышҡа киткәндә, бала ғына ине *әле* (Ф.Иҫәнғолов). Мин егерме биш көнлөк кенә *бит әле,* ағай! («Алпамыша»). Улым менән һөйләшеп тә туйманым *бит әле,* Зәйтүнгөл (Н.Асанбаев). Быйыл әллә ни бик ныҡ бирешелде *бит әле* (Һ.Дәүләтшина). Ҡушкөбәк ике аяҡлы төлкөнө тоторға ла яраны *бит әле!* (С.Мифтахов);

е) фараз итеү: Бәлки, мылтыҡ тотҡаны ла барҙыр *әле* (Ә.Хәкимов). Мин гел былай кешегә эшләп йөрөмәм *әле* (Т.Йәнәби). Ихтимал, анау тамсыларҙан ғүмерлерәкмендер *әле?* (М.Кәрим). Бер саҡ ҡурай моңо үҙе шул тоҡомдаштарына, туғандарына арналған йырҙарҙа батырҙарының ажарлы ауаздарын да, ҡатын-ҡыҙҙарының аһ-зарын, һыҡташын да, сабыйҙарҙың сарбайлауҙарын да, үлемесле яралыларҙың иңрәүҙәрен дә ишеттерер *әле* (Ғ.Хөсәйенов);

*ж)* киҫәтеү: Эй... Аптырар сағың алда *әле* (З.Биишева).

**Инде** киҫәксәһе

**Инде** модаль киҫәксәһе, бойороҡ һөйкәлешенән килгән хәбәрҙәргә эйәреп, саҡырыуҙы, үтенеүҙе белдерһә, хәбәр һөйкәлеше формалары менән бергә килеп, һөйләмдә бирелгән уй-фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлауҙы бер ни тиклем эмоциональ планда күрһәтә: Киткәненә бишенсе көн *бит инде* (Н.Мусин. Ҡулдан килгәнсе ярҙам итербеҙ *инде* (Н.Мусин). *Инде,* ҡарттар, һүҙ көрәштереп эш сығара торған ваҡыт үтте (Һ.Дәүләтшина). Мин был ҡаланың буйын да, арҡырыһын да үлсәп сыҡҡан *инде* (С.Агиш).

Бойороҡ һөйкәлешенең II зат формаһы менән килгәндә, а) көслө бойороуҙы: Ҡайта һал *инде.* Эштәр көйһөҙләнеп бара (Б.Рафиков). Исмаһам, бында йәнемде ҡыйма *инде* (Н.Мусин). Туҡтағыҙ *инде,* ярһымағыҙ (А.Таһиров). Ҡуйығыҙ *инде,* сәйнәмәгеҙ шул бер балыҡ башын (Р.Солтангәрәев). Йә, хәбәр һатып ултырмағыҙ *инде* (Ж.Кейекбаев); б) үтенеүҙе, ялбарыуҙы: Һин минең икмәк бешереүсе улы икәнемде кешегә һөйләмә *инде* («Башҡорт халыҡ ижады»). – Гөлйөҙөм, ҡурҡма *инде,* тыныслан! (Һ.Дәүләтшина). Ауылдан саҡлы гармун ҡәҙәр гармун күтәреп килгәс, әйҙә, Камил, бер бейеү көйө лә уйнап күрһәт *инде* беҙгә! - тине Рабиға (Ф.Әсәнов). – Тағы ла бер-ике йыл ғына эшлә *инде,* - тигән тимерсе (Башҡорт халыҡ ижады); в) ҡәнәғәтһеҙлекте белдерә: Бүтәндәр ил-ил булып һуғышып йөрөгәндә, бер үҙең исемһеҙ-ниһеҙ ситтә тороп ҡал *инде* (М.Кәрим). Бер үткенсе һүҙенә ҡарап, үҙ байлығыңдан ҡолаҡ ҡаҡ *инде* (Х.Ғиләжев). Әллә ҡайҙан, йәһәннәм тишегенән, ашҡынып ҡайтып төш тә, үҙеңдең ата-әсәйеңде күрә лә алмай йөрө *инде* зар-интизар булып (Д.Бүләков). Ниндәй генә ауыл кешеһе ишек алдыһыҙ-ниһеҙ кирбес йортта йәшәүҙе хуп күрһен *инде!* (Р.Солтангәрәев) .

**-һана, -һәнә** киҫәксәһе

**-һана, -һәнә** модаль киҫәксәһе тик бойороҡ һөйкәлеше формаһына ғына ҡушылып килә. Күберәк халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, шиғри әҫәрҙәрҙә осрай. Был форма көслө үтенесте, һорауҙы белдерә. Миҫалдар:

Алпамыша батыр, *баҡһана,*
Ҡурайыңды тағы *тартһана,*
Моңландыра биреп *өрһәнә,*
Хан ҡыҙҙары күңелен *күрһәнә* («Алпамыша» әкиәте).
*Ҡараһана,* Сәлимә, күҙемә,
*Ышанһана* әйткән һүҙемә (Халыҡ йыры).
*Торһана ла,* ҡыҙым, *торһана,*
*Торһана ла,* ҡыҙым, *торһана,*
Күс ярағын *күрһәнә...* («Иҙел йорто» ҡобайыры).

Йыш ҡына модаль киҫәксәләр бергә ҡулланыла: [Лоҡман:] *Ярһымасы әле,* матрос! Һин, кәнишнә, ситтә йөрөп, зиһен арттырып ҡайтҡан кеше...

(Р.Сафин). Сәғит ағай, һеҙ ни өсөн өндәшмәç булдығыҙ? Берәй нәмә *һөйләгеҙсе әле!* (Ә.Бикчәнтәев). Өçтөңдәге һылыуыңды төшөрсө *әле,* юрғам (Халыҡ йыры).

### *Гипотетик модаль киçәксәләр*

Башҡорт телендә түбәндәге гипотетик модаль киçәксәләр бар: ***-дыр/-дер, -ҙыр/-ҙер, -лыр/-лер, -тыр/-тер, әлләә.***

Был киçәксәләрҙең төп мәғәнәһе икеләнеүҙе, билдәһеҙлекте һәм аныҡһыҙлыҡты белдереүгә ҡайтып ҡала. Әммә контекста улар башҡа бик күп мәғәнә төçмөрлөктәрен белдереп килергә мөмкин. Икеләнеүҙе белдергән киçәксәләр һөйләмдең баш киçәктәренә лә, эйәрсән киçәктәренә лә ҡушылып килә ала. *-дыр/-дер* киçәксәләре һәм уның фонетик варианттары хәбәр һөйкәлешенең билдәһеҙ формаларына ҡушылып, икеләнеүҙе, билдәһеҙлекте көсәйтәләр. Шуны ла әйтергә кәрәк, һөйләмдә *-дыр* киçәксәһе менән бер рәттән икеләнеүҙе белдергән инеш, модаль һүҙҙәр ҙә йыш ҡулланыла. Миçалдар: Ул йомош менән килгәйне, тик һине һорап, дәрәжәһен артыҡ төшөрөргә *теләмәгәндер инде* (Р.Солтангәрәев). Тыуған иленә *ҡайтаһы килгәндер* (А.Карнай). Донъя булғас, төрлө кеше *барҙыр* шул («Ағиҙел» журналы). Әминәнең үҙендә лә ғорурлыҡмы, тәкәбберлекме көслө шул, ихласлыҡ, иғтибарлыҡ *етешмәйҙер* (Н.Мусин). Тыуған иленә *ҡайтаһы килгәндер* (А.Карнай). Бәлки, берәйһендә *һаҡланалыр* (М.Кәрим). Бәлки, *яңылышамдыр, аңлап етмәйемдер* (Р.Байымов). Тағы башыма төрлө шомло уйҙар килә: моғайын, буранға эләккәндәрҙер ҙә *ҡайтып етә алмағандарҙыр* (Ф.Әхмәтов). – Ә хәҙер көтөүгә бар, юғиһә үҙеңде Шәрәфи *юғалтҡандыр* (Д.Исламов). Бәлки, ул ошо *ҡыҙ өсөн дә* ауылына һуғылып китергә булғандыр (З.Биишева). Бәлки, йондоҙҙар шулар менән *шаярыр* өсөн тау түбәһенә төшкәндәрҙер (М.Кәрим. Һабрау үҙенең бер ҡатлы ҡылығына әсенеп йылмайҙы: әлбиттә, һис кем иғтибар итмәгәндер уның хатына (Ә.Хәкимов). Залдан ғәжәп матур моң ишетелә, әммә шөғөлләнеү түгел, ябай ғына *күнекмә лә* эшләп булмайҙыр (Ф.Исхакова);

*-дыр* киçәксәһе исемдәргә, исемләшкән формаларға ла ҡушыла: Был үҙе сабыйлыҡ түгелме? *Сабыйлыҡтыр,* моғайын. Шулай *күпмелер* барғас ҡына үҙенең Ағиҙелгә ҡарай елдереүен шәйләп ҡалды (Р.Байымов). «*Шулайҙыр* ҙа, кем, туған, – тине кеселекле генә, – тик ауыл халҡы тураһында ҡайғыртырға кәрәк бит» (Р.Байымов). Матур Юрматы яҡтары. Ожмахтың бер *мөйөшөлөр* (Б.Рафиков). Ҡана әле, был Йәғәфәр олатайығыҙ бахырҙан ҡалған *толоптор,* моғайын (Р.Шәкүр). Ябай туҡыманан ғына булһа ла, *одеялдыр, мендәр тышылыр, юл капсығылыр* бирҙеләр (Ф.Иçәнғолов). Уларҙы башҡаса көтөп ултырырға кәрәкмәй, яҙғаны *ошолор,* тип ашыҡҡан (Һ.Дәүләтшина). Шулай *күпмелер* барғас ҡына үҙенең Ағиҙелгә ҡарай елдереүен шәйләп ҡалды (Р.Байымов).

**Әллә** киҫәксәһе

**Әллә** киҫәксәһе икеләнеүҙе фараз итеүҙе, һөйләүсенең хәл-ваҡиғаларға субъектив-эмоциональ мөнәсәбәтен сағылдыра: – *Әллә* берәй сихырын беләинде, тирләп-бешеп унын сәйен эсһәм, ғәйрәт артып китә! (Д.Исламов). Әйтмәй *әллә*, колхоз һауын һыйыр түгел бит (М.Тажи). *Әллә* русса белмәй тигәс тә (С.Агиш). – Нимә, йәш мулла, намаҙ уҡырға бүтән урын *тапманыңмы әллә* (Б.Рафиков). Ниңә, беҙҙе ярлылар көтмәй *тиһеңме әллә?* Беҙҙе ана шулар көтә (Һ.Дәүләтшина). *Әллә* зиһенем зәғифләнде инде, халыҡтан ҡурҡа башланым, Әмир (Х.Ғиләжев).

*Әллә* киҫәксәһе үҙенең төп мәғәнәһен юғалтмайынса, һөйләмдә теркәүес функцияһында ла ҡулланыла: а) һөйләмдең тиң киҫәктәрен теркәй, мәҫәлән: *Әллә* таныманы Бәғиҙә, *әллә* икенсе кеше тип уйланы, һирпелеп кенә ҡараны ла, аҙымын йәһәтләп, һарайға инде лә китте (Ш.Янбаев)». Иртә менән һыйырҙарын көтөүгә сығарған көтөүсе Ғәзим *әллә* һоҡланып, *әллә* ҡыҙғанып ҡараны (Ф.Чанышева). – *Әллә* эреләнеүең, *әллә* әҙәмгә һанамауың, бер ҙә ағайыңа күренгәнең юҡ был арала (С.Шәрипов). – Һе, *әллә* ҡунаҡ, *әллә* муйнаҡ, белмәйбеҙ бит әле, — мөдир шофер егетте баштан-аяҡ ҡарап сыҡты (Д.Бүләков). Мин белгәндән *әллә* кемдәрҙән, *әллә* ҡайһы ауыл кешеләренән өшкөрттөләр (М.Ғафури). Әсәйем дә был һүҙҙәрҙе ишеткәс, *әллә* шатлығынан, *әллә* аптырауынан байтаҡ ҡына һүҙһеҙ торҙо (Ф.Әсәнов); б) теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәрҙе теркәй, мәҫәлән:– Айытбай, - тип өндәшмәй түҙә алманы Рәйлә, - *әллә* ысынлап та эштәрең хөрт, *әллә* бөтөнләй бушты яҙа Ҡарабашев (Ә.Вахитов).

### *Һорау киҫәксәләре*

Хәҙерге башҡорт телендә түбәндәге һорау киҫәксәләре ҡулланыла: **-мы/-ме, -мо/-мө, -мыни/-мени, -мо ни/-мө ни, -мы икән /-ме икән, -мы әллә/-ме әллә, -мы һуң/-ме һуң, -мы икән ни/-ме икән ни.**

Һорау киҫәксәләре һорау һөйләмде грамматик планда формалаштырыуҙа төп сараларҙың береһе һанала.

Һорау киҫәксәләре бөтә үҙ аллы һүҙ төркөмөнә ҡушыла ала: исемдәргә — *китапмы? ҡағыҙмы? кешеме?;* сифаттарға — *матурмы? йәшелме? бейекме?;* һандарға — *алтымы? йөҙмө? етеме?;* алмаштарға — *беҙме? улмы? былаймы?;* ҡылымдарға — *киләме? барамы? һөйләйме?;* рәүештәргә — *тиҙме? бөгөнмө? һыбаймы?* һ.б.

Һорау киҫәксәләренең мәғәнәһендә һорау элементы өҫтөнлөк итә. Һорау киҫәксәһе ҡушылған һүҙҙәр айырым интонация менән әйтеләләр: – Эй, Ҡыҙырас килде! Шәп булды. Нимә уйнатабыҙ? *Патефонмы,* әллә *приемниктымы?* (З.Биишева)? – Былар кемдәр һуң, ҡустым, *актармы,*

*ҡыҙылдармы?* – тип шыбырлаштылар (Һ.Дәүләтшина). – Шакирйән ҡайҙа, *эштәме?* (Р.Солтангәрәев). Унын сәстәре ниңә шул тиклем ағарған? Әллә бик *оломо?* (Д.Бүләков). Һеҙҙең исемегеҙ *Сираймы?* (Ә.Вәли). Ҡыҫҡаһы, *бөттөмө?* (Д.Бүләков). Һеҙҙең Бөркөтлөлә *булғанығыҙ бармы?* (М.Кәрим). Колхоз радиоузелы *төҙәлдөмө?* (Б.Бикбай). Рудникта үҙеңде Сәлих менән бергә һуҡтырғандарын *онотманыңмы?* (Ғ.Хисамов). Һеҙ әллә унда һыуға *баттығыҙмы?* (М.Кәрим).

Һорау киҫәксәләре һөйләмгә төрлө эмоциональ һәм модаль мәғәнә төҫмәрҙәре бирә. Мәҫәлән, ҡылымдың III зат бойороҡ һөйкәлешенең юҡлыҡ формаһына ҡушылып, һөйләүсенең берәй эш-хәрәкәттең башҡарылыуына аптырауын белдерә: Ун биш минут та үтмәне, машина, арттан ҡар ҡатыш төтөн бөркөп, гөрләп *эшләй башламаһынмы?* (Ғ.Лоҡманов). Шул саҡ нисек йөрәгем ярылманы... минең иҫке генә көҙгө пальтомды, таушалып бөткән картузымды тотоп, йылмайып, Раушания алдыма килеп *баҫмаһынмы?* (М.Әбсәләмов). Райкомдың икенсе секретары ҡыҫҡа, әммә тос ҡына һөйләп туҡтағандан һуң, тоҡ бүҫелде тиерһең: юғарынан ныҡлы таяныс барлығын тойған колхозсылар таснатып тураһын *һалдыра башламаһынмы!..* (А.Баһуманов). Был егет уға ҡаршы *йырлап ебәрмәһенме...*(Б.Бикбай).

*-Мы ни /-ме ни* киҫәксәләре һорау һөйләмдәргә аптырау, асыу, ҡәнәғәтһеҙлек һ.б. мәғәнә төҫмөрҙәрен өҫтәй: – Бәй, минең *үҙемәме ни?* (Ф.Иҫәнғолов). Бөгөн һабаҡта ултырған игендең иртәгәге икмәк һәм ит икәнен *белмәйһегеҙме ни?* (Ғ.Хисамов). Зәйтүнә иренә ғәжәпләнеп ҡарап алды: «Бына кәрәк булһа... Мин *килмәнемме ни?»* (Б.Бикбай). Ун биш саҡрым алыҫлыҡтағы сабынлыҡтан ат ҡыуып ҡайтып, иртәнсәк йәнә килеп *йөрөйһөңмө ни?* (Н.Мусин).

*-Мы ни/-ме ни* киҫәксәләре шулай уҡ риторик һорауҙы ла белдерә: Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ошо үҙе *батырлыҡ түгелме ни*? (Н.Мусин). Теге тинтәк тағы үҙенсә яуап ҡайтарған: «Һәй, мал *бөтә, тиме ни*?» («Башҡорт халыҡ ижады»).

*-Мы/-ме* киҫәксәһе *икән* икеләнеүҙе, билдәһеҙлекте белдерә: Тик бына атаһы уны ысынлап та үҙе менән бергә алып *китерме икән?* Әллә, әҙерәк кенә оҙатҡас та ҡайтарып *ебәрерме икән?* (З.Биишева). Әллә телеграмма барып *етмәнеме икән?* (Д.Бүләков). Әллә берәй хәл килеп *сыктымы икән?* (Д.Юлтый). Үҙенә күрә бәләкәй генә алдашыу, ә алдашыуҙан да ҙурыраҡ яйһыҙлыҡ *бармы икән?* (С.Агиш).

Башҡорт телендә һорау киҫәксәләре төрлө синтаксик функциялар үтәй. Мәҫәлән, **-мы/-ме** киҫәксәһе:

1. Тиң киҫәкле хәбәр һөйләмдәрҙә бүлеү теркәүесе урынында ҡулланыла: —Товарищ, иптәштәр, һеңел, туташтар, бирегеҙ *әле* миңә бер *брошкамы, йөҙөкмө...* (С.Агиш). *Дөрөҫмө, юҡмы* – тормош күрһәтер («Башҡортостан» газетаһы). *Бөгөнмө, иртәгәме* ҡайтып етергә тейештәр

*инде* (Ә.Бикчәнтәев). *Утерме, юҡмы,* көн улайға китһә, быңдай йәйгә бик ышанып та булмай (Ә.Вахитов).

2. Ваҡыт йәки шарт эйәрсән һөйләмдәрҙә эйәртеү теркәүесе функцияһында килә: Имәнғол Әйүповты *күрҙеме* – ене ҡуба ла китә (Н.Мусин). Ғәрипйәнгә барып *күрендеңме* — ысҡынырмын тимә (М.Кәрим). *Өф иттеңме,* бар хозурлыҡ осоп юғалыр төҫлө... («Башҡортостан ҡыҙы» журналы).

### *Билдәләү киҫәксәләре*

Был төркөмсәгә түбәндәге киҫәксәләр ҡарай: ***нәк, тап, ҡап.*** Был киҫәксәләр исемдәр йәки исемләшкән һүҙбәйләнештәр менән ҡулланылып, уларҙың мәғәнәһен асыҡлау, аныҡлау өсөн хеҙмәт итә: *Тап* шул һүҙҙе әйттергеһе килә ине Шаҡмаңдың, *тап* шуны көтә ине Тамъян ырыуының башлығы (К.Мәргән). Ысынлап та, Мөнирә *тап* ана шул һүҙҙәрҙе ҡабатланы (Р.Зиннуров). *Тап* үҙенә ҡарата шундай йылы һүҙ әйтеүенә бөтә күңеле менән ирегән Ҡолсобай бер аҙ йомшарҙы (Я.Хамматов). Хисмәтулла *тап* әсәһенә әйтәһе һүҙҙәрен әйтеп бөтөрә алманы, башына кейеҙ ҡалпаҡ кейгән оҙон буйлы кеше килеп *инде* (С.Мифтахов). *Нәк* баҙар майҙанына еткәс, халыҡ ағымы туҡталды (А.Карнай).

Билдәләү киҫәксәләре ваҡытты йәки урынды белдереүсе һүҙҙәр менән килеп, уларҙың мәғәнәһен көсәйтә: *Нәк* шул ваҡытта урман яңғыратып мылтыҡ шартланы (Т.Килмөхәмәтов). *Нәк* алты йыл *инде* күргәнем юҡ ине ауылды (М.Хәй). *Тап* шул ваҡытта Блюхер ҡаршыһына түңәрәк һаҡаллы, оҙон аҡ сәсле ҡарт килеп сыҡты (И.Насыри). Бынан ун ете йыл элек тә *нәк* муйыл сәскә атҡан мәл ине (Д.Бүләков).

### *Оҡшатыу- сағыштырыу киҫәксәләре*

Был төркөмсәгә ***тас,хас*** киҫәксәләре ҡарай. *Тас* үҙе… тигән тауыштар ишетелә. Буйы-һыны, төҫө-башы *хас* атаһыныҡы инде (Ш.Насыров).

### *Сикләү киҫәксәләре*

Сикләү киҫәксәләренә ***ғына/генә, ҡына/кенә, уҡ/үк, тик, бары, фәҡәт*** киҫәксәләре ҡарай.

**Ғына/генә, ҡына/кенә** киҫәксәләре төрлө һүҙ төркөмдәренән һуң килергә мөмкин. Был киҫәксәләр түбәндәге мәғәнә төҫмөрҙәрен белдерә:

1. Предметтың, кешенең, күренештең берҙән-бер булыуын аңлата: Ул ниҙер ҡысҡырҙы, ахыры, тик мин *генә* ишетмәнем (М.Кәрим). Бөтә

ышанысым һин *генә* (Я.Хамматов). Тимәк, был урманда улар өсәүһе *генә* (Д.Бүләков). Уй тигәнең, уй ҙа түгел – хәтерләү *генә* (М.Кәрим).

2. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре һөйләмдәге ниндәй ҙә булһа һүҙҙе айырып, төрлө модаль мәғәнәләр бирә: Ләкин, нимә *генә* эшләмәһен, уға бирәү ҙә ныҡлап ышанырға теләмәй (Р.Солтангәрәев). Ауыл урамынан үткәндә *генә* ярһыуы аҙыраҡ баҫылды (Н.Ғәйетбаев). Ҡара урманға *ғына* кергән саҡта Атҡынайым китте һыу буйлап (Халыҡ йырынан). Киреһенсә, ауылдың исемен *генә* түгел, данын, есемен раҫлаусы, тарихты бөгөнгөсә, шағирҙарыбыҙ яҙғанса, өҙөлмәҫ сылбыр менән ялғаусы хәҡиҡәт асыла (Ә.Хәкимов). Пулеметтарын ҡалдырып ҡасҡан һалдаттар төркөмө күҙҙән юғалғас *ҡына*, дружинниктар аҙыраҡ тынысланды (А.Таһиров).

3. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары менән эш-хәрәкәттең оҙайлығын һәм бер туҡтауһыҙ булыуын белдерә: Күпме йоҡлағанмындыр, ҡурҡыныс төш күреп уяндым. Имеш, «Жигули»ҙың дүрт тәгәрмәсе лә юҡ, ә үҙе йөрөй, әллә ниндәй ҡыуаҡлыҡтар, соҡор-саҡырҙар аша *елә генә*... («Ағиҙел» журналынан). Тышта буран сыҡҡан, иллә *һыпырта ғына* (Әкиәттән). Ҡуйы әрәмә араһында үҙе лә болан төҫлө бара: уның өсөн шыр ҙа юҡ, әләгет тә юҡ – *һыпырта ғына* (Н.Мусин).

4. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре төп һәм ярҙамсы ҡылым араһында килеп, эш-хәрәкәттең мәғәнәһен көсәйтәләр: Кабинанан мыйыҡлы ерән баш, һонолоп, һөрәнләне: – Эй, сибәркәй, йәнең теләгән ереңә *елдереп кенә* илтеп ташлайым, әйҙә! (М.Кәрим). Ул суҡынғанды *ҡарауыллап ятып ҡына* алырға кәрәк (С.Ваһапов). Ҡымыҙ көнө-төнө бешелә. Тирмәнән – япмаға, япманан йылға буйына – тибенгә бер туҡтауһыҙ йүгереп кенә торола (Ф.Иҫәнғолов).

5. Телмәр ситуацияһына ҡарап, был киҫәксәләр ҡәнәғәтһеҙлек, янау, тыйыу һ.б. мәғәнә төҫмөрҙәрен дә сағылдыра: Хәҙер Ғәләү йән көйҙөргөс берәй хәбәр *ысҡындырһын ғына!* (С.Шәрипов). Кит, яҡын киләһе булма! Юғиһә ҡысҡырам! *Ҡағылып ҡына* ҡара! (Ш.Биҡҡол). Вәт, паразит, *ҡайтһын ғына әле!* (Р.Байымов). Уға *ҡуш ҡына* (Д.Бүләков).

6. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре алмаштарҙың һәм рәүештәрҙең эмоциональ мәғәнә төҫмөрҙәрен көсәйтә: «*Ҡайҙан ғына* унда барып сыҡтым әле,» – тип уйланды Таштимер (Д.Бүләков). *Ҡайҙан ғына* барыһын да аңлаһын да, *ҡайҙан ғына* бөтәһен дә төшөнһөн инде сабый (С.Шәрипов). Сынтимер *йәшләй генә* фронтҡа эләкте (Д.Бүләков).

7. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре ваҡыт сиген белдерә: Исмаһам, *бер минут ҡына* күңелем күтәренке булһа... (Д.Бүләков). *Әле генә* саф, көләс булып торған күк йөҙө һөрөмләнде (З.Биишева). Урманда йөрөгән-йөрөгән дә *эңерҙә генә* арманһыҙ булып ҡайтҡан (Д.Бүләков). *Ҡараңғы төшкәс кенә* ҡайтып килә ине Ғәлиәхмәт (Р.Байымов). Мөнирә *таңға табан ғына* йоҡлап китте (Р.Зиннуров). Һүҙ ыңғайында әйтеп үтәйек,

йыртыҡ һырманы Ғата машинаһын ремонтлағанда йәки *йыуып таҙартҡан саҡта ғына* кейә (Ә.Хәкимов).

8. Был киҫәксәләр ярҙамында кесерәйтеү-иркәләү мәғәнәһе бирелә: Ҡыҙыҡайҙар, яратып, исемен матур итеп әйтеп өндәшәләр: «*Миҙехәткенәйем!*»(М.Кәрим).

Әрмеләргә барып сәс ебәрҙем,
*Сәскенәйем* етте үрмәгә (Халыҡ йыры).

9. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре башҡорт халыҡ йырҙарында эмоционаллекте көсәйтеү маҡсатында ҡулланыла: Табаҡ та *ғына* табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ Буранбайҙың яҙған хаттары («Буранбай» йыры). Һауала *ғына* осҡан, ай, аҫыл ҡош, Ыласын да *ғына* тиһәм дә, биле ала («Шәүрә» йыры). Кемдәр *генә* ғашиҡ, ай, булманы, Сәлимәкәй, ҡара ла ҡашыңа («Сәлимәкәй» йыры). Кисә *генә* ятһаң, иртән торһаң, Һағынырһың мине, мин булмам (Томан» йыры).

10. *Ғына/генә, ҡына/кенә* киҫәксәләре сифаттар һәм рәүештәр менән килеп, теге йәки был билдәнең ғәҙәттәге кимәлдән әҙерәк булыуын күрһәтә: Мин инде Ғүмәров ағай аманат итеп ҡалдырған васыятты йәшерер өсөн, аласыҡ мейесе аҫтында *бик ипле генә* урын әҙерләп өлгөргәйнем (Һ.Дәүләтшина). Өҫтөндә *иҫке генә* һырма көпө, аяҡта иркен сарыҡтар (И.Насыри).

**Уҡ, үк** киҫәксәләре

1. *Уҡ/үк* киҫәксәләре ваҡыт төшөнсәһен белдереүсе һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең башҡарылыу тиҙлеген күрһәтә: —*Хәҙер үк* Кәжән больницаһына оҙатырға! —тип ҡысҡырҙы ла Зәһит яр аҫтынан өҫкә һикерҙе (Я.Хамматов). Саҙрислам урынынан һикереп торҙо: —Ниңә һөйләшеп торорға! *Бөгөн үк* кулактан икмәкте тартып алырға ла ярлыларға өләшергә! (Ф.Иҫәнғолов). Әгәр һинең кәңәшең буйынса теге ауылдан юл алһаҡ, беҙ *күптән үк* окопта булыр инек (А.Таһиров). *Көндөҙ үк* ул ҡарап киткән бейек ҡапҡа төбөндә бер шәүлә күренде (Д.Бүләков).

2. *Уҡ/үк* киҫәксәләре пространство мөнәсәбәтен белдереүсе һүҙҙәрҙең мәғәнәһен көсәйтеү маҡсатында ҡулланыла: Туҡай, урынынан һикереп тороп, *тәҙрә янына уҡ* килеп баҫты ла, тынын да һаҡ ҡына алып, тыңлай башланы (С.Ҡудаш). Күп квартиралы өйҙөң *ишек алдына уҡ* сығып, тәмле еҫ таралған (М.Кәрим). Егет Шәмсиәне *алыҫтан уҡ* күреп, ырҙындар аша уға табан ашыға ине (Ф.Чанышева). Уның (байҙың) *артынан уҡ* теге эт тә һикереп тора (Әкиәттән).

3. *Уҡ/үк* киҫәксәләре күрһәтеү алмаштары һәм *һымаҡ, кеүек* бәйләүестәре менән килеп, оҡшашлыҡты күрһәтә: *Шул уҡ* йылда тәбиғәтте маҡтап бер-ике шиғыр ҙа яҙҙым (Т.Йәнәби). Был бүлмә лә *шундай уҡ* матур, ләкин иҫкерәк ине (С.Агиш). *Үҙе кеүек уҡ* ҡартайған иҫке *генә* самауырҙы ҡайнатырға ҡуйҙы (Д.Исламов).

4. Төп һәм ярҙамсы ҡылымдар араһында килгәндә, *уҡ/үк* киҫәксәләре төп ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә: Фәһимә *иларға уҡ кереште* (М.Кәрим) «Фагима даже начала плакать». Төргәктән ялбыр папаха алып, башына *кейеп үк ҡуйҙы* (З.Биишева). Шундай хыялый уйҙар менән елкенеп, йүкә ағасынан яһалған «булат» ҡылысымды һелтәй-һелтәй, ишек алдына *йүгереп үк сыҡтым* (М.Кәрим). Эт күргән төлкө кеүек кире боролдом да баҫҡыстан атлығып *төшөп үк киттем* (Ә.Вәли).

**Бары, бары тик, тик, фәҡәт** киҫәксәләре

*Бары, бары тик, тик, фәҡәт* киҫәксәләре ғәҙәттә үҙҙәре асыҡлаған һүҙ алдынан килә: *тик һине* көтәм, *бары* бер сәғәт ҡалды, *фәҡәт* үҙ ағын ҡарай. Был киҫәксәләр шулай уҡ тотош һөйләмгә төрлө эмоциональ-экспрессив мәғәнә төҫмөрлөктәре бирә: *Тик* ун һигеҙ йәшлек ҡыҙ ғына ҡасып китә алған (Әкиәттән). *Бары* мөхәббәтлеләр генә бәхетле була алалар (З.Биишева). *Бары* Әғзәмов ҡына йәштәр бүлегенән күсермәй, Илһөйәрҙе ҡул аҫтынан сығармай (Б.Бикбай). *Бары тик* Тимербай ғына, төнөн көнгә алыштырып, керпек ҡаҡманы (Д.Юлтый). Колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмай, *бары тик* Шәрәф Иртөбәков менән бер төркөм йәштәр генә ырҙынға китте (Б.Бикбай).

Сикләү киҫәксәһе функцияһында *ҡоро* һүҙе лә ҡулланылырға мөмкин: Әхмәҙиә бит әле *ҡоро* көтөүсе генә түгел, совхоз директорының бойороғо буйынса һарыҡ отараһы бригадиры, йәғни ферма мөдире була (Р.Солтангәрәев). Көн дә тиерлек тап булыша улар, тик һуңғы осорҙа бер-береһенә *ҡоро* сәләм биреүҙән ары уҙмайҙар (С.Шәрипов). *Ҡоро* кәүҙә көрәшеү өсөн түгел, күрһәтеү өсөн яҡшы (И.Ғиззәтуллин). *Ҡоро* мал менәнме ни ул, файҙа булмағас (Т.Йәнәби). Бынныһы – *ҡоро* һылтау ғына (Н.Мусин).

### ***Көсәйтеү киҫәксәләре***

Был төркөмсәгә ***бик, бигерәк (тә), иң, үтә, ныҡ, салт, сылт(селт), иллә, тороп, һәләк, гәжәп, ғәйәт, шаҡтай, айырата, ифрат, сикһеҙ, артыҡ, яман, уғата, бөтөнләй, сөм-, дөм-, тома, шау, шыр, япа-, көпә-, өр-, һап-, ҡап-, төп-, ап-*** һ.б. киҫәксәләр инә.

Бөтә һанап үтелгән киҫәксәләр препозитив ҡулланыла. Улар ғәҙәттә сифаттарға һәм рәүештәргә ҡушылып, был һүҙ төркөмдәре аңлатҡан мәғәнәләрҙе көсәйтә:

**Бик** киҫәксәһе: Август аҙаҡтарының ҡояш сатнап торған *бик эҫе, бик бөркөү* бер көнө (Н.Мусин). Яғымлы һәм *бик һөйкөмлө* күренгән ҡыҙға әүрәп, барыһын да онотто (Б.Бикбай). Вәкилгә арҡаһын ҡуйып, һыңар ҡулы менән *бик яйлап* тунын, бүркен һалып элде лә өҫтәл артына барып ултырҙы (З.Ғәлимов). Бик *сәйер* кеше Ишмырҙа (Н.Мусин).

**Бигерәк (тә)** киҫәксәһе: (Хисбулла:) – Офицерҙары *бигерәк тә* шәп, ҡаты ҡуллы, баһадир кәүҙәле кеше икән, ти (З.Биишева). Булған бит Совет иленең *бигерәк тә* фәҡир сағы (Ш.Янбаев). *Бигерәк* ауыр шул һөйгән кешеңде көтөп яфа сигеүе (Н.Мусин). Ай, *бигерәк* матур, бәләкәй генә, сабый ғына бит ул! (Ғ.Хәйри).

**Иң** киҫәксәһе: Быйыл да йәйҙең *иң күркәм* көндәрендә ауылыма ҡайттым (Я.Хамматов).

Йырҙарымдың *иң ҡәҙерле* моңо

Һиңә булһын – түгел башҡаға (З.Биишева). Юламан ҡарттың был көндәрҙәге осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарының *иң әсеһе лә, иң һуңғыһы* ла ошо булды (З.Биишева). Иртәнге һыуыҡ ҡояш аҫтында сасҡауҙа туңып ятҡан был донъяла *иң юғалып ҡалған, иң өшөгән, иң гәйепле* кеше лейтенант Йәнтимер Байназаров ине (М.Кәрим).

**Үтә** киҫәксәһе: Асыҡ зәңгәр күҙле Алеша, атаһына оҡшап, мыҡты, баҙыҡ кәүҙәле Байрас янында *үтә йәш,* хатта ҡайһы саҡта бала ғына һымаҡ та күренеп ҡуя (З.Биишева). Аллаға шөкөр, ҡыҙҙан уңдым: *үтә өлгөр,* сос үҙе (С.Мифтахов). *Үтә ныҡ* ҡот осҡос буран тырнағы аҫтында һис бер ярҙамһыҙ ҡалды Гөлшат менән Ярулла (М.Кәрим). Ниңә шулай икән – *үтә рәхәт* булғанда кеше йә оса, йә йөҙә һымаҡ? (М.Кәрим).

**Ныҡ** киҫәксәһе:

— *Ныҡ* еллеме? —тип йылмайҙы Ғәлимйән.

— *Ныҡ* елле шул (М.Хисмәтуллина).

**Салт, сылт (селт)** киҫәксәләре: Әле генә *салт аяҙ,* зәңгәр күге, ҡайнар һулышлы ҡояшы менән күңелдәрҙе иркәләп, йырға, моңға, уйға дәртләндереп торған июль көнө һә тигәнсе ҡорос тынлы төн менән алмашынды (З.Биишева). *Салт аяҙ* күк йөҙөндә шәрбәте ағып түгелеп торған ҡарбуз һымаҡ ҡояш бәрәкәтле йылы нурҙарын һис тә йәлләмәй ергә һибә (Д.Бүләков).

**Илла (иллә)** киҫәксәһе: *Илла* һуңлама! («Ағиҙел» журналы). Лампа ҡабыҙып, кәрәсинде әрәм итәһе булмағыҙ *илла!* (З.Биишева). Ҡунаҡтар Айбулатты яҡлап геүләнеләр: – *Иллә,* Айбулат, булдырҙың! (Һ.Дәүләтшина). Рәхимә һаман ярһый ине: – *Иллә* баш-баштаҡ беҙҙең был Айбулат, *иллә* үҙе тигәнсә йөрөп ята (Һ.Дәүләтшина). – *Илла* ҡыҙҙар һылыуҙар ине лә һуң! -тине Фәрхи, – янып торалар ине, шельмалар (Б.Ишемғолов). *Иллә шәп* төштө лә һуң был, егеттәр! (Б.Ишемғолов).

**Һәләк** киҫәксәһе: Ай-һай, саф күңелеңә ҡара тап йәбештерһәләр, *һәләк тә ауыр* була икән! (З.Биишева). (Йомағол:) Һай, ул ни хәҙер *һәләк шәп* егет булып киткән бит (С.Мифтахов). Емештең эшләгәненә күҙ эйәрмәй, өйҙәге бар эште лә *һәләк* етеҙ башҡарып сыҡты (З.Биишева). Ирек, яҙ етеп, ҡарҙар иреп, тамсы тама башлағас та, олатаһынан ҡалған *һәләк* ауыр мылтығын иңенә аҫып, айыу ауларға, тип сығып китте (Н.Мусин).

**Ғәжәп** kiçәксәһе: Күңеле *ғәжәп матур* ине ҡартының (Д.Бүләков). Быйылғы яҙ менән йәй барлыҡ ярлы-ябаға өсөн, шул иҫәптән Емеш өсөн дә, *ғәжәп* йомарт һәм шәфҡәтле булды (З.Биишева). Был ябай, әммә ошо минуттар өсөн *ғәжәп* ҡәҙерле, *ғәжәп* гүзәл күренештәр нурҙары һүнә яҙған күҙҙәрҙе иркәләй, күңелдәргә ләззәт өҫтәй (Ф.Иҫәнғолов). *Ғәжәп* матур донъя көтөп алып киткәйне улар (Н.Мусин).

**Ғәйәт** kiçәксәһе: Тегеһе (Иштуған) уның моронлап килгән йомшаҡ ҡына мөгөҙ төбөн һыйпағас, *ғәйәт* ҙур ләззәт менән күҙҙәрен йомоп, мырт-мырт көйшәй-көйшәй ойоп китте (З.Биишева).

**Шаҡтай** kiçәксәһе: Ни өсөн тиһәң, ул – *шаҡтай йомоҡ,* аҫтыртын малай – урманда, яланда яңғыҙы йөрөүҙе йәиһә ағаһы менән икәү генә булыуҙы артыҡ күрә (Ә.Бикчәнтәев). *Шаҡтай* бейектән тороп ҡыҙҙырған ҡояш өй эсен ялт иттергән (З.Биишева). Беҙҙең яҡтың тәбиғәте өсөн был *шаҡтай* ғәжәп күренеш (Д.Бүләков). Профессор Арғынбаев үҙ өлкәһендә тәрән белемле, *шаҡтай* ҡыҙыҡлы кеше (Д.Бүләков).

**Айырата** kiçәксәһе: «Бына тигән», — тип әйтеү, әлбиттә, минең өсөн *айырата* ҙур (З.Биишева). Ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшеү, танышыу, дуҫлашыуҙа *айырата* күп тәжрибә туплаған Заһитов ни әйтергә лә белмәне (Н.Мусин). Һайлаусыларҙың күп булмауы Ниязғолға һайлау, майлау, дуҫлашыу өсөн *айырата* еңелгә тура килә (Һ.Дәүләтшина). Хәбир инде, бының өҫтәүенә тирәк төбөнә салкан төшөп ятып, япраҡтар араһынан *айырата* асыҡ зәңгәр булып күренгән күкте күҙәтергә ярата (З.Биишева).

**Ифрат** kiçәксәһе: Наилә лә *ифрат* ҡыйыу, көслө ҡыҙ булып сыҡты (З.Биишева). Был һүҙҙәр – *ифрат* ябай һүҙҙәр (С.Агиш). (Лотфулла:) Батша заманында тормош *ифрат* ауыр, көн итеүҙәре бик тә ситен ине, уландар... (В.Исхаков). Дөрөҫ, Шевцовҡа бик үк ышанып бөтөп тә булмай, тәбиғәте менән *ифрат* шаян егет, юрамал әйтеүе лә ихтимал (М.Хәйзәров).

**Сикһеҙ** kiçәксәһе: Шул уҡ ваҡытта ул (Алеша) үҙен дә *сикһеҙ* бәхетле тойҙо (З.Биишева). – Бына ни өсөн *сикһеҙ* шат һәм бәхетле мин! – ныҡ тулкынланыуҙан Михаилдың тауышы ҡалтыранды (Я.Хамматов). – Райхана! —тип өндәште егет үтә ныҡ ғәжәпләнеп, *сикһеҙ* ныҡ ҡыуанып та (З.Ғәлимов). Сәлих үҙен *сикһеҙ* бәхетле итеп тойҙо (Ғ.Хисамов). Айбулат *сикһеҙ* ҙур өмөттәр менән тулған күҙҙәрен Яланбикәнең йөҙөнә текәне (Һ.Дәүләтшина).

**Артыҡ** kiçәксәһе: Ауыҙ тултырып «Нефтселәр ҡалаһы» тигәс, Фәрит *артыҡ* ҙур булмаһа ла ысын ҡаланы күрермен тигән өмөт менән алға текләп барҙы (Ш.Янбаев). Тик Бәһрәм *генә артыҡ* ныҡ асылып китә алманы (Д.Бүләков) Инсафлы ҡыҙҙар һымаҡ шым ғына аҡҡан йылға буйында урынлашҡан был йәйләү *артыҡ* ҙур түгел (К.Мәргән). Был донъяла *артыҡ* күп күрҙек маҙаны беҙ...(Ф.Ғүмәров).

**Уғата** kiçәксәһе: Был көндө улар ҡыҙҙар менән тау йыуаһы эҙләп йөрөй торғас, Емешкә түбәһе күккә олғашҡан кеүек күренгән *уғата* дәү бер

тауға барып сыҡтылар (З.Биишева). Ошо *уғата* үҙ ителгән урам буйынса көнөнә бер үтмәйенсә сыҙамай ул (Н.Мусин). Көҙгө ямғырҙар һәм байтаҡ ҡына һалҡындар булып үткәндән һуң, бындай көндөң матурлығы *уғата* ныҡ һиҙелә (Ә.Вәли). Һул яҡта тауҙар *уғата* бейеккә күтәрелеп торалар (Н.Ҡәрип).

**Бөтөнләй** киҫәксәһе: Көҙгөнән уға *бөтөнләй* ят, яртаҡыл ҡыҙыҡай ҡарап тора ине (Ф.Иҫәнғолов). Арып алйыуҙан, сайҡала-сайҡала бөкөрәйешеп, аяҡтарын саҡ-саҡ һөйрәп, *бөтөнләй* тәртипһеҙ рәүештә тиерлек килеп тулды улар (Ә.Бикчәнтәев). Байғужа менән Буранбай *бөтөнләй* башҡа булып үҙгәреп киттеләр (Д.Юлтый).

Хәҙерге башҡорт телендә **хатта** киҫәксәһе һөйләмдә нindәйҙер һүҙҙең, һүҙбәйләнештең мәғәнәһен көсәйтеү өсөн ҡулланыла, мәҫәлән: Ә бит улар мине ихтирам итә, ҡайһы берҙәре *хатта* ярата кеүек ине (М.Кәрим). Ул *хатта* тегенең бер нисә көн ҡырылмаған сикәһенә ҡулын тейҙереп алды (Х.Ғиләжев). Ә берәү ярҙам итмәне бит. Ярҙам итеү түгел, таяҡ тығып маташтылар *хатта* (Р.Солтангәрәев). Ирназар, Яхыя кеүек егәрле, бүтәндәр өсөн йән атып торған ирҙәр, киске ысыҡ бесәнде боҙоусан булһа ла, унығына ла ҡарап тормай, бисә-сәсәнең үҙенә тигән күбәләрен төнөн дә ҡоя ине *хатта* (Н.Мусин).

Ҡайһы бер осраҡта *хатта* киҫәксәһе йыйыу теркәүесе функцияһын да үтәй: Мин ҡапыл туҡталдым, *хатта* бер-ике аҙым артҡа сиктем (Д.Юлтый). Улар (сәскәләр) шул хәтле тере, *хатта* уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп торған һымаҡ (З.Биишева). Ана, күрәһеңме, алдында ни тиклем байрам һыйы, *хатта* шәрбәт тә бар (М.Кәрим).

**Һуң** киҫәксәһе һорау мәғәнәһен көсәйтеп, һөйләмгә көслө эмоциональ биҙәк бирә: Ниндәй аҡса *һуң?* (Б.Ишемғол). Эй уйнаны ла *һуң!* (М.Кәрим). Урмандарыбыҙҙы, көтөүлектәребеҙҙе, урланған ерҙәребеҙҙе кире ҡайтарып алһаҡ, йәшәр инек тә *һуң*...(Р.Байымов). Бынауы хәтле дәү кәүҙәле, таш билле баһадирҙы кем күтәреп һуға алһын *һуң?!* (З.Биишева). Һуҡтыҡ та *һуң* балыҡты! (Ф.Иҫәнғолов).

**Шау, шыр** көсәйтеү киҫәксәләре исемдәр, сифаттар һәм рәүештәр менән килә: халат *шау ебәктән генә*, келәм *шау биҙәктән* һ.б. Миҫалдар: *Шыр яланғас* ятҡан киң яланда. бына йәнләнер, ер йәшәреп, донъя йәмләнер (Т.Йәнәби). Дөрөҫ әйтәһең, *шыр тиле* икәненде иҫбатланың шул («Ағиҙел» журналы). Шунлыҡтан тыныс йәшәй, рәхәтләнеп уҡып йөрөй. Барыбер *шыр ялған* (М.Хәйҙәров). Әлләһаташтыңмы?.. Бына иҫәр, бына *шыр тиле* (Д.Юлтый).

**Тома** киҫәксәһе ҡайһы бер исемдәр һәм сифаттар менән килеп, билдәнең предметта артыҡ булыуын белдерә: *Тома батрак* инде Тимеркәй, ә үҙе Ғәлкәй балалары һүҙен һөйләй (Б.Ишемғол). Шунан еңгәһе *тома һуҡыр* ҡалған ҡыҙҙы диңгеҙгә төртөп төшөрә лә ҡалдыра (Әкиәттән). Ә Ғәфифә инәй көлмәй ҙә, асыуланмай ҙа: «Беҙ йәш саҡта *тома наҙан*

булдыҡ» (А.Йәғәфәрова). Был киҫәксәнең *шыпа, дөм* синоним варианттары бар.

**Ап-, бәп-, зәп-, йәм-, күм-, ҡап-, тап-, һап-, япа-, көпә-, өр- нап-, неп-, сап-, сеп-** һ.б. киҫәксәләр**.**

Һанап үтелгән киҫәксәләр сифаттар һәм рәүештәр менән ҡулланылып, уларҙың мәғәнәһен көсәйтә: Бына ул, *ап-аҡ* тештәре менән күҙ ҡамаштырып, башын артҡа ташлап, ихлас көлә (Д.Бүләков). Бутаһынан айырылған *буп-буҙ* дөйәләй буҙлап ултырам *инде* бына (Һ.Дәүләтшина). Бер нисә минутҡа тирә-яҡ *тып-тын* булып ҡалды (З.Биишева). Ҡояштың урман артына йәшеренеүенә *әп-әҙ* ваҡыт ҡалғайны (Д.Юлтый). Зөләйханың *йоп-йомшаҡ* ҡулдарын тубығыма һалып, ҡул һыртын һыйпап, иркәләп ултырғым килә (Т.Йәнәби). Алда яңы күренештәр асыла: йыйнаҡ юл *зәп-зәңгәр* күлде урап үтә йә сылтырап-сорлап ағып ятҡан уйһыу шишмәгә килеп төртөлә (Д.Бүләков).

Бер төркөм киҫксәләрҙең башҡа һүҙ төркөмдәре функцияһын үтәгән омоним формалары ла бар. Миҫал: 1. *Тик – киҫәксә.* Мин ҡаланың матурлығы *тик* ҙур таш биналар, магазин тәҙрәләрендәге биҙәктәр менән генәлер тип уйлай инем (С.Агиш). Ә мин һандуғасты түгел, *тик* һине көтәм (К.Кинйәбулатова). 2) *Тик – рәүеш.* Зөләйха башын эйгән, өндәшмәй *тик* ултыра (Т.Йәнәби). Уларға (һалдаттарға) *тик* кенә тороп үлем көтөү ҡыйын ине (И.Насыри). 3) *Тик – теркәүес.* Ул (Сәғиҙә ауыр яҙмышы хаҡында Гөлнурға ла яҙҙы, *тик* унан яуап булманы (М.Тажи).

## ТЕРКӘҮЕСТӘР

Теркәүестәр морфологияла үҙенсәлекле һүҙ төркөмө булып иҫәпләнә. Улар, айырым һүҙ төркөмө булараҡ, сағыштырмаса һуңғараҡ формалашҡан, шуға күрә теркәүестәр фольклорҙа, халыктың йәнле һөйләү телендә һирәк осрай. Теркәүестәрҙең формалашыуы һәм таралыуы башҡорт яҙма әҙәби теленең барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше менән тығыҙ бәйләнгән. Башҡа һүҙ төркөмдәре менән сағыштырғанда, башҡорт телендә теркәүестәр күп түгел. Быының шулай булыуы аңлашыла, сөнки башҡорт телендә ҡатмарлы фразалар һәм һөйләмдәр араһындағы бәйләнеште башҡа саралар, мәҫәлән, ялғауҙар, бәйләүестәр, һүҙ тәртибе, ҡылым формалары һ.б. ярҙамында ла биреп була.

Килеп сығышы яғынан теркәүестәрҙе түбәндәге төркөмдәргә бүлеп йөрөтөлә:

1. Башҡорт теленең үҙ теркәүестәре: *да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә, йәнә, йәғни, йәиһә, ки, тик, берсә, шулай уҡ, шул уҡ ваҡытта, шуның менән бергә, шулай ҙа, әле, әллә, йә булмаһа* һ.б.

2. Башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән теркәүестәр: *вә, бәлки, ләкин, илла, әммә, хатта* (ғәрәп теленән), *гәрсә, гүйәки, йә, йәки, ки, мәгәр, һәм, сөнки, әгәр, фәкәт* (фарсы теленән), *ә, ни* (рус теленән).

Үҙҙәренең морфологик составы яғынан теркәүестәр йә ябай, йә ҡушма була.

1. Ябай теркәүестәр: *бары, берсә, бәлки, гүйә, йәнә, йә, йәғни, ләкин, сөнки, тағы, фәкәт, һәм, хатта, ә, әгәр, әммә, юкһа, тик, шунлыктан, гәрсә, әйтерһең* һ.б.

2. Ҡушма теркәүестәр: *йә булмаһа, шуға күрә, шуға ҡарамаҫтан, шулай уҡ, шуның менән бергә, шулай ҙа, әгәр ҙә, әгәр ҙә мәгәр, иллә мәгәр, уның ҡарауы, шуның арҡаһында, шуның һөҙөмтәһендә* һ.б.

Структур яҡтан теркәүестәр шулай уҡ яңғыҙ һәм пар теркәүестәргә бүленә. Пар теркәүестәргә *йә-йә, йәки-йәки, йәиһә-йәиһә, бер-бер, берсә-берсә, ни-ни, әле-әле, әллә-әллә* теркәүестәре ҡарай. Улар һөйләмдә төрлө урында ҡабатланып килә. Миҫалдар: Яҙмышы тарихи юлдарҙың *ни* сана, *ни* арба сағына тура килде (Р.Бикбаев). Бынан ары ваҡиғалар *йә* бик тиҙ көтөлмәгән яҡҡа боролаcаҡ, *йә* туҡтап ҡаласаҡ (Д.Бүләков).

Синтаксик функциялары буйынса теркәүестәр ике ҙур төркөмгә бүленә: *теҙеү* һәм *эйәртеү* теркәүестәре.

### *Теҙеү теркәүестәре*

Теҙеү теркәүестәре һөйләмдәге теҙмә бәйләнеште барлыҡҡа килтереүсе грамматик сараларҙың береһе булып тора. Улар бер-береһенә

буйһонмаған тиң һөйләм киҫәктәрен (тиң эйәләрҙе, тиң хәбәрҙәрҙе, тиң эйәрсән киҫәктәрҙе) һәм теҙмә ҡушма һөйләм составындағы тиң мәғәнәле һөйләмдәрҙе үҙ-ара теркәп килә.

Теҙеү теркәүестәре, үҙҙәре аңлатҡан мәғәнәләренә ҡарап, өс төркөмсәгә бүлеп йөрөтөлә: 1) йыйыу теркәүестәре, 2) ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре һәм 3) бүлеү теркәүестәре.

### *Йыйыу теркәүестәре*

Йыйыу теркәүестәренә *һәм, йәнә, тағы, тағы ла, шулай уҡ, шуның менән бергә, шул уҡ ваҡытта, да-дә, за-ҙә, ла-лә, та-тә, вә* (архаик форма) теркәүестәре инә. Был теркәүестәр дөйөм бергәлекте, ике йәки бер нисә эш-хәлдең бергә булыуын, йәиһә береһе артынан икенсеһенең эшләнеүен аңлата. Был теркәүестәрҙең һәр ҡайһыһының мәғәнә нескәлектәре бар, шуға күрә күп осраҡта уларҙың береһе урынына икенсеһен ҡулланып булмай.

**Һәм** теркәүесе фарсы теленән үҙләштерелгән. Ул тиң киҫәктәрҙең һәм тиң һөйләмдәрҙең бәйләнешен күрһәтә. Был теркәүес башҡорт телендә һөйләү телмәренә ҡарағанда яҙма телмәрҙә киңерәк ҡулланыла. Ошоға ярашлы ул, һөйләмдең тиң киҫәктәре һәм теҙмә ҡушма һөйләмдең компоненттары эргәһендә килеп, төрлө мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерә.

*Һәм* теркәүесе, тиң киҫәктәр эргәһендә ҡулланылғанда, түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерә.

1. Тиң киҫәктәр араһындағы тиң мөнәсәбәттәрҙе белдерә: Әгәр Хәким һинең көләп ебәреүеңде ишетеп *һәм* эсенә генә һалып ҡуйған булһа? (Ә.Вәли). Ялҡын яҙғы ел ярҙамында бында ла үҙенекен эшләй: оҙон теле менән бөтә ерҙе ялап ала, ҡоро кәртә-ҡаралтынан күмер *һәм* көл яһай (К.Мәргән). Иңкеш, бал ҡорттары *һәм* тағы әллә нисәмә төрлө бөжәктәр геүләшә (Я.Хамматов).

2. Һөйләмдә ишле тиң киҫәктәрҙе теркәй: Шул бурыстарҙы теүәле менән үтәү өсөн беҙҙең беренсе эшебеҙ – иҫкелек *һәм* яңылыҡ, уңлыҡ *һәм* һуллыҡ талаптарын бер яҡҡа ташлап, бөтә милләт бер йән, бер тән булып берләшеүҙәлер (Р.Байымов). Миллилек предметһыҙ абстракт идея булған кеүек, шиғриәттәге сағылышы ла ябай *һәм* бөйөк, тәрән *һәм* юғары, йыйнап әйткәндә, тәбиғи, әммә сәнғәтсә булырға тейеш («Ағиҙел» журналы).

3. Тиң киҫәктәрҙе яҡын мәғәнәлә, синонимик мөнәсәбәттә теркәп килә. Миҫалдар: Автор ҡырыҫ *һәм* аяуһыҙ дәүерҙәр киҫәктәренән нәфис әҫәрҙәр ижад иткән («Шоңҡар» журналы). Әҙиптең уйсан *һәм* моңһоу шиғриәте бына өс тиҫтә самаһы ғүмер инде башҡорт әҙәбиәтенә хеҙмәт итә («Ағиҙел» журналы). Шул ваҡыт ишек алдында мулланың бойороҡло *һәм* ҡаты тауышы ишетелде (К.Мәргән).

4. Ҡабатланыусы ҡылымдар араһында килеп, эш-хәрәкәттең көсәйеүен күрһәтә, мәҫәлән: Мин дә Туфан ағай хаҡында уйлап ҡуйғайным *һәм* һаман

да уйлайым («Ағиҙел» журналы). Дөрөҫ аңлағыҙ, мин быға саҡырмайым, реализм принциптарына таянып та бына тигән әҫәрҙәр ижад итеп була *һәм* буласаҡ («Ағиҙел» журналы).

Әйтергә кәрәк, әгәр һөйләмдә өс һәм унан артыҡ тиң киҫәк булһа, һәм теркәүесе иң аҙаҡҡы тиң киҫәк алдынан ғына ҡуйыла: Бер үк ваҡытта ғәжәйеп моңло ла, дәртле *һәм* аһәңле лә булып тальян тауышына һоҡланғыс бер теүәллек менән ҡушылып, киң туғай буйҙарына таралды (Ф.Әсәнов). Уның артынан Нәби бай, тағы бер нисә кеше *һәм* шулар араһында таҙ Шәйхетдин күренде (Ә.Вәли).

*Һәм* теркәүесе теҙмә ҡушма һөйләм составындағы тиң ябай һөйләмдәрҙе теркәп, уларҙың семантик яҡтан бер-береһе менән төрлө мәғәнә мөнәсәбәттәрендә тороуын белдерә:

1. Ваҡиғаларҙың, эш-хәлдәрҙең бер үк ваҡытта булыуын, мәҫәлән: Урамда осраған кешеләрҙең бөтәһе лә шат, *һәм* улар ниңәлер йылмаялар кеүек тойола (Ә.Вәли). Береһенән-береһе аяуһыҙ һорауҙар уның күҙ алдында һорау билдәһе сүрәтендә бейене-бейене лә әкренләп таралды, *һәм* улар менән бергә ҡоштар йыры, йылға моңо ла юҡ булды (Т.Сәғитов).

2. Ваҡиғаларҙың, эш-хәлдәрҙең бер-бер артлы булыуын, йәғни эҙмә-эҙлелек мөнәсәбәтен белдерә: Юлдыбаев тиҙ генә колбаса менән шәкәр алып килде, Фәниә ҡыҙҙар бүлмәһенән өс төрлө кружка килтерҙе, *һәм* һөйләшә-һөйләшә сәй эсеү башланды (Ә.Вәли). Өфө статистика комитеты секретары Н.А.Гурвич ҡулъяҙманы авторҙың дуҫы В.Н.Витевскийға тапшыра, *һәм* ул ни бары 1983 йылда ғына донъя күрә (М.Иҙелбаев).

3. Сәбәп һәм һөҙөмтә мөнәсәбәттәре белдерелә: Яҙғы һалҡын һыуыҡтан тейгән ауырыу уны аяҡтан йыҡты, *һәм* ул оҙаҡ йәшәй алманы (Я.Хамматов). Ай самаһы ваҡыт үткәс кенә, үҙ вәғәҙәһен үтәне Вилдан: тегеләргә хәбәр итте, *һәм* Имам менән Насип өйҙәренә ҡайтты («Ағиҙел» журналы). Һыу кәмегән һайын, күл һыуы тоҙлораҡ була бара, *һәм* балыҡтарға йәшәү шарттары насарая («Башҡортостан» газетаһы).

**Вә** теркәүесе архаик форма иҫәпләнә. Мәғәнәһе яғынан *һәм* теркәүесенә тап килә. Миҫалдар: Янымда хуш еҫтәр килә, бөтә йәнем *вә* тәнем рәхәтләнә (З.Һаҙи). Көндәр бик яҡшы *вә* мөләйем, әрәмә *вә* урмандар йәннәт баҡсалары рәүешендә булып, болондар, хатта тауҙар ҙа йәм-йәшел булып күренәләр («Ватандаш» журналы). Ҡайғыларымды аҙ булһа ла бушатыу *вә* төн үткәреп ҡайтыу уйы менән ун саҡрым арала булған бер ауылға киттем («Ватандаш» журналы).

**Да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә** теркәүестәре тиң киҫәктәрҙең дә, тиң һөйләмдәрҙең дә бәйләнешен күрһәтә. Улар тиң эйәләр араһында ла, тиң хәбәрҙәр араһында ла ҡулланыла, тиң тултырыусыларҙы ла, хәлдәрҙе лә теркәп йөрөй. Миҫалдар:

а) тиң эйәләрҙе теркәй: *Гармун тауышы ла*, Әлфиә-нең йөрәк түренән урғылып, ташып сыҡҡан *йыр тауышы ла* һаман көсәйә барҙы (Ф.Әсәнов);

б) тиң анығлаусыларҙы: Бөтә нәмәләрҙең дә йәндәре бар — *ағастарҙың да, таштарҙың да, үләндәрҙең дә* (М.Кәрим);

в) тиң тултырыусыларҙы: Әхәт Аҙнаев, контораһына ингәс, урман участкаһындағы эшселәр менән һөйләшкән саҡта йомшарып *ҡалыуын да*, яңғыҙлыҡ *тойғоһон да* онотто (Н.Мусин);

г) тиң хәлдәрҙе: Уға *уңдан да, һулдан да* бәрелделәр, әммә мыҡты кәүҙәле, йәше утыҙға етеп килгән бәһлеүән егет ҡымшанмай ҙа баҫып торҙо (Д.Бүләков).

Йәнә был теркәүестәр эш-хәрәкәтте белдергән ике хәбәрҙе теркәй, мәҫәлән: Маруся тағы бер аҙ һөйләшеп *торҙо ла* ашығып кухняға кире *йүгерҙе* (Һ.Дәүләтшина).

**Да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә** теркәүестәре түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерә:

1. Эш-хәрәкәттең бер-бер артлы булыуын: Әсғәт минең ҡулдағы икмәк киҫәгенә йотолоп ҡараны *ла,* ирендәрен ялап, ауыҙын сапылдатып ҡуйҙы (М. Кәрим). Өҫтәлгә бер нисә киҫәк икмәк һалынған тәрилкә, алюмин кружка менән стакан килтереп ҡуйҙы: тағы ла нишләйем икән, тигән төҫлө иҙән уртаһында тапанып торҙо *ла,* соланға йүгереп сығып, бер сеүәтә тотоп инде (Н. Мусин). Ул йәһәт кенә ҡалҡынып, йыуынып, ҡырынып алды *ла* тәҙрә ҡорғандарын айырып торған бауҙы тартты (Р.Байымов).

2*. Да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә* теркәүестәре, ҡабатланып килгән хәбәрҙе теркәп, эш-хәрәкәттең көсәйеүен белдерә: Ул баянан бирле көрәшселәрҙең береһен әйләндерә *лә* әйләндерә (Ф.Аҡбулатова). Ул мәғрур ҡанаттарын яй ғына елпеп оса *ла* оса (Ф.Әсәнов). Ә Аҡселән, үҙенең мәңгелек йырын йырлап, һаман аға *ла* аға (Б. Бикбай). Марат һеңлеһен йоҡлатҡан булғандыр инде, өйгә бикләп сыҡҡан да киткән, ә тегеһе буҙарғансы илаған *да* илаған (Т.Сәғитов).

3. Эш-хәрәкәттең тиҙ алмашыныуын: Әлфиә ҡырт ҡына боролдо *ла* йүгерә-атлай ҡапҡанан сығып китте (Ф.Әсәнов). Ул ниндәйҙер эске ярһыу менән егеттең билен бөтә көсөнә үҙенә табан һыҡты *ла,* һис тә көтмәгәндә генә ергә ултырып, уны ҡулбашы аша атып та ебәрҙе («Ағиҙел» журналы). Шаҡып астыра алмаҫлығын аңлағас, ул болдор янындағы ватыҡ кирбестәрҙең береһен алды *ла* тәҙрәгә тондорҙо (И.Абдуллин). Дүрт аяғы менән баҫып торған әйләнәһендә йәшен тиҙлеге менән боролдо *ла* бүреләргә табан уҡ кеүек атылды (С.Агиш).

Бынан тыш *да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә* теркәүестәре теҙмә ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәй.

Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдең компоненттары араһында түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәре сағылдырыла:

1. Сәбәп-һөҙөмтә мөнәсәбәттәре: Шәһиҙә әбей ҡунаҡҡа саҡырҙы *ла,* улар төнгә ҡалды (Һ.Дәүләтшина).

2. Ҡапма-ҡаршылыҡ мөнәсәбәттәре: Әхмәҙи ер хаҡы тураһында ауыҙ асҡан ине *лә,* Тимербай уны туҡтатты (Ж. Кейекбаев) Юлаусыға сәй эсереп ебәргәндә лә яҡшы булыр ине *лә,* самауыр ҡайнатырға күмере генә юҡ (Ш.Янбаев).

**Тағы, тағы ла, йәнә** теркәүестәре һөйләмдә һаналып киткән тиң киҫәктәрҙе теркәй. Миҫалдар:

1) тиң эйәләрҙе: Тәҙрә янындағы быялалы өлкән шкафта төрлө вареньелар, банкылар, бал һалынған һауыттар, *тағы* әллә ниҙәр теҙелешеп ултыралар (Һ. Дәүләтшина). Ҡауҙарланып, старостаһы, *тағы* әллә кеме былар ҡаршыһына сыҡты (Ғ. Хөсәйенов). Атайым менән ағайым, *тағы* ла ике-өс кеше, урманда ҡуна ятып, колхозға бура бурай (Н. Мусин). Бай үҙе бисәһе менән, *тағы* Ҡолморҙа старшина бисәләре менән, *тағы* әллә кемдәр шунда (Т. Хәйбуллин).

2) тиң хәбәрҙәрҙе: Күп уйландылар, кәңәшләштеләр, *тағы* тирәк янына килделәр, *тағы* уның башынан күперҙе күҙәтеп ултырҙылар (З.Биишева). Зөлфиәгә Наил *тағы* күп-күп һөйләр, *тағы* моңланыр, *тағы* хискә бирелер кеүек ине («Башҡортостан ҡыҙы»). Умырып алған ташлы тупраҡты һөҙөп килеп аҡтарҙы ла ул *тағы* тура менеп китте. *Тағы* умырып алды, *тағы* төштө, *тағы* аҡтарҙы, *тағы* менде (К.Мәргән).

3) тиң аныҡлаусылар араһында ҡулланыла: Сабир мулланың, *тағы* бер нисә ҡарттың ҡулдарындағы таяҡтарын бәреп осорҙо (И.Ғиззәтуллин).

4) тултырыусыларҙы бер-береһе менән теркәй: Аҡлан киң япраҡлы, эре-эре сәскәле клевер, кәрешкә, хуш еҫле мәтрүшкә, *тағы* әлләниндәй үләндәр менән сыбарланған (Р.Сабитов). Таш сиркәү ҡаршыһы гел ҡаранан кейенгән ҡара, ерән һаҡаллы поптары, әрхәрәйҙәре, *тағы* әллә кемдәре менән тулы (Ғ. Хөсәйенов).

5) тиң хәлдәрҙе: Ул миңә көндән-көн *тағы* һөйкөмлөрәк, *тағы* нескәрәк күренә (Д.Юлтый). Беҙ *тағы ла* фронтҡа, *тағы* ҡан эсенә бара инек (Д.Юлтый).

Был теркәүестәр ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәрҙе лә теркәй һәм ҡабатланып, һаналып килгән эш-хәрәкәт йәки күренештәрҙең бер-бер артлы булыуын белдерә. Миҫалдар: *Тағы* вальс, *тағы* улар бергә бейей («Ағиҙел» журналы) Яҙҙар үтер, йылы йәйҙәр килер, *тағы* көҙ еле иҫер, *тағы* ҡыш һыуығы булыр («Башҡортостан ҡыҙы» журналы). Шунан *йәнә* сапты, *йәнә* туҡтаны (Т.Сәғитов). *Йәнә* балҡый, *йәнә* һүнә, Ялҡыны ергә төшә (Г.Ҡотоева). Шунан *йәнә* бер-береһенә табан атланылар, *йәнә* ниҙер һөйләшергә тотондолар (Р.Солтангәрәев).

**Шулай уҡ, шуның менән бергә, шул уҡ ваҡытта** теркәүестәре тиң киҫәктәрҙе теркәп йөрөй.

1. Тиң эйәләрҙе: Иртә, сираттағы бер иртә, *шул уҡ ваҡытта* берҙән-бер иртә, беренсе мәртәбә яланға барыу иртәһе (Т.Ғиниәтуллин). Шул ваҡытта баҫыуҙа ҡояш үҙенең ҡайнар күҙе менән өткән тау һыртында һәм тау

итәктәрендәге уйпат ерҙәрҙә – ҡыуаҡлыҡ буйҙарында – ауыл крәҫтиәндәре, *шулай уҡ* Ғариф батрактары ер һөрәләр (Ғ.Хәйри).

2. Улар шулай уҡ тиң хәбәрҙәр араһында ла ҡулланыла: Ул Ҡайынлы ауылындағы яңылыҡтар өсөн бик ныҡ шатлана, *шул уҡ ваҡытта* ҡайһы бер етешһеҙлектәр өсөн ысын йөрәктән әрней (Б.Бикбай. Риф аяғына баҫа алмай, *шулай ҙа* иламай ғына һыҙлана ине (С.Агиш). Улар Кузьминдың игенен, бесәнен, үҙҙәре конфисковать итеп алып, астар араһында бүлделәр, *шул уҡ ваҡытта* утыҙ биш йөк иген килтереп беҙгә ярҙам күрһәттеләр (Һ.Дәүләтшина ). Кескәйерәк йоморо ҡара күҙҙәр шундай аҡыллы ла, баҫалҡы ла, *шул уҡ ваҡытта* үтә иғтибарлы ла (З.Биишева).

3. Тиң аныҡлаусыларҙы теркәп килә: Ҡайҙан килә был бойороусан, *шул уҡ ваҡытта* атайҙарса хәстәрлекле тауыш? (Н.Мусин). Ҡыҫҡаһы, унның аҡыллы, йор һүҙле, *шул уҡ ваҡытта* теремек зат икәнен шәйләүе ҡыйын түгел (Т. Ғиниәтуллин). Икенсе донъяға килеп эләккәнемде аңлай инем, бында бүтән уттар яна, икенсе телдә һөйләшәләр, бындай кешеләрҙән, электр уттарынан миңә ят, *шул уҡ ваҡытта* ылыҡтырғыс һулыш килә («Ағиҙел» журналы).

4. Тиң тултырыусыларҙы: Бында беҙ Фәрит Иҫәнғоловтың үҙе ваҡытһыҙ вафат булғандан һуң донъя күргән «Сыуаҡ көндәр» романын, *шулай уҡ* Әхиәр Хәкимовтың «Ҡош юлы», «Өйөрмә» романдарын күҙ уңында тотабыҙ («Ағиҙел» журналы).

5. Тиң хәлдәрҙе теркәп килә: Батырша восстаниеһынан һуң да, *шулай уҡ* Салауат Юлаев восстаниеһынан һуң да башҡорт халҡы ҡаты иҙеү аҫтында йәшәнеләр («Башҡорт әҙәбиәте тарихы»). Үҙе һәлмәк, һығылмалы, *шул уҡ ваҡытта* башҡаларға оҡшамағанса ышаныслы атлай... (Д.Бүләков) Ҡарағуров Йәмлегөлдөң ғәжәпләнеү ҡатыш һоҡланып, *шул уҡ ваҡытта* һағайыбыраҡ та ҡараған ҙур асылған күҙҙәренә хайран ҡалды (Д.Бүләков).

### *Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре*

Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәренә түбәндәгеләр ҡарай: *ә, ләкин, әммә, тик, иллә, иллә мәгәр, бары, бәлки, фәҡәт, юҡһа, югиһә, шулай ҙа, шулай булһа ла, шуға ҡарамаҫтан, уның ҡарауы*. Был теркәүестәр дөйөм ҡаршылыҡ мәғәнәһен, йәғни бер эштең үтәлеү-үтәлмәүенә икенсе эштең ҡаршы ҡуйылыуын белдерә. Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре ябай һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙең һәм ҡушма һөйләм составындағы тиң һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнешен булдыралар. Әйтергә кәрәк, йыйыу теркәүестәренә ҡарағанда, уларҙың эйәрсән киҫәктәрҙе теркәп килеүе һирәгерәк осрай.

**Ә** теркәүесе ябай теркәүес һанала. Был теркәүес тиң һөйләм киҫәктәрен һәм тиң һөйләмдәрҙе теркәй. Миҫалдар: Ләкин һыуҙың бер тамсыһын да йотмай, ә бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға

ҡарап, тирә-яҡҡа бөркөп ебәрә («Урал батыр» эпосынан). Их, дуҫтар, йәмле лә көнөбөҙ, ә тыуыр көн тағы ла яҡтыраҡ (Б.Бикбай).

***Ә*** теркәүесе һөйләмдә бер эш-хәлде, йәки предметты икенсеһенә ҡаршы ҡуйыуҙы белдерә. Бында бер нисә мәғәнә төҫмөрләнешен айырып күрһәтеп китеү кәрәк:

1. *Ә* теркәүесе бер үк ваҡытта барған төрлө эш-хәлде ҡаршы ҡуйып сағыштырғанда ҡулланыла. Миҫалдар: Тауға барһаң, таштар үкерә, *ә* диңгеҙҙә тулҡын һикерә (М.Кәрим). Уларға (бай балаларына) һуғыш еле ҡағылғаны юҡ, *ә* беҙ, өс туған, һуғышта йөрөйбөҙ (Д.Юлтый). Алдар менән мин алдан төшөп алғайным, *ә* уның иптәштәре, беҙҙән бер аҙ арттараҡ ҡалып, мал ҡыуып киләләр ине («Зөһрә менән Алдар» эпосы).

2. Беренсе һөйләмдәге уй-фекерҙең икенсе һөйләмдә нығытылмағанын, йәғни көткәндең киреһе булғанын белдерә, мәҫәлән: Эш барған да кеүек, *ә* күңел урынында түгел (Р.Солтангәрәев). Аш-һыуҙары уртаҡ, ауырып киткән юлдаштарын бергәләп тәрбиәләйҙәр, *ә* ялға, ҡуналҡаға туҡталғанда, әңгәмә ҡуйырып, бәхәсләшә башлаһалар, һис һүҙҙәре берекмәҫ ике төркөмгә бүленәләр (Ә.Хәкимов).

**Тик, бары, фәҡәт** бәйләүестәре мәғәнәләре һәм функциялары яғынан бер-береһенә яҡын тора. Улар башлыса тиң һөйләмдәрҙе теркәп, ҡаршылыҡ мөнәсәбәтен белдерә. Миҫалдар:

**Тик** теркәүесе: Күлдәктәрем ҡоро, тик салбарым ғына һыуланған (Д.Юлтый). Ураҡ ваҡыты етте, тик урырға ашлыҡ ҡына юҡ ине (З.Биишева). Ауыл күп иҫкә төшмәй, *тик* үҙебеҙҙең өй эсендәге кешеләрҙе һәм Фәхри бабайҙар менән Ғәлимә апайҙарҙы күңелдән сығарып булмай ине (М.Ғафури). Ҡайҙалыр ситтә уларҙың тоноҡ тауышы ишетелә, *тик* малай уға иғтибар итмәй, донъяһы менән онотолған (Д.Бүләков).

**Фәҡәт** теркәүесе: Мал ҡайғыһы ҡайғы түгел ул, ҡустым, *фәҡәт* донъялар имен булһын («Башҡортостан ҡыҙы» журналы). Йәмилә өсөн ҡояш сығыуҙың, ҡояш байыуҙың һәм ғүмер үтеүенең бер ҙә әһәмиәте юҡ, *фәҡәт* уның күңелен борсоған, башын ватҡан нәмә – тормош һәм икмәк мәсьәләһелер (М.Ғафури).

**Бары, бары** теркәүестәре: Колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмай, *бары* Шәрәф Иртөбәков менән бер төркөм йәштәр генә ырҙынға китте (Б. Бикбай). Лейтенант Федотовтың ниндәй задание менән дошман тылына ебәрелеүен белмәй, *бары тик* һиҙемләй генә ала ине ул (Ә.Хәкимов). Улар бер-бер артлы окоп төбөнә төшөп яттылар, *бары* Билал ғына ашыҡманы (А.Таһиров). Төрмә алдында тауыш ишетелмәй, *бары* ҡарауылсының шәүләһе генә күҙгә салына (А.Таһиров).

Улар шулай уҡ һөйләмдең тиң киҫәктәрен теркәп йөрөй: Ауырлыҡтарҙы күргән, *фәҡәт* тамам биҙмәгән (М.Ғафури). Бәлки, тоторға ла атайға әйтергәләр, тип һораны егет үҙ-үҙенән, тик шунда уҡ уйынан кире ҡайтты (Б.Рафиҡов).

**Ләкин** теркәүесе. Ғәрәп теленән килеп ингән был ҡаршы ҡуйыу теркәүесе бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған тиң киҫәктәрҙе һәм һөйләмдәрҙе теркәй. Миҫалдар: Тағы ла кҮтәрҙе, *ләкин* эсмәне, ауыҙына килтергәс, кире ҡуйҙы (Я.Вәлиев). Фатима, мин бейей белмәйем, тип бер аҙ борғоланып торҙо, *ләкин* әхирәттәре ҡыҫтағас, ҡотола алманы, бейене (Ж.Кейекбаев). Сәлимә осоп-йүгереп самауыр ҡайнатты, мунса яҡты, бер туҡтауһыҙ йүгерҙе, һөйләне, көлдө, *ләкин* арыманы, талманы (З.Биишева). Эйе, алда бит уны ауыр, *ләкин* хөрмәтле эштәр көтә (З. Биишева). Яман уҫал, ғәййәр, *ләкин* бәхетһеҙ халыҡ икән («Ағиҙел» журналы). Борис Васильевич бәләкәйерәк, *ләкин* йыуан ғына бер кеше ине (С. Агиш). Айбулат ярһып, *ләкин* ҡыҫҡырмай яуап бирҙе: Ҡотлояр ағай менән беҙ ғүмерҙә талашҡаныбыҙ юҡ! (Һ. Дәүләтшина).

*Ләкин* теркәүесе теҙмә ҡушма һөйләмдең компоненттарын теркәп, ҡапма-ҡаршылыҡ мөнәсәбәтен белдерә: Уның тауышы артыҡ көслө лә түгел, *ләкин* һүҙе аңлайышлы ине (З. Биишева). Ул бөгөн аш бешерә алмауына *тағы* әллә ниндәй дәлилдәр табырға уйлағайны, *ләкин* Үмәр уның һүҙен бүлде (Һ. Дәүләтшина). Мурҙа яғынан күҙ ҙә алмайынса, малайҙар байтаҡ яттылар, *ләкин* шылт иткән тауыш та ишетелмәне (М. Кәрим). «Бәлки, яңылыш күрәмдер» тигән өмөт бар ине әле унда, *ләкин* урам осона яҡынлашҡан һайын, был яҡты өмөт һүнә барҙы (Ш. Янбаев).

**Әммә** теркәүесе. Был теркәүес мәғәнәһе буйынса *ләкин* теркәүесенә яҡын тора һәм шулай уҡ ҡаршылыҡлы эш-хәлдәрҙе белдергән һөйләм киҫәктәрен һәм һөйләмдәрҙе теркәй. Һөйләү телендә был ике теркәүес икеһе бергә лә ҡулланылып йөрөй. Миҫалдар: Таҙға ағайҙары кире ҡайтырға ҡушҡандар, әммә Таҙ быға риза булмаған (әкиәттән). Тимер бөгөлөр, әммә тимер һынмаҫ. Тимер иҙелер, әммә ваҡланмаҫ («Ағиҙел»). — Әллә ни күргән юҡ-юҡлығын, әммә ләкин беҙҙең балалыҡ дәүеренә замананың ауыр мәле тура килде (Ә.Гәрәев).

Ябай һөйләм составында *әммә* теркәүесе түбәндәге һөйләм киҫәктәрен теркәй:

1. Тиң хәбәрҙәрҙе: Әхмәтшаның йәшел күҙҙәре уҫал янып китте, тештәрен ҡоторған бүре шикелле шытырҙатып ҡуйҙы, *әммә* ләм-мим өндәшмәне (З.Биишева). Өс көн, өс төн йөрөгән ул ҡарт эҙенән, *әммә* аҡһаҡал менән күҙгә-күҙ осрашыуҙан ҡурҡҡан («Ай менән Ҡояш бер генә»). Үҙе янып-көйөп, бешеп бөттө, *әммә* баланы ҡотҡармай ҡуйманы (И. Ғиззәтуллин). Ҡарт баҫыуҙы йырып һалынған ошо һуҡмаҡ буйлап теге яҡҡа барҙы, ҡыҫҡырҙы, һөрәнләне, урманды арҡырыһы-буйға йөрөп сыҡты, *әммә* ейәнен таба алманы (Т. Ғиниәтуллин).

2. Тиң аныҡлаусыларҙы: «Ленин», «революция» тигән кеүек Емешкә һис тә аңлашылмаған, *әммә* ҡорос һымаҡ ныҡ тойолған һүҙҙәрҙе әле береһе, әле икенсеһе ҡабатлай (З.Биишева). Ире ун бер йәшкә оло Рәшиҙәнән, *әммә* һәйбәт холоҡло, уңған кеше ине («Ватандаш» журналы). Ҡиәфәтендә

Батыршаһ хәйләкәр һәм үҙлегенән фәһемләп һөйләүсән, *әммә* ғалим кеше ине (М. Өмөтбаев).

3. Тиң хәлдәрҙе: Хәмиттең йөҙөнә ҡаты ризаһыҙлыҡ сыҡты һәм һаҡ ҡына, *әммә* ҡаты итеп әсәһенең һүҙен бүлде (З.Биишева). Эсенән асыуы ҡайнап, ҡара көйөп, *әммә* тыныс ҡына Айбулат конторанан сыҡты (Һ. Дәүләтшина). Бүренең күҙҙәре бер асылып, бер ябылып, һүнеп барған йондоҙҙар төҫлө өмөтһөҙ, *әммә* йыртҡыстарса йымылдай («Ағиҙел»журналы).

*Әммә* теркәүесе теҙмә ҡушма һөйләмдең компоненттарын теркәй: Ул тағы нимәлер әйтергә теләне, *әммә* уйҙары тулҡынланыуҙан буталды (Я.Вәлиев). Заятүләк яҡ-яғына ҡарай, *әммә* унда Һыуһылыу күренмәй ине инде, ти. («Заятүләк менән Һыуһылыу» әкиәте). Таҙға ағайҙары кире ҡайтырға ҡушҡандар, *әммә* Таҙ быға риза булмаған («Таҙ» әкиәте). Беҙ ҡорал таҙартҡан арала мәңге туҡтамаҫ тойолған ямғыр яйлап тымды, *әммә* тирә-яҡ һаман һыу, эс бошорғос күңелһеҙ (Т.Ғиниәтуллин).

**Юҡһа, юғиһә** теркәүестәре шулай уҡ мәғәнәләре яғынан ҡаршы ҡуйылған һөйләмдәрҙе йәки һөйләм киҫәктәрен теркәй. Миҫалдар: Исмәт, һин асыуланма, бер нәмәне асыҡларға булдым әле, *юғиһә* икеле-микеле һөйләшергә һис тә яратмайым (Т.Сәғитов). Халыҡ менән артыҡ ҡаты тотонма. *Юғиһә* фронттан ҡайтҡандар үтә ҡоро булыусан (Ғ.Ибраһимов).

**Шулай ҙа, шулай булһа ла, шуға ҡарамаҫтан** теркәүестәренең ҡулланылыуына миҫалдар: Дүрт баланы аяҡҡа баҫтырып, барыһын да башлы-күҙле иткән, *шулай ҙа* байтаҡ ғүмерен яңғыҙыраҡ үткәргән ҡәйнәһе Сәғирәгә хәҙер үтә яҡын ине («Ағиҙел» журналы). Ҡарап тороуға бына тигән, ут кеүек егетһең, ә *шулай ҙа* йүнле эш күрһәтә алмайһың (Һ.Дәүләтшина). Ҡарамыш аңлай: дүрт кешегә ҡаршы тора алмаясаҡ, *шулай ҙа* һынырға, ҡасып ҡотолорға уйламай (Н.Мусин). Самалап яғалар икән, театрҙа һалҡын, *шуға ҡарамаҫтан* халыҡ күп килгән (Б.Бикбай). Айыуҙы ҡараңғы төшөр алда ғына һөйрәтеп алып ҡайтҡайнылар, *шулай булыуға ҡарамаҫтан* был хәбәр иртәгә иртүк бөтә ауылға таралып өлгөрҙө (Ж.Кейекбаев). Ҡараңғы төшөп еткәйне, *шулай ҙа* күктә секрәйешеп торған йондоҙҙарҙың тоноҡ ҡына яҡтыһында дуға кеүек ҡыйылып торған булһа ла, ай ҙа бар (Ғ.Ибраһимов).

**Унұң ҡарауы** теркәүесе шулай уҡ бер-береһе менән ҡаршылыҡ мөнәсәбәтендә торған тиң киҫәктәрҙе һәм һөйләмдәрҙе теркәй. Миҫалдар: Ерәнсәнең юлы бороу булған, уның ҡарауы бик таҡыр булған (әкиәттән). Киленебеҙ төҫкә-башҡа әллә ни һылыу түгел, уның ҡарауы эшкә унан шәп кеше юҡ («Башҡортостан ҡыҙы»).

Ҡаршылыҡ мөнәсәбәте башҡорт телендә **шулай уҡ бәлки, иллә, иллә мәгәр, хатта** теркәүестәре ярҙамында белдерелә. Был теркәүестәр һөйләм киҫәктәрен, шулай уҡ һөйләмдәрҙе теркәү өсөн ҡулланыла. Миҫалдар: Ямғыр туктамай, бәлки тағы ла шәберәк яуа («Башҡортостан ҡыҙы»). Улар

(сәскәләр) шул хәтле тере, хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп торған һымаҡ (З.Бейешева). Басариев, аҡылһыҙ түгел, быны белә, *мәгәр* юҡ-барға тәгәрәп бармай, һаҡ тота үҙен («Ағиҙел» журналы). *Иллә мәгәр* Бибешенде Хисбуллаға бирмәһәң, һиндә бер көн торасағым юҡ!.. Ишетәһеңме? – тип теҙҙе Сәрбиямал (З.Биишева).

### *Бүлеү теркәүестәре*

Бүлеү теркәүестәренә *йә, йәки, йәиһә, берсә-берсә, ни, бер, әле, әллә, йә булмаһа* теркәүестәре инә. Был теркәүестәр һөйләм эсендә яңғыҙ йәки парлап ҡулланыла һәм эш-хәлдең ҡабатланып тороуын, ике йәки бер нисә эштең береһе генә үтәлеүен, йә булмаһа берәй эштә ике йәки бер нисә предметтың береһе генә ҡатнашыуын белдерә. Бүлеү теркәүестәре ябай һөйләмдә тиң эйәләрҙе, тиң хәбәрҙәрҙе, тиң эйәрсән киҫәктәрҙе бер-береһенә тоташтырыусы грамматик сара вазифаһын үтәй. Бынан тыш улар ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәрҙең дә бер-береһенә мөнәсәбәтен белдереп йөрөй.

*Йә* бүлеү теркәүесе төрки телдәрҙә киң таралған. Был теркәүес һөйләм эсендә яңғыҙ ҙа, парлы ла ҡулланылып, төрлө мәғәнә мөнәсәбәттәрен аңлата:

1. Эш-хәлдең, күренештең ҡабатланып тороуын асыҡлай: Леонид ашыға, ә һуҡмаҡ, уның менән шаярырға теләгәндәй, *йә* уңға борола, *йә* һулға тайпыла (И.Абдуллин). Бер ни ҙә ҡылып булмай, ул йәнен усына ҡыҫып тигәндәй, *йә* йүгерҙе, *йә* атланы (Ғ.Хисамов). Ҡәйнәһе *йә* Гөлбикә менән оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп ултыра, *йә* Гөлшатты эйәртә лә баҡсаға һыу һибергә китә (Б.Рафиҡов).

2. Кирелек мәғәнәһен белдерә: Ярай, ҡарама, *йә* бөтөнләй ғашиҡ булырһың (И.Абдуллин). Уның һиҙмәгәне яҡшы, *йә* бөтә уйлағандар юҡҡа сығыр («Башҡортостан»). Юҡ, һорама ла, юҡ тигәс, юҡ, *йә* бөтөнләй ҡыуып сығарырмын («Йәшлек»).

3. Бер нисә эш-хәлдең, күренештең бергә, бер үк ваҡытта булыуын асыҡлай: Йорт шундай шыҡһыҙ, күңелһеҙ, *йә* уты юҡ («Йәшлек»). Уның Илһамға барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп биргеһе килде, тик аяғы йөрөмәй шул, *йә* үҙе күренмәй («Йәшлек»). Көн шундай ҡоро, эҫе, *йә* аҙыраҡ еле лә юҡ (З.Биишева). Юл бөтөнләй күренмәй башланы, *йә* бураны ла һаман тынмай (А.Йәғәфәрова).

Ябай һөйләмдә грамматик сара булараҡ *йә* теркәүесе:

1) тиң эйәләрҙе теркәй: —Ул тылсымлы кеҫәнән тәмле-томло нәмәләр һис ваҡытта ла өҙөлмәй. *Йә* берәй шаҡмаҡ шәкәр, *йә* дүрт-биш бөртөк йөҙөм емеше, *йә* перәник валсығы, *йә* кипкән муйыл, *йә* ҡурылған борсаҡ була (М.Кәрим). Уның өйөнән бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәй. *Йә* күрше-күлән, *йә* берәй үткенсе, *йә* дуҫ-иштәре менән тулы булған була

(З.Биишева). Лираның бөгөн күңеле тыныс түгел. *Йә* ҡараңғы төн, *йә* ҡапҡа шаҡыған ел, *йә* һалҡын ямғыр шикләндерә, ҡурҡыта (Ф.Әсәнов);

2) тиң хәбәрҙәрҙе теркәй: Тик һин генә мине *йә* күккә күтәрәһең, *йә* ергә бәрәһең («Ағиҙел» журналы). Донъяла һәр кем *йә* үҙенсә бәхетле, *йә* үҙенсә бәхетһеҙ (Ғ. Хөсәйенов). «Ҡатай» тип әйтеп ҡара Ғарифҡа! Ишетеп ҡалһа, ул икенсе бер сәбәп табып, *йә* түләү һала, *йә* келәтенә ябып ҡуя (Ж.Кейекбаев). Ниңә шулай икән – үтә рәхәт булғанда, кеше *йә оса, йә йөҙә* һымаҡ (М.Кәрим);

3) тиң эйәрсән киҫәктәрҙе теркәй: Хашим ағай, Трофимдарҙы *йә* бөгөн, *йә* иртәгә атасаҡтар (Б.Рафиков). Бүреләр санаға яҡынайғас, йүнһеҙ ир тегеләрҙе әүрәтеп, юл ыратыр өсөн *йә* септә, *йә* тунын, *йә* бүймаһын ырғытып барған (С.Шәрипов). Кәримә әсәһенең ваҡытынан элек бөкөрәйә башлаған биленә, шыраулаһып ярылған ҡулдарына ҡарай ҙа, *йә* педагогия, *йә* медицина училищеһына инергә кәрәк, тигән фекергә килә ине (Ф.Әсәнов). Берәй дошманының, арттан һағалап килеп, суҡмар *йә* балта төйҙәһе менән тондороуы бик мөмкин (Б.Рафиков);

4) теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең компоненттарын теркәй: Улай беҙҙең менән һөйләшергә булғас, йүнлерәгегеҙ килһен,-тиҙәр,–йә уҡытыусы килһен, *йә* председатель үҙе! (К.Мәргән). Саҡырмағандарҙыр, *йә* саҡырылып та бармағандыр (М.Кәрим). Ордер *йә* ул булып тултырылған, *йә* уны ла үҙ яҡтарына ауҙарғандарҙыр (Д.Бүләков). Бер ҙә ышанғы килмәй, *йә* атайым хаҡлы түгел, *йә* бында беҙ аңлап-төшөнөп етмәгән нәмәлер бар (Т.Ғиниәтуллин).

**Йәки** теркәүесе ҡабатланған эш-хәрәкәттең ҡапма-ҡаршылығын йәки уларҙың тиң әһәмиәтлеген күрһәтә. Беренсе осраҡта был теркәүес ярҙамында ҡапма-ҡаршы күренештәр араһындағы бәйләнеш күрһәтелә: *Йә* йәшәргә Тыуған илде һатып, *Йәки үлһәк*, бергә үлергә... (Г.Юнысова).

Алда халыҡ, бына рампа, артта—
Киң баҫыуҙар *йәки* Уралтау,
*Йәки* ҡамышлы күл, теләһә ни...
Барыһы яҡын, барыһын яратам! (Р.Янбулатова).

Икенсе осраҡта бер нисә эш-хәрәкәт бер тигеҙ ҡабатлана һәм *йәнә* теркәүесен *шулай уҡ, һәм* теркәүестәре менән алмаштырып була: Улар сығыш яһағанда *йәки* тапшырыу алып барғанда, үҙҙәренә ҡарап һоҡланып туйып булмай («Ағиҙел» журналы). Быға тиклем Лейпцигҡа барғанда *йәки* унан ялға ҡайтҡанда бер ауыҙ һүҙ ҡушмай тиерлек йөрөгән Зильда иһә ошонан аҙаҡ Карам менән яғымлы һөйләшә башланы (Н.Мусин). Малайҙар менән яҙын йомран, ирлән, көшәл тотһаҡ *йәки* ҡышын ҡапҡанға йәтсә, аҫ эләктерһәк, тиреһен һыҙырабыҙ ҙа Талипҡа йүгерәбеҙ (М.Кәрим).

**Йәиһә, йә булмаһа** теркәүестәре. Был теркәүестәр ябай һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙе һәм ҡушма һөйләм составындағы һөйләмдәрҙе теркәй: Ҡайҙа тотҡандар шундай баһадирҙы, подвалдамы, *йәиһә* бәйләпме?

(Д.Бүләков). Һәр бер хат, үтенес, һәр бер ҡағыҙ артында кеше, *йәиһә* бер төркөм кешеләр, хатта коллективтар яҙмышы торғанын Сәғит Харисович хәҙер асыҡ белә (Д.Бүләков). Маһизанан һора, *йә булмаһа* Мария Ивановнаға барып кил (А.Таһиров).

**Ни-ни** теркәүесе күп осраҡта парлы ҡулланыла:

1. Ябай һөйләмдә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле тиң киҫәктәрҙе теркәй: Фирая, трубканы урынына һалырға ла онотоп, *ни үле, ни тере* баҫып тора ине (Һ.Дәүләтшина). Декабрь айына тиклем ҡар яумай, *ни арба, ни сана* булып ятҡан саҡ ине был (Н.Мусин). «*Ни* аллаға, *ни* муллаға (Әйтем). Егерме көн *ни ауырыу, ни сәләмәт* түгел – ятам бына шулай (А. Ғирфанов). Йәйҙең йәмле көндәрендә ҡаҙ үләненә ҡырын ятып ғаиләһе менән аш ашаған, сәй эскән. Ә теге *ни ауыл, ни ҡала* булмаған совхоз фермаһында *ни ҡыҙыҡ та, ни йәм!* (Р.Солтангәрәев).

2. Теҙмә ҡушма һөйләм составында һөйләмдәр араһындағы кирелек мәғәнәһен көсәйтә: *Ни* автобус йөрөмәй, *ни* ат... («Ағиҙел» журналы). *Ни* уҡып булмай, *ни* яҙып булмай... (Р. Ғарипов). Ни Кәрим юҡ, *ни* Шакир ҙа килмәгән (А. Таһиров). *Ни* көн түгел, *ни* төн түгел (А.Таһиров).

**Бер-бер, әле** теркәүестәре эш-хәлдәрҙең, күренештәрҙең бер-бер артлы килеүен, даими ҡабатланыуын белдерә: Ул *бер* атайға, *бер* Оксанаға, *бер* миңә ҡарай (М.Кәрим). Ә атыш тауышы тулҡын ҡаҡҡан һымаҡ *бер* яҡынайып, *бер* алыҫайып дауам итте (З.Биишева). *Әле* алдына ҡоймаҡ килтереп ултырталар, *әле* кәрәҙле бал, яңы ғына үткәреп алынған йәш ҡаймаҡ, эремсек, ҡорот, ҡаҡланған ит... (Һ.Дәүләтшина). Яҡуп ҡайтып күренгәс, әсәһе *бер* ағарҙы, *бер* күгәрҙе (М.Кәрим).

**Берсә-берсә** теркәүесе күренештәрҙең, эш-хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеген, бер-бер артлы килеүен, ҡабатланыуын аңлата: Өләсәйҙең йәшле күҙҙәре *берсә* асыла, *берсә* йомола (М.Кәрим). Кәримәнең тыныслығы тамам юғалды: был яңы тойғо уны *берсә* ҡыуандырған һымаҡ итә, *берсә* эс бошорғос уйҙарға төшөрә (Н.Мусин). *Берсә* көмөш билбауҙай, тауҙарҙың билен быуып үтә, *берсә* үткер бысаҡтай ҡояшта ялтырап, дөм ҡараңғы урмандарҙы киҫеп сыға (Б.Рафиҡов). Рухымды *берсә* күккә ашырасаҡ, *берсә* упҡынға атасаҡ (М.Кәрим).

### *Аныҡлау теркәүестәре*

**Йәғни** теркәүесе асыҡлау, аныҡлау мөнәсәбәттәрен белдерә. Был мөнәсәбәттәр һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре араһында булырға мөмкин: Был осрашыу, *йәғни* әлеге һөйләшеү кабинетта булыр кеүек ине (Д.Исламов). Һәр таш киҫәге шаблон аша үтергә, *йәғни* бер ҙурлыҡта булырға тейеш («Ағиҙел» журналы). Ысынлап та, ауыл ерендә хужалыҡ етәксеһе – үҙе баш, үҙе түш, *йәғни* батша (Д.Исламов). Көрәштә барлыҡҡа

килгән энергия бөтә ғәләмгә хәрәкәт, *йәғни* тереклек бирә («Ағиҙел» журналы).

***Йәғни*** теркәүесе шулай уҡ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнешен булдыра: Ошо ваҡыттан башҡорт ерҙәрен күпләп тартып алыуҙың яңы бер мәле башлана, *йәғни* налогтар һәм башҡа һалымдар ҡырҡа арта (Б.Рафиҡов).

Башҡорт телендә ҡайһы бер рәүештәр, киҫәксәләр һәм инеш һүҙҙәр шулай уҡ теркәүес вазифаһын үтәй. ***Бәлки*** инеш һүҙен һәм ***хатта*** көсәйтеү киҫәксәләрен шундайҙарға индерергә мөмкин.

*Бәлки* теркәүесенә асыҡлау мөнәсәбәтенән тыш, ҡапма-ҡаршылыҡ кеүек мәғәнә төҫмөрләктәре лә хас: Тәбиғи булмаған бәғзе ҡеүәттәрҙе ғилем, һөнәр менән еңеп мәсхәрә итеп булһа ла, бында тәбиғәткә ҡаршы китеү түгел, *бәлки* тәбиғәттең бер киҫәге менән дуҫлашыу, бергә-бергә уның менән эш итеүҙер (М.Ғафури). Ямғыр туҡтамай, *бәлки* тағы ла шәберәк яуа бирә («Башҡортостан ҡыҙы» журналы). Улар минең барыуымды ауырһынмайҙар, *бәлки* теләйҙәр генә ине (М.Ғафури). Коммунистар улар һеҙҙе үлтермәйҙәр, *бәлки* һеҙҙе үлтерергә, һеҙҙе бөтөрөргә теләүселәрҙе үлтерәләр (Ғ.Хәйри).

*Хатта* теркәүесенең ҡулланылыу сфераһы киң: ул тиң эйәләр, хәбәрҙәр, эйәрсән киҫәктәр, шулай уҡ ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙың компоненттары араһында ҡулланыла. Шул уҡ ваҡытта уға көсәйтеү мәғәнәһе лә хас:

1. *Хатта* теркәүесе тиң эйәләрҙе теркәй: Бына уның китәһен ишетеп, Байрас, Шәүрә, Моратша, *хатта* Зәһира ла йүгереп килеп еткән (З.Биишева). Бай ҙа, батша ла, *хатта* пәйғәмбәр ҙә уны тотоп ҡала алманы (З.Биишева). Урамдарҙан дауыл үткән тиерһең, ара-тирә сүп-сар менән буталып, ултырғыс ватыҡтары, сепрәк-сапраҡ, *хатта* һауыт-һаба һибелгән (Р. Байымов). Ағастар, сәскәләр, хайуандар, *хатта* ҡоштар ҙа йомшаҡ, еләҫ елдән һөйөләп, көндөҙгө эҫе кәмегәнгә һөйөнөп, байрам итә (З.Биишева).

2. *Хатта* теркәүесе тиң хәбәрҙәрҙе теркәй: Мин ҡапыл туҡталдым, *хатта* бер-ике аҙым артҡа сиктем (Д. Юлтый). Ҡайҙалыр китергә әҙерләнеп торған Әпсәләмов уны һөрөмөн ҡойоп ҡаршыланы, *хатта* хәл-әхүәл дә һорашманы, ултыр ҙа, тимәне (Х.Ғиләжев). Шул арҡала үҙенең яңғыҙлығын, бөтә ҡайғыһын онотто, *хатта* Дәүләтҡол ағаһына хат яҙыуын да һирәкләтә башланы (Д.Юлтый). Рәхмәт йөҙөнән был төбәккә изгелек эшләргә ынтылған, *хатта* бер ҡаяны ауҙарып күл яһатҡан (Р.Низамов).

3. *Хатта* теркәүесе һөйләмдең тиң эйәрсән киҫәктәрен теркәй:

а) тиң аныҡлаусыларҙы: Тик йәш зоотехник менән Гөлгөнә ҡыҫҡа июнь төнө үтеп барғанды ла, ай батҡанды ла, *хатта* таң яҡтылығы һибелә башлағанды ла һиҙмәнеләр (Д.Исламов). Унда һандыҡ дәүмәлле, *хатта* унан да эрерәк таштар береһе өҫтөнә икенсеһе өйөлгән (М.Кәрим). Һәр хәлдә, бындай мәлдәрҙә уны (Аҡбулаҡ) шундай ҡеүәтле, уҫал, *хатта*

ваҡыты-ваҡыты менән мәкерлелер, тип һис тә уйламаҫһың (Р.Солтангәрәев). Усманғәле миндә үҙен иҫкә алып һөйләрлек яҡшы, *хатта* үтә яҡшы тәьҫирҙәр ҡалдырҙы (С.Агиш);

б) тиң тултырыусыларҙы: Уны белмәгән кеше юҡ, һәм ул үҙе лә ауылдың ҡартын-йәшен, *хатта* бала-сағаһын да исемләп белә (К.Мәргән). Рәшиҙәнең маңлайынан, *хатта* бармаҡтары остарынан һалҡын тир бәреп сыҡты («Ватандаш» журналы). Аҡса табыу өсөн бөтә нәмәне, хатта ер-һыуҙарыңды, Ватаныңды һатып ебәрергә мөмкин («Ағиҙел» журналы);

в) тиң хәлдәрҙе: Юҡ, ул туйға барып етә алмам, Өндә түгел, *хатта* төшөмдә (Р. Ғарипов). Өҫтәлдәге телефондар бер-бер артлы, *хатта* бер юлы шылтырай (Б.Рафиков). Итальяндарҙың күбеһе Дантеның батырлығын шапыртып, *хатта* бер аҙ ҡыҙығып һөйләй (И.Абдуллин). Ул бөтә торошо менән ғәжәп бөхтә, матур, мыҡты, *хатта* танымаҫлыҡ тип әйтерлек яңы күренде Алешаға (З.Биишева).

*Хатта* теркәүесе теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе теркәй. Хатта теркәүесе менән теркәлгән теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең өлөштәре араһында түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәре урынлаша:

1) икенсе һөйләмдә беренсе һөйләмдең йөкмәткеһе дөйөмләштерелә: Заһиҙә үтә албырғап ҡалғайны, *хатта* ул ҡайнаған сәйе менән консерваһы хаҡында ла онотто (Н.Мусин). Ҡала мэры бөгөн кис Байрамовтың фатирына үҙе шылтыратты, *хатта* хужа аптырап телһеҙ ҡала яҙҙы («Ағиҙел» журналы). Суминов, кейек аңдыған сос һунарсы кеүек, алан-йолан ҡаранырға кереште, *хатта* Федотов мылтығын һәрмәп ҡуйҙы (Ә.Хәкимов);

2) теҙмә ҡушма һөйләмдең икенсе өлөшө беренсе һөйләмдәге эш-хәрәкәттең, хәл-тороштоң самаһын һәм дәрәжәһен асыҡлай: Көн йылынды, *хатта* эҫе булып китте («Ағиҙел» журналы). Ике саҡрым барғас, үләндәрҙе ялпаштырып ятҡан урынында ҡан ныҡ ҡына аҡҡан, *хатта* тупраҡ еүешләнгән (Н.Мусин).

### *Эйәртеү теркәүестәре*

Эйәртеү теркәүестәре — эйәртеүле һүҙбәйләнеш барлыҡҡа килтереүсе грамматик сара. Әгәр теҙеү теркәүестәре һөйләмдә теҙмә бәйләнеште барлыҡҡа килтерһәләр, эйәртеү теркәүестәре эйәртеүле бәйләнеш яһайҙар, улар башлыса эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәп йөрөй.

Эйәртеү теркәүестәре сәбәп, шарт, оҡшатыу, һөҙөмтә, кирелек мөнәсәбәттәрен белдерә.

Семантик йәһәттән эйәртеү теркәүестәре бер нисә төркөмгә бүленә:

1. Сәбәп теркәүесе: сөнки.
2. Шарт теркәүестәре: әгәр, әгәр ҙә, әгәр ҙә мәгәр.

3. Һөҙөмтә теркәүестәре: ки, хатта, шуға, шуға ла, шуға күрә, шуға күрә лә, шунлыҡтан, шуның өсөн, шул арҡала, шул сәбәпле, шулай булғас, шуның арҡаһында, шуның һөҙөмтәһендә, тимәк.

4. Аныҡлау теркәүесе: йәғни.

5. Оҡшатыу-сағыштырыу теркәүестәре: гүйә, гүйәки.

### *Сәбәп теркәүесе*

**Сөнки** теркәүесе морфологик яҡтан ябай теркәүес, ул һөйләмдә тиң хәбәрҙәрҙе теркәп килә, мәҫәлән: Йәштәр Рәшиҙә әбейҙе күрмәйҙәр, сөнки теге яҡҡа ҡарап ултырғандар (К. Мәргән).

*Сөнки* теркәүесе шулай уҡ эйәртеүле ҡушма һөйләмдә баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһындағы сәбәп мөнәсәбәтен белдерә. Миҫалдар: Ярата ине уны атаһы, *сөнки* ҡыҙыҡай, әсәһенән бигерәк, атаһына оҡшағайны, халыҡ әйткәнсә, һуйып ҡаплаған кеүек («Ағиҙел» журналы). Боҙҙан һыуыҡ, көмөштән саф был шишмәгә... һуҡмаҡ һуҙылған. «Ҡыҙҙар һуҡмағы» тип йөрөткәндәр уны, *сөнки* ҡыҙҙар ошо һуҡмаҡтан бер өҙләкһеҙ шишмәгә йөрөп торған (З.Биишева). Ғәлиә, әлбиттә, минең үҙенә тишә яҙғансы ҡарағанды белмәй, *сөнки* алда барған әсәһенән күҙен алмай килә (Т.Ғарипова). Атаһы Шиһап үлгәндән аҙаҡ Атаһулла ҡарт менән ике аралағы һалҡынлыҡ һуңғы йылда бөткәйне тиерлек ине, *сөнки* Байморат бергә эшләү дәүерендә Атаһулла ҡарттың йөрәк төбөндә ҡаҫта һаҡламай торған эскерһеҙ кеше булыуына тамам ышанғайны (Н.Мусин).

Стилистик маҡсаттарҙа эйәрсән һөйләм үҙ аллы һөйләм булып та килергә мөмкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан *сөнки* теркәүесе менән теркәлгән ҡатмарлы синтаксик конструкциялар араһында сәбәп мөнәсәбәте һаҡлана: Ул башлаған эшен бер ни тиклем алып ҡуйырға булды. *Сөнки уға* бирелгән өс көн үтеп бара ине инде (М.Кәрим). Быға ҡыҙығыусылар күп булһа ла, теше үтерлек кеше табылманы. *Сөнки* алпауыт бик ҡыйбат һорай ине («Ағиҙел» журналы). Шул үҙе. *Сөнки* ҡаптың йәлпәйгән ерендә Байназаровтарҙың ырыу тамғаһы – «ҡуян эҙе» ярылып ята ине (М.Кәрим).

Һөйләшһәләр әгәр туған телдә,
Телгә алыр улар мине лә.
*Сөнки мин* киләсәк менән бергә
Һаҡлап саптым, телем, һине лә (Р.Ғарипов).

### *Шарт теркәүесе*

**Әгәр** теркәүесе — морфологик составы яғынан ябай теркәүес. Ул фразаның башында килеп, шарт һөйкәлеше аңлатҡан мәғәнәне көсәйтә. Миҫалдар: Әгәр Рәшиҙә әбейҙең килгәнен күрһәләр, ҡыҙҙар шунда уҡ мендәрме, балаҫмы сығарып биргән булырҙар ине (К.Мәргән). *Әгәр ҙә*

теркәүесе составындағы *ҙә* көсәйтеү киҫәксәһе теркәүескә төшкән баҫымдың көсәйеүенә булышлыҡ итә: *Әгәр ҙә* республикалар суверенлыҡ алмаһа, уларҙың мөмкинлектәре, билдәле булыуынса, нык тараясаҡ ("Шоңҡар"). *Әгәр* ҙә Мәҙинә лә ташлап китһә, ул нисек йәшәр был донъяла? («Ағиҙел» журналы).

**Әгәр ҙә мәгәр** теркәүесе мәғәнә яғынан *әгәр* теркәүесенән бер ни тиклем айырылып тора. Ул шулай уҡ шарт мөнәсәбәтен белдерә, ләкин был осраҡта шарт мөнәсәбәте киҫкен рәүештә ҡуйыла. Морфологик составы буйынса ҡушма теркәүестәр төркөмөнә ҡарай: *Әгәр ҙә мәгәр* Хисбулла суфый ҡабат килеп сыҡһа, штобы бер һүҙ әйтәһе булма, ишетһен ҡолағың (З.Биишева). *Әгәр ҙә мәгәр* тракторҙы төҙәтергә тура килһә, хәбәр итермен (Н.Ҡәрип).

### ***Һөҙөмтә теркәүестәре***

Һөҙөмтә теркәүестәре: ***хатта, шуға, шуға ла, шуға күрә, шуның өсөн, шунлыҡтан, шуның һөҙөмтәһендә, шул арҡала, шулай булғас.***

Һөҙөмтә теркәүестәре һөйләм киҫәктәрен, шулай уҡ һөйләмдәрҙе теркәү өсөн ҡулланыла, көсәйтеү, һөҙөмтә мөнәсәбәттәрен белдерә.

**Хатта** теркәүесе актив ҡулланылған теркәүестәрҙең береһе һанала. Ул һөйләмдең тиң киҫәктәрен теркәй: 1) тиң эйәләрҙе: Бай ҙа, батша ла, *хатта* пәйғәмбәр ҙә уны тотоп ҡала алманы (З.Биишева); 2) тиң хәбәрҙәрҙе: Рәхмәт йөҙөнән был төбәккә изгелек эшләргә ынтылған, *хатта* бер ҡаяны ауҙарып, күл яһатҡан (Р.Низамов); 3) тиң тултырыусыларҙы: Рәшиҙәнең маңлайынан, *хатта* бармаҡтары остарынан һалҡын тир бәреп сыҡты («Ватандаш» журналы); 4) тиң аныҡлаусыларҙы: Сәйерерәк, хатта бер аҙ һармағыраҡ иҫәпләнгән был ике ҡатындың башына ниндәй генә уй килмәҫ, тиһең (М.Кәрим); 5) тиң хәлдәрҙе: Ысынлап та, иҙәндә лә, *хатта* уға койка хеҙмәтен үтәүсе диван арҡаһында ла китап өйөмдәре ятыр булды (Б.Рафиков) Урамында түгел, *хатта* ишек алдында ла үлән үҫмәй бит унда (Р.Солтангәрәев).

*Хатта* теркәүесе шулай уҡ ҡушма һөйләм составындағы эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәүсе грамматик сара вазифаһын үтәп йөрөй: Каширинсылар Көньяҡ Урал башҡорт ауылдарында күп золом яһаны, *хатта* улар арбаларының күсәрен умарта ватып алған бал менән майлай торған булғандар (З.Вәлиди). Перовский үтә тишерҙәй итеп ҡараны, *хатта* ҡарт һалдат Ырыҫҡолдоң да был ауыр ҡараштан тәне зымбырлап ҡуйҙы, ул итек үксәләрен шыҡылдатып ҡағып, кәүҙәһен турайтты («Ағиҙел» журналы).

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә *хатта* теркәүесе менән теркәлгән эйәрсән һөйләм баш һөйләмдә әйтелгәндең һөҙөмтәһен белдерә: Улар (сәскәләр) шул хәтле тере, *хатта* уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп

торған һымаҡ (З.Биишева). Уның көлөүе шундай матур, *хатта* шишмәнең шылтырауына оҡшаған («Ағиҙел» журналы). Һыу өйәңке тирәһен шул тиклем йыуҙы, *хатта* теге бер аҙ ергә һеңеп ҡалғандай булды (Р.Солтангәрәев). Йәй буйына яуған ямғырҙан ер шул тиклем дымға туйынғайны, һыуҙар ташып, йылғалар ярҙарынан сығып, ваҡ-төйәк күперҙәрҙе алып китте, *хатта* быларҙың бәләкәй генә шишмәһе лә шул тиклем шашты, үтеп йөрөү өсөн тимер-бетондан бәләкәй генә күпер һымаҡ нәмә әтмәләргә тура килде (Р.Солтангәрәев). Буран шул хәтлем ныҡ булған, *хатта* ауыл ситендәге бәләкәй өйҙәрҙе бөтөнләй күмеп киткән («Ағиҙел» журналы).

**Шуға, шуға ла, шуға күрә, шуның өсөн, шунлыҡтан, шул сәбәпле** теркәүестәре башлыса ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәрҙе бер-береһе менән теркәй, һөҙөмтә мөнәсәбәттәрен белдерә. Миҫалдар: Муса Ейәнем ул саҡта бик мауығып инглиз теле өйрәнә башлағайны, *шуға күрә* көсөктө инглизса «Грей» (Һороҡай) тип атаны (М.Кәрим). Моратша бай аҡылға бер төрлө ҡылый күҙле малайына ике йыл буйы ҡыҙ таба алмай икән, үҙ тирә-яғындағыларҙың бирәүһе лә бирмәй икән, *шуға күрә* ул хәҙер алыҫ ауылдарға йөрөргә уйлай икән, тигән хәбәрҙе иҫенә төшөрҙө (Һ.Дәүләтшина). Мышы эҙе түгелме икән, тигән уй тәүҙәрәк һунарсыны бер аҙ тынысландыра төшкәндәй итте, *шуға ла* үҙенең был юрауын дөрөҫләргә теләп, эҙҙе яҙҙыртмаҫҡа тырышты (Р.Низамов). Байтаҡ ерҙе лә ҡулдан ысҡындырырға тура киләсәк, *шуның өсөн* уны хәҙергә бөтөнләй түләмәҫкә кәрәк (Һ. Дәүләтшина). Бына шул-шул, *шуның өсөн* дә һин, мин юҡ саҡта, һис бирәүһе менән дә ҡаты ҡағылма (Һ.Дәүләтшина). Лирик герой-егет үҙенең һөйгәнен иң-иң саф һөйөү менән ярата, *шунлыҡтан* унан айырылып тороуҙы бик ауыр кисерә (Т.Килмөхәмәтов).

**Шуның һөҙөмтәһендә, шул арҡала, шулай булғас, шуның арҡаһында теркәүестәренең** ҡулланылыуына миҫалдар: Ике ырыу Ирәндек йәйләүе өсөн ярыша, *шулай булғас* ике ырыу батыры, ике ырыу сәсәндәре генә ҡатнашалар (М.Буранғолов.) Үтә лә ғорур ине, *шул арҡала* беҙҙең яҡынайышыу байтаҡ ваҡыттан һуң ғына башланды («Шоңҡар» журналы). Һыуыҡҡыстың эсенә тыштағы йылылыҡ күсмәһен өсөн, уның стеналарын ике ҡат яһайҙар, *шул арҡала* һалҡын сыҡмай, йылы үтмәй («Шоңҡар» журналы).

**Ки** теркәүесе иҫкергән һүҙҙәр рәтенә инә. Һөҙөмтә мөнәсәбәтен белдереүсе был теркәүес хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һирәк ҡулланыла. Ул ҡушма һөйләмдә һөҙөмтә эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәй: [Сабир мулла]: Мәғлүм булһын *ки,* беҙ фәҡирегеҙ бик ауыр хәлдәргә ҡалдыҡ (Б.Ишемғол). Башҡортостан ауыл хужалығы шул ҡәҙәр ауырлыҡҡа төштө *ки,* әле булһа үҙенең элекке хәленә килә алмай. ("Совет Башҡортостанының ун йылы", 1929).

### ***Оҡшатыу теркәүестәре***

Оҡшатыу теркәүестәре: гүйә, гүйәки. Был теркәүестәр бер нәмәне йәки эш-хәлде икенсеһенә сағыштырғанда, оҡшатҡанда ҡулланылып, *кеүек*, *шикелле*, *әйтерһең дә* тигән мәғәнә бирә. Миҫалдар: Һүҙең үтмәҫ урындарҙа әмер итмәк – *гүйәки* бағананы таҡа ҡаҡмаҡ (М.Ғафури).

Бик алыҫтан улар күренделәр,
*Гүйә* күкрәк киргән батырҙар (Д.Юлтый).
*Гүйә* әле миңә ун һигеҙ йәш —
Һыу кисмәгән, утта көймәгән (М.Кәрим).
Ышанысым ап-аҡ, яҡты – ниндәй бәхет,
*Гүйә* йәйҙең юлдарыма йәшел бәрхәт (Р.Шаммас).

## БӘЙЛӘҮЕСТӘР

Бәйләүестәр тип һөйләм эсендә үҙ аллы һүҙҙәр араһындағы синтаксик мөнәсәбәттәрҙе белдереүсе ярҙамлыҡ һүҙҙәргә әйтәләр. Бәйләүестәр һөйләмдә айырым һүҙҙәрҙе бер-береһенә бәйләп киләләр: урман аша барыу, ағымға ҡаршы йөҙөү, төнгә хәтле эшләү, кисәнән һуң осратыу, таш һымаҡ-ҡаты, ут кеүек ҡыҙыу һ.б.

Бынан тыш башҡорт телендә бәйләүестәр ҡушма һөйләм эсендә эйәрсән һөйләм менән баш һөйләмдең синтаксик мөнәсәбәтен дә барлыҡҡа килтерәләр: улар эйәрсән һөйләм составында килеп, уны баш һөйләмгә бәйләй. Мәҫәлән: *Беҙ майҙанға барып етеү менән, йәбешкәк ҡар яуа башланы (А.Таһиров).* Үҙҙәренең функциялары менән бәйләүестәр килеш ялғауҙарына яҡын торалар. Килтерелгән һөйләмдә бәйләүес белдергән мөнәсәбәт төшөнсәһен килеш ялғауы менән генә лә бирергә мөмкин: *Беҙ майҙанға барып етеүгә, йәбешкәк ҡар яуа башланы.*

Бәйләүестәр үҙгәрмәүсән һүҙ төркөмдәренә инә, уларҙың грамматик күрһәткестәре юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер бәйләүестәрҙең килеш, күплек, эйәлек, хәбәрлек, сағыштырыу дәрәжәһе ялғауҙарын ҡабул итеүҙәре мөмкин: һинең кеүектәргә, уның кеүегерәк һ.б. Миҫал: Тик ундағы халыҡ ҡына нефтселәргә бер ете ят яҡтан килгән әҙәми заттарға ҡараған *кеүегерәк* ҡарай (Р.Солтангәрәев). Ул миллиондар *һымаҡ*, ябай бер революция һалдаты... Э бит уның *кеүектәр* менән ил тулы (И.Насыри). Урыҫтарҙың кешегә шундай итәғәтлеләре бар, Ғәзимә *кеүектәрең* ары торһон (Һ.Дәүләтшина).

Килеп сығышы буйынса бәйләүестәр үҙ аллы һүҙҙәрҙән барлыҡҡа килгән тип ҡарала. Ошо йәһәттән уларҙы бер нисә төркөмгә бүлеп йөрөтәләр.

1. Төп бәйләүестәр. Был төркөмгә ҡараған бәйләүестәр лексик мәғәнәләрен бөтөнләй юғалтҡан формалар, күп осраҡта уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән айырылып сығыуын да билдәдәүе мөмкин түгел. Улар хәҙерге әҙәби телдә тик бәйләүес функцияһында ғына ҡулланылалар. Башҡорт телендә төп бәйләүестәргә түбәндәгеләр ҡарай: менән, өсөн, кеүек, һымаҡ, шикелле, айҡанлы, ҡәҙәр, ҡәҙәре, табан, һайын, тиклем, саҡлы, хәтлем, күрә, бирле, торо, ише һ.б.

2. Башҡа һүҙ төркөмдәренән (исем, сифат, рәүеш, ҡылым) күскән бәйләүестәр. Улар үҙҙәре айырылып сыҡҡан төп һүҙҙәргә омоним булып торалар.

Был төркөмгә ингән бәйләүестәрҙең байтаҡ өлөшөн исемдәрҙән күскән бәйләүестәр тәшкил итә: тыш, буйы, самаһы, тирәһе (төп килештәге исемдәрҙән); башҡа, көйгә, көйөнә, хаҡына, ыңғайына, оҙайға, оҙайына (төбәү килештәрҙәге исемдәрҙән); арҡаһында, тураһында, хаҡында, хәлдә,

турала, хаҡта, рәүештә, алда, мәлдә (урын-ваҡыт килештәге исемдәрҙән); тарафтан, тарафынан, сәбәптән (сығанаҡ килештәге исемдәрҙән) һ.б.

Рәүеш бәйләүестәргә түбәндәгеләр ҡарай: һуң, элек, элгәре, әүәл, ҡаршы, кире, ары, артыҡ, арҡыры, арҡылы, бире, борон, аҙаҡ, яҡын, былай, алда һ.б.

Сифат бәйләүестәр: бүтән, ала, оҙон, тартым, төҫлө һ.б.

Башҡорт телендә ҡулланылған бәйләүестәр араһында ҡылымдан күскән бәйләүестәр ҙә байтаҡ. Улар түбәндәгеләр: күрә, ҡарап, ҡарамаҫтан, ҡарағанда, ҡарай, ҡарата, ҡарамайынса, була, булып, буйлап, башлап, килеш, тип, ҡала, килгәндә, алып, аша, ашыу һ.б.

Бәйләүестәр үҙ аллы лексик мәғәнәгә эйә түгел, шуға күрә улар айырым торғанда конкрет мәғәнә белдермәй. Үҙ аллы һүҙ хоҡуғына эйә булмағанға күрә, бәйләүестәр айырым һөйләм киҫәге лә була алмай, ә һүҙҙәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе генә белдерәләр. Хәҙерге башҡорт телендәге бәйләүестәр һөйләм киҫәктәре араһында урын-ара, ваҡыт, сәбәп, маҡсат, объект, оҡшатыу-сағыштырыу, бергәлек һ.б. мөнәсәбәттәрҙе белдерә. Ошоға ярашлы бәйләүестәрҙе шартлы рәүештә түбәндәге төрҙәргә айырып йөрөтәләр:

Пространство, йәғни урын-ара бәйләүестәре: аша, буйлап, буйынса, арҡылы һ.б.

Ваҡыт бәйләүестәре: бирле, тиклем, саҡлы, һуң, элек, элгәре, башлап һ.б.

Маҡсат бәйләүестәре: өсөн, тип, була һ.б.

Бергәлек бәйләүесе: менән.

Сәбәп бәйләүестәре: күрә, арҡаһында, айҡанлы, сәбәпле, һөҙөмтәһендә һ.б.

Оҡшатыу-сағыштырыу бәйләүестәре: кеүек, төҫлө, шикелле, һымаҡ, ише, ҡәҙәре, ҡәҙәр һ.б.

Йүнәлеш бәйләүестәре: табан, таба, ҡарата, ҡарап һ.б.

Көсәйтеү бәйләүесе: һайын һ.б.

Бәйләүестәрҙең күпселеге бер нисә мәғәнә белдереп, үҙ-ара синонимик мөнәсәбәттә тора, мәҫәлән: тиклем — хәтлем — саҡлы — ҡәҙәр; килеш — көйө — көйөнә — көйөнсә; тураһында — хаҡында — турала — хаҡта; алда — әүәл — элек; башҡа — бүтән — тыш; аша — арҡыры — үтә; һуң — аҙаҡ; өсөн — күрә — була — сәбәпле; алып — башлап; борон — элгәре һ.б. Бәйләүестәр үҙ-ара антонимик мөнәсәбәттәрҙә лә торорға мөмкин, мәҫәлән: һуң — элек, бире — ары, тәүҙә — аҙаҡ һ.б.

Бәйләүестәр үҙ алдарына ҡулланылмайҙар, ә һүҙҙәр араһындағы синтаксик мөнәсәбәттәрҙе белдереү сараһы булып торалар. Улар, ғәҙәттә, һөйләмдә исемдәр һәм исемләшкән һүҙҙәрҙән һуң килеп, үҙҙәре эйәреп килгән һүҙҙәрҙе башҡа һүҙ төркөмдәренә (ҡылымға, исемгә һәм исем урынында килгән башҡа һүҙҙәргә) бәйләй.

Хәҙерге башҡорт телендә бәйләүестәр түбәндәге өс төркөмсәгә бүлеп йөрөтөлә:

1) төп һәм эйәлек килеш менән ҡулланыла торған бәйләүестәр;

2) төбәү килеш менән ҡулланыла торған бәйләүестәр;

3) сығанаҡ килеш менән ҡулланыла торған бәйләүестәр.

### *Төп килештәге исемдәр һәм эйәлек килештәге алмаштар менән ҡулланылыусы бәйләүестәр*

Был бәйләүестәргә түбәндәгеләр инә: *менән, өсөн, кеүек, һымаҡ, шикелле, төҫлө, һайын, аша, утә, арҡылы, тураһында, хаҡында, турала, хаҡта, буйы, буйынса, буйына, арҡаһында, арҡала, айҡанлы, тарафынан, сәбәпле, урынына, тиклем, саҡлы, ҡәҙәр* һ.б,

**Менән** бәйләүесе хәҙерге башҡорт телендә актив ҡулланыла һәм күп төрлө мәғәнә төҫмөрлөктәре бирә:

1. Бергәлек: Ҡымыҙ эсеп, телдәренә килгәнде әүәләп, ***һаҡсы менән*** бер тын һөйләшеп ултырҙы ла Ҡыуандыҡ ауылға ҡарай китте (Ғ.Хәкимов). ***Яманаев менән*** һөйләшеү уның күңелен бер аҙ тынысландырҙы (Д.Бүләков). Тарғын ҡырҡ ***кеше менән*** генә ҡыуып киткән тегеләрҙе («Башҡорт халыҡ ижады»). Беҙ ***Новиков менән*** икәү инек (Д.Юлтый). ***Григорий Иванович менән*** булған был әңгәмә төн уртаһы ауғансы ултырып ҡына түгел, шәмде һүндереп, йоҡларға яңынан теҙелешеп ятҡас та, бик оҙаҡҡа һуҙылды (Һ.Дәүләтшина).

2. Эш башҡарыу ҡоралы, сараһы мәғәнәһендә: Атты ***сыбыртҡы менән*** ҡыумайҙар, ***һоло*** **менән** ҡыуалар (Әйтем). Төкәтмәле өйҙөң ҡабырғаһына буй эшләнгән соланға килеп ингәс, Хажғәле ҡарт ҡараңғыла ***таяғы менән*** уңлы-һуллы һуғып шаҡылдатты (Ж.Кейекбаев). ***Штык менән*** немецтарҙы сәнсеп ҡыра башланыҡ («Башҡорт халыҡ ижады»). Гөлйөҙөм атаһының ырҙын төбөнә һеперев йыйып ҡуйған тауыҡ емлеген, тәүҙә ***көрәк менән***, ҡалғанын усы менән һыпырып йыйып, торпошаға урап арбаға һалды ла үҙе лә һикереп менеп ултырҙы (Һ.Дәүләтшина).

3. Барған юл, үтәсәк ара: Ике көн ***диңгеҙ менән*** барырға (А.Таһиров). Ҡыҙҙар урманға китеп күп тә үтмәне, Сөнәғәт, кәртә артына сығып, яр буйлап киткән ***юл менән*** һыу үренә табан атланы (Ж.Кейекбаев). ***Днестр буйы менән*** ҡояш байығансы барҙыҡ (А.Таһиров).

4. Файҙаланылған материалды белдерә: Юлдың уң яғында бер ауыл күренде. Бында өйҙәр таштан матур итеп һалынғандар, түбәләрен арыш ***һаламдары менән*** тигеҙ, бөхтә итеп япҡандар (Д.Юлтый). Лавка бикле, ***тимер селтәр менән*** ҡапланған тәҙрә быялаларын саң баҫҡан (Һ.Дәүләтшина). Өр-яңы булмаһа ла, ҡыйығы ***тимер менән*** ябылған, алты мөйөшлө бөтөн генә өйө бар, уны һуғыш башланырҙан бер йыл элек кенә һалып ингәйнеләр (Н.Мусин). Уның һул яғында лапаҫ; уның алдында,

бүкәндәре мүкләнә башлаған тәгәрмәсле арба өҫтөндә ***муйыл ағастары менән*** ҡоршалған ҙур мискә (Ғ.Хәйри).

5. Ваҡыт мәғәнәһе: Бер көндө ***таң менән*** үк торҙом да, оло юл менән сыҡтым да киттем (С.Агиш). ***Кис менән*** иртә йоҡоға ята торған крәҫтиән халҡы ***иртә менән*** дә иртә тора (Һ.Дәүләтшин).***Таң һарыһы менән*** уянып китте Ризуан (Н.Мусин). ***Иртә менән*** йәнле әҙәм ҡалмаған кеүек тыныс ятҡан ауыл ***кис менән*** гөжләп китте (Һ.Дәүләтшина).

Исем ҡылымдан һуң килгәндә, *менән* бәйләүесе ваҡыт эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәй, йәғни теркәүес вазифаһында ҡулланыла: Ҡыш ***яҡынлашыу менән,*** күмәк һунарға ҡыҙыу әҙерлек башлана, айырыуса йәштәр елкенә (Д.Бүләков). Шул хәбәрҙе ***ишетеү менән*** күҙҙәремдән йоҡо осто (Ғ.Ибраһимов).

6. Юл йөрөү сараһы: ***Поезд менән*** оҙаҡ барырға тура килмәне (А.Таһиров).

7. Эштең, хәрәкәттең башҡарылыу рәүеше: Йәнеш ғорур ***төҫ менән*** *дуҫының* артынан эйәрҙе (З. Биишева). Айбулат тәмәке төпсөгөн ырғытты ла, уның янып бөткәнен ***диҡҡәт менән*** ҡараған һымаҡ, утҡа текләп уйға ҡалды (Һ.Дәүләтшина). Мәктәптең түрендә Мирза хәҙрәт йәнәшәһендә ултырыусы Ғариф тыңлатыу нәүбәтенең үҙ улдарына етеүен ***ашҡыныу менән*** көттө (Ғ.Хәйри). Сыуаҡай әбей Емеште һаман шулай ҡурҡытып, илатып, бер ***эшлекле төҫ менән*** ҡот ҡойоуын дауам итте (Һ.Дәүләтшина).

8. Эштең эшләнеү сәбәбе: Уның һүҙенә ҡарағанда, бөтәһе лә әҙер булған, тик бына заказчиктың ***гәйебе менән*** генә эш эшләнмәй ҡалған (Р. Солтангәрәев). Халыҡ уның Ҡарамыш тигән исемен юҡҡа ғына Ҡормош тип алмаштырмағандыр бит?! Үҙең беләһең, ***комһоҙ-комағайлыҡ, һаранлыҡ менән*** ҡормошҡа әйләнгән бит ул (З.Биишева).

9. Эш башҡарыу маҡсаты: Сәрбиямалдың һаранлығын белгәнлектән, уға ***йомош менән*** килгән кеше юҡ (З.Биишева). Сафуан һуғышырға теләмәне. Ярашыу ***ниәте менән:*** – Уйындан уймаҡ сыға тигәндәй, эште олоға ебәрмәйек. Йә, етәр инде, – тине (Я.Хамматов). Ул (Карам) ҡыҙҙың күңелен йомшартыу ***теләге менән*** Зильда эргәһенә килде (Н.Мусин). Ҡунаҡтар таралғас, Мәғфүрә, Айбулатты ***күрештереү ниәте менән,*** Шәһизә әбейҙе ҡунырға алып ҡалды (Һ.Дәүләтшина).

10. Сағыштырыу: – Шағир күңеле ***барометр менән*** бер инде ул! – тип дауам итте Кирәев (Б.Рафиҡов). Поездың тиҙлеге ***ташбаҡа менән*** бер ине («Ағиҙел» журналы). Шағир халҡы ***ярыҡ барабан менән*** бер (Т.Сәғитов). Бындай һорауҙар бөгөн Рәшиттең күңел яраларына ***тоҙ һибеү менән*** бер буласаҡ (Б.Рафиҡов).

11. Эш-хәлгә нигеҙ булған нәмә белдерелә: Рабфакта ике йыл уҡығас, Хәҙисә Барласовнаның кәңәше, ***юллауы менән*** ул институтка күсте (Ә.Хәкимов). – Һин ир ***аҡылың менән*** фәһем итеп ҡара (Ж.Кейекбаев). Ләкин әсәһенең ***кәңәше менән*** Сәми ҡалаға китергә өлгөрмәй ҡалды

(Р.Байымов). Николай батша ***әмере менән*** Тыуған илде ташланым («Башҡорт халыҡ ижады»). «Ләкин был еңеүҙе нисек булһа ла тиҙләтергә кәрәк, сөнки Россия эсендә синфи көрәш көсәйә, большевиктарҙың ***ҡотҡоһо менән*** халыҡтың батшаға ҡаршы күтәрелеп, власты үҙ ҡулына алыуы ихтимал», – тигән һүҙҙәрҙе уҡығас, Федорҙың күҙҙәрендә осҡондар һикергеләне (Н.Мусин).

12. Тормош-көнкүреш сараһы: Бер Йөҙшишмә ауылы, йәғни Нуриханов исемендәге колхоз, һәм тағы ла һанаһаң һыңар ҡул бармаҡтары ла етерлек кенә хужалыҡтар ***игенселек менән*** донъя күрә (Д.Бүләков). Бәләкәйҙән тимер эшен яратҡан, ***ҡорал эшләү менән*** мауыҡҡан (Б.Рафиҡов). Элек-электән Йөҙшишмә районды ғорурлығы була килде. Сөнки район, башлыса,***кортсолоҡ һәм малсылыҡ менән*** шөғөлләнә (Д.Бүләков).

13. Күләмде, ҙурлыҡты, кешенең йәшен белдергәндә ҡулланыла: ***Сама менән*** олоһона ҡырҡ йәштәрҙе бирергә мөмкин булһа, йәшерәгенә утыҙҙан артыҡ булмаҫҡа тейеш ине (С.Агиш). Ләкин төбәлгән ер алыҫ ине әле, ***сама менән*** тағы бер нисә аҙналыҡ юл ҡалған булырға тейеш (К.Мәргән). Дилауиров, ***арҡырыһы-буйы менән*** метрға метр кәүҙәһен ауыр күтәреп, креслоһынан төштө (Д.Бүләков). Тегеһе шунда уҡ ***сажин буйы менән*** түрәһенең алдында ҡайҡайып баҫты ла эт тоғролоғо һирпеп торған күҙҙәре менән Вәлидовтың шаҙра йөҙөнә текәлде (Ф.Иҫәнғолов). ***Егерме беренсе йәше менән*** барған Алдарбай ҡустыһы иһә унан аша ҡарап тора, күҙҙәрендә осҡондар уйнай, һыҙма мыйығы ирҙәрсә матур сырайына олпатлыҡ өҫтәй (Н.Мусин).

14. Тулылыҡ мәғәнәһе: Яландай ҙур цех ***халыҡ менән*** тулы, кешеләр уртаға баҡҡан (Р.Солтангәрәев). Иртә менән мәктәп үҙенең уҡыусылары, уҡытыусыларҙың ***нәҫел-ырыуҙары менән*** тулы булды (Ғ.Хәйри). Ҡазан ҡалаһында йөрөгәндә хисапһыҙ күп ***тауар менән*** тулы кибеттәрҙе күреп, иҫе киткән Шаҡман, бары тик иленә ҡайтҡас ҡына, Мөхәммәт Әмин хандың ҡоро һөйләшеүенә мәғәнә һәм баһа бирә алды (К.Мәргән). Шулай итеп, улар һуғышҡанда, ҡояш яҡтыһында еҙләнеп күренеүсе ***һаламдар менән*** тулы саналар бер яҡ ситтә ял иттеләр (Ғ. Хәйри). – Һу-уу, һеҙҙә өй тулаһы ҡунаҡ икән дә, – тине почтальон ҡыҙ, газета, журналдар, ***хаттар менән*** тулы сумкаһын ҡутара башланы (Н.Мусин). Һандуғастар тауышы инде ишетелмәһә лә, ағас аралары меӊ төрлө моӊ, аһәӊ, ***ауаз менән*** тулған (Д.Бүләков).

15. Йыйыу мәғәнәһе: Өсөнсө көндө инде Николай Кузьмич үҙенең бөтә ***нәмәләре менән*** буш бүлмәгә күсте (Ғ.Хәйри). Гәрәй Шәйбәкович, һеҙҙең менән осрашыуға бик шатмын. Был тосты ***барығыҙ менән*** танышыу хөрмәтенә күтәрәм (Я.Хамматов). [Вәһап:] Һеҙ ***нәҫел-нәсәбегеҙ менән*** төпһөҙ бур булдығыҙ (Ж.Кейекбаев). ***Нәҫел-нәсәбе менән*** шулай улар. Аллаяр ҡайным үҙе лә бик майлы күҙ әҙәм... (Ф.Иҫәнғолов).

16. Эш йәки хәлдең берәй ваҡиғаға бәйле булыуы: ***Беренсе сентябрь менән*** ҡотлайым һеҙҙе, дуҫтар! (Р. Ниғмәти).

17. Эштең, хәрәкәттең башҡарылыу рәүешен белдерә: Бөтәһе лә бер ***әҙәп менән*** килеп күрешә лә донъя хәлдәрен һорашырға тотона (Р.Солтангәрәев). Бына Суфия ниндәйҙер бер ***ярһыулыҡ менән*** ҡәләмгә тотондо (З.Биишева). Ул (Сафа), башҡалар кеүек, ораторлыҡ менән бик мауыҡмай, ***баҫалҡы тауыш менән*** генә һөйләүсән, ләкин эшлекле кеше (Б.Бикбай).

*Менән* бәйләүесе теркәүес функцияһын да үтәп йөрөй һәм һөйләмдең эйәләрен бер-береһенә теркәй, мәҫәлән: Шул төндө офоҡ ***менән*** офоҡ, Ер *менән* күк бергә ҡушылған (Р.Назаров). Ҡылыс та, эйәр ***менән*** йүгән дә – Ҡаһым түрәнеке (З.Биишева). Ер ***менән*** күк араһында, хыял донъяһында ҡанатланып осҡан Биктимер уларҙың сәнскеле һүҙҙәренә ҡолаҡ та һалманы (Ф.Иҫәнғолов). Матурлыҡ ***менән*** көс ярыша бит бында! Сибәрлек ***менән*** ғәйрәт алыша (М.Кәрим).

Бынан тыш *менән* бәйләүесе ҡушма һөйләм составындағы ваҡыт эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә тоташтырыусы грамматик сара вазифаһын үтәй. Был функцияла *менән* бәйләүесе ваҡыт, сәбәп һ.б. мәғәнә төҫмөрлөктәрен белдерә. Мәҫәлән: Ҡыш ***яҡынлашыу менән,*** күмәк һунарға ҡыҙыу әҙерлек башлана (Д.Бүләков). Тәүҙә Гөлшандың тауышы ***ишетелеү менән,*** Фәйрүзә тиҙ генә ҡалҡынып ултырҙы (Д.Бүләков). Таштимер, Мәүсилә урынынан ***ҡуҙғалыу менән***, уның биҙрәләрен алып, мул итеп һыу һоҫоп бирҙе (Д.Бүләков). Көнҡапҡаны ***сығыу менән,*** ҡапыл күҙ сағылткыс яҡтылыҡ пәйҙә булды (Д.Бүләков).

*Менән* бәйләүесенең бер нисә тарихи варианты бар. 1) илә: Ғорур бөркөт шул саҡ ғәйрәт, асыу илә бәдбәхет йәндең өҫтөнә осоп килә (фольклор); 2) ҡайһы бер һөйләштәрҙә, шулай уҡ фольклорҙа был бәйләүес ман/мән формаһында ҡулланылып йөрөй. Мәҫәлән: Үҙенең ***тырышлығы ман*** уҡытыусы булған. ***Балта ман*** утын ҡырҡа (Эй-Миәс, Ҡыҙыл һөйләштәренән). Ерҙе ***һыу мән*** ҡапларға, күкте ут мән ҡапларға, бар дейеүгә бойорған ("Урал батыр" эпосынан).

**Өсөн** бәйләүесе ябай һөйләмдәге үҙ аллы һүҙҙәр һәм эйәртеүле ҡушма һөйләм составындағы баш һәм эйәрсән һөйләмдәр араһындағы бәйләнеште күрһәтеп килә. Ул маҡсат, сәбәп мөнәсәбәттәрен, предметлыҡты һ.б. белдерә.

1. Маҡсат: Быны ул (Рая), бәлки, ***ҡыҙыҡ өсөн*** генә әйткәндер... (Р.Солтангәрәев). Алла үҙенең бәндәһенә, ***һынар өсөн,*** хәсрәт ебәрермен тигән (Һ.Дәүләтшина). Мин һинең ***бәхетең өсөн*** ошо көнгә ҡалдым... (Ж.Кейекбаев). Таулыҡай районында Нурихановтан башҡа хеҙмәт ***уңыштары өсөн*** орден алған председатель юҡ ине, шикелле (Д.Бүләков).

Әгәр *өсөн* бәйләүесе һөйләмдә исем ҡылым, киләсәк заман хәбәр һөйкәлешенән һуң ҡулланылһа, был осраҡта ла ул маҡсат мөнәсәбәтен

белдерә. Мәҫәлән: Гөлбаныу еңгә, ҡунаҡҡа сәй ***әҙерләр өсөн***, самауырын ҡаға башланы (И.Насыри). Кеше донъяны ***йәмһеҙләү өсөн*** түгел, ә ***матурлау өсөн*** тыуа (З. Биишева). Кейәү егет, толпарын кешегә ***күрһәтмәҫ өсөн***, йәшел сатыр ҡороп, шунда ашарға ҡалдырып китә торған булған икән (Әкиәттән). Өсөн бәйләүесе өсөнсө зат бойороҡ һөйкәлеше менән ҡулланылғанда, башлыса маҡсат эйәрсән һөйләмдең хәбәре булып йөрөй, мәҫәлән: Нимәлер әйтергә теләне, ләкин тауыш ***ҙурға китмәһен өсөн***, туҡтаны, сабыр итте (Ғ. Хәйри). Ошолар йәнә ***ҡабатланмаһын өсөн,*** иң йыртҡыс диктаторҙы ла иманға килтерерҙәй ниндәй сюжеттар, ниндәй буяуҙар табаһы?! (Т.Ғарипова).

2. Сәбәп: Һин дә ***минең өсөн*** ыҙа сигәһең (Ж. Кейекбаев). Был юлы Сәмәр хан Заятүләккә килтергән ***йәнлектәре өсөн*** уғы менән ян бүләк итә («Заятүләк менән Һыуһылыу» әкиәте). Һуғыштан һуң ***бер тоҡсай башаҡ өсөн*** йыл ярым ултырып сыҡҡанын әле һаман әсенеп һөйләй (Д.Бүләков). Килеп ***шатландырғаның өсөн*** рәхмәт һиңә (Ә.Бикчәнтәев). Шәүәли, ҡатынының һүҙен ***йыҡмаҫ өсөн*** генә, теләр-теләмәҫ сығып китте (Б.Бикбай). Иштуғандың ошо минутта Тимербайҙы ярһытҡан оло бер теләкте аңларға ла, белергә лә ***уйламауы өсөн*** дә, Закирҙың шундай аҡылһыҙ юлға ***баҫыуы өсөн*** дә эсе бошто, күрәһең (З.Биишева).

3. Эштең бер предметҡа төбәлеше, шуға тәғәйенләнеше белдерелә: ***Һинең өсөн*** генә әҙерләнгән шәрбәт был (Ж.Кейекбаев). ***Бала өсөн*** бишек кәрәк, ***донъя күрер өсөн*** ишек кәрәк (Р.Назаров). Ә ағастарҙың инде бында ***ҡарап өсөн*** эшләрҙәйҙәре генә үҫә: шырпылай төҙ ҡарағайҙар, ҡарағастар (Д.Бүләков). Ҡәҙерле Урал атабыҙ, Һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә, үлемдең ни икәнен дә белмәйенсә, халыҡ ***бәхете өсөн*** йәшә! – тип, мөгөҙҙө түшәктә ятҡан Урал батырға һона («Урал батыр» эпосы).

4. Берәй эштең кем урынына башҡарылғанын күрһәткәндә ҡулланыла. Миҫалдар: Зәғиф аяғын еңелсә һөйрәтеп, тышаулы ат шикелле һикерәнләп атлаған Ғәйзулла ғына ***Шамил өсөн*** яуаплылыҡтан ҡурҡманы (Я.Хамматов). Оксана менән Фәһимә берҙә лә ашамағайны ла, мин ***Оксана өсөн, Марат Фәһимә өсөн*** икешәрҙе ҡыйпылдырып бирҙек (М.Кәрим).

5. Ваҡыт аралығы белдерелә: Абдулла ***бер-ике көн өсөн*** генә кире Проняның янына ҡайтыуҙың кәрәклеген күрмәне (М.Бураҡаева). ***Ике көн өсөн*** Бөрйән ырыуы яуҙы туҡтатырға мәжбүр булды ("Аҙан тауышы" риүәйәтенән). ***Ике көн өсөн*** кәйефең боҙолмаһын (М.Ғафури). ***Бер көн өсөн*** мәшәҡәтләнеп тормаһағыҙ ҙа булыр ине (Д.Бүләков).

6. Ниндәйҙер эштең кем, нимә өсөн башҡарылғанын күрһәтә: ***Һеҙҙең өсөн*** мин яуап бирермен (Ғ.Хәйри). Ҡунаҡтар ниндәй ҙә булһа хәбәр алып ҡайтырға өмөт итәләр, ә Шаҡман ***үҙе өсөн*** отошлораҡ ҡалъя эләктереп ҡалырға тырышты (К.Мәргән). Хәҙер сөгөлдөр ***үҫтереүселәр өсөн*** Банат Батырова исемендәге приз булдырылды («Башҡортостан ҡыҙы» журналы).

**Кеүек, һымаҡ, шикелле, хәтле, төҫлө, ише, ҡәҙәр, ҡәҙәре** бәйләүестәре һөйләмдә оҡшатыу, сағыштырыу мөнәсәбәттәрен белдереп килә.

1. *Кеүек, һымаҡ, төҫлө, шикелле* бәйләүестәре сифат, *саҡлы, хәтле* бәйләүестәре күләм яғынан сағыштырыуҙы аңлаталар, мәҫәлән: Шәрәфи ағай ул уртаса буйлы, ҡалын кәүҙәле, ***арыҫлан һымаҡ*** киң яурынлы, йөрөгәндә һалмаҡ ҡына баҫып йөрөй торған кеше (И.Насыри). Әбелхарис хатта үҙе әйткән: Әбүғалисинала ғилем – даръя, ә миндә ғилем шул даръяның ***тамсыһы тиклем*** генә, тигән (Ж.Кейекбаев). Уларҙың йырҙары ***йылан шикелле*** һуҙылып ятҡан урам, борғосланып аҡҡан йылға өҫтөндәге ҡайғылы ***таҫма кеүек*** һырлығып торҙо (Ғ.Хәйри). Ҡара хеҙмәткә өйрәнгәнме ни һуң ул… Май эсендәге ***бөйөр кеүек*** кенә бит әле ул... (Һ.Дәүләтшина). Оксана буйға Фәһимәнән дә ҙур, ***минең саҡлы*** (М.Кәрим).

2. Шартлы фараз мәғәнәһен белдереп килә: Һәр шартлаған бомба беҙҙең өҫкә ***тошор төҫлө*** (Д.Юлтый). Һыу өҫтөндә таш нисә ҡат һикереп китһә, ***шул саҡлы*** ҡалас ашаған булырһың (М.Кәрим). Ике айлыҡ курста элек биш йыл уҡып алған ***белем тиклем*** белем алдым (Ғ.Хәйри).

*Ҡәҙәр, ҡәҙәре (м), ҡәҙәреһе* бәйләүестәре һөйләмдә төрлө мәғәнә төҫмөрлөктәрен белдереп килә.

1. Сағыштырыу төшөнсәһен: — Ҡала, ҡала, бик ҙур тиһең, нисә ***ауыл ҡәҙәр*** булыр, һинеңсә? (Һ.Дәүләтшина). Беҙ шул эҙҙән тик барырбыҙ, таймабыҙ ***бармаҡ ҡәҙәр!*** (Ғ.Ғүмәр). Бына шулай итеп, ҡуш йоҙроҡ ҙурлыҡ ҡына ҡыҙылморон һигеҙенсе тиҫтәне тултырып килгән аҡ һаҡаллы ҡарттың тормошона ***донъя ҡәҙәр*** үҙгәреш индерҙе (Ғ.Байбурин). Таң алдынан, күк йөҙөндә ***ураҡ ҡәҙәре*** генә ай беленеп, әрәмәлек өҫтөнә табан ята башлаған ҡына Лариса менән Филүз өйгә ҡайтыу яғын ҡаранылар («Шоңҡар» журналы). ***Мөслим Кәбирович ҡәҙәре*** тарихты белгән кеше юҡ (Ш.Насиров).

*2. Ҡәҙәр* бәйләүесе ярҙамында сағыштырыу, оҡшатыу эш-хәрәкәткә ҡарата ла файҙаланыла, йәғни был бәйләүес сифат ҡылым менән дә килә: Һеҙ ***һораған ҡәҙәр*** алтын бирәм. Ул күргән, ***белгән ҡәҙәр*** һин дә, мин дә белмәйбеҙ («Ағиҙел» журналы).

3. Яҡынса иҫәпләүҙе: *Ун көн ҡәҙәре* үтте. *Егерме йәштәр ҡәҙәре* булыр.

4. Предметтарҙың ниндәй төргә ҡарағанлығын: ***Балта, көрәк кеүек*** нәмәнән башҡаһын береһен дә баҙарҙан һатып алмаған ул (Д.Юлтый). – ***Бал, май, ит кеүек*** нәмәләрҙе күҙ уңында тотам инде мин, – тине ул (Д.Бүләков). Хатта улар ***тәгәрмәс тупыны, һалабаш, дегет кеүек*** үтемле әйберҙәр тейәп, ҡалаға баралар (Ж.Кейекбаев). Ҡарттар барып еткәндә, баяғы командир Әхмәдиҙән, ҡайҙа тамаҡ туйҙырырға мөмкин, ***һөт, ҡатыҡ, май кеүек*** нәмәләрҙе кемдән һатып алырға була икәнлеген һорашып тора ине (Һ.Дәүләтшина). ***Юрған, мендәр, түшәк япмаһы кеүек*** нәмәләрҙе ошо

көндәрҙә генә Ладога боҙо аша Ленинград блокадаһынан сығарылған балаларға биргәндәр (М.Кәрим).

**Тураһында, хаҡында, турала, хаҡта** бәйләүестәре объект төшөнсәһен белдерәләр, йәғни уй-фекерҙең, һүҙҙең кем йәки нимә тураһында икәнлеген аңлаталар: Беҙ йырлайбыҙ ***Ватан тураһында,*** Тимәк, йырланалар батырҙар. Йыр ***батырҙар тураһында*** булһа, Тимәк ул йыр ***Ватан хаҡында*** (Р.Ниғмәти). Ямалов ***ошо хаҡта*** һүҙ ҡуҙғатыу өсөн бынан да уңайлы ваҡыт булмаҫ, тигән фекергә килде һәм күңелен өйкәгән уйҙарын асып һалды (Н.Ғәйетбаев). Уйҙары ***сержант Зух тураһында*** ине (М.Кәрим). Әсәйем менән Серафим ағай ***нефть тураһында***, буровойҙағы ***мәшәкәт хаҡында*** һөйләшеп ултыралар (Ә.Бикчәнтәев). Сәйҙән һуң улар башҡорттарҙан ***ер алыу тураһында*** һөйләштеләр (С.Агиш). Көньяҡ Уралдың металлургия үҙәге Белорет ҡалаһында эшселәрҙең көслө ***отрядтары тупланыу хаҡында*** хәбәр алынған (З.Биишева). Алсынбай Күкһыу, Асылыкүл буйҙарының хозур ***тәбиғәте, иленең ғөрөф-йолалары тураһында*** һөйләй, ҡобайырҙар һамаҡлай (Ә.Хәкимов ).

**Буйынса, буйына, буйлап** бәйләүестәре үҙ аллы лексик мәғәнәле буй һүҙенән килеп сыҡҡан тип ҡарала. Ысынлап та, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ҡулланылған буй һүҙе менән был бәйләүестәр араһында семантик уртаҡлыҡ күҙәтелә: кешенең буйы, көн буйы, ғүмер буйынса тигәндә кешенең оҙонлоғо, ваҡыт оҙонлоғо тураһында һүҙ бара.

*Буйынса, буйы, буйына, буйлап* бәйләүестәре төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң киләләр һәм түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерәләр:

1. Пространство мөнәсәбәтен, йәғни хәрәкәттең ниҙеңдер буй йүнәлешендә дауам итеүен: Ике туған асфальтланған ***һуҡмаҡтар буйлап*** һүҙһеҙ байтаҡ йөрөнөләр (Б.Рафиҡов). Таҡта ***ҡойма буйлап*** һаҡ ҡына килгән Байгилде ҡапыл туҡтап ҡалды (Д.Бүләков). Әхмәди, ***һыу буйлап*** килеп, Ташбатҡан ауылының үрге осондағы тапандыға, мал утлай торған типһәнгә килеп сыҡты (Ж.Кейекбаев). Күрәһең, был хаҡта ул ***юл буйына*** баш ватҡан (Ф. Иҫәнғолов). Ике тау араһынан селтерләп ағып ятҡан ***йылға буйына*** еткәс, Иҫәкәй атын туҡтатты (Н.Мусин).

*Буйынса* бәйләүесе эш-шөғөлдөң таралыу өлкәһен белдерә, мәҫәлән: ***Кластар буйынса*** тәртип ҡағиҙәләре тураһында әңгәмәләр ойошторолдо (Р.Байбулатов). Ләкин ***ил буйынса*** ауыр саҡтарҙа ла клиниканың дәрәжәһен тотоп килеү һәр кемгә эләкмәй (Д.Бүләков). Бер хәбәр ҙә юҡ. Бөтә ***ил буйынса*** эҙләү ойоштороҙоҡ, фотоларын тараттыҡ. (Т.Сәғитов).

2. *Буйы, буйына* бәйләүестәре ваҡыт мөнәсәбәтен белдерә: Карам күп уйлана, көн оҙоно эшләп арыуға ҡарамаҫтан, ***төндәр буйына*** йоҡлай алмай борғоланып сыға (Н.Мусин). Һабрау ***көн буйы*** ҡурай тартып, думбыра сиртеп, йәштәрҙең күңелен асты, үҙе лә уларға ҡушылып бейене, отоп алған ҡобайырҙарын әйтте (Ә.Хәкимов). Ҡарт, ***көндөң-көнө буйы*** ҡайғыға күмелеп, өнһөҙ-тынһыҙ әбейҙең һөйләгәндәрен тыңлай ҙа тәрән көрһөнөп

ҡуя (Һ.Дәүләтшина). Ил ағаһы ошонан аҙаҡ ханға үҙе ***йылдар буйына*** һаҡлап йөрөткән йүкә сәскәһен сайҡатып, балан ҡағы ҡушып, мәтрүшкә ҡатыш ҡарағат сәйе эсергән (Н.Мусин). Фронтҡа ашыҡҡан йәш офицерҙар ултырған поезд ***тәүлек буйы*** алһыҙ-ялһыҙ алға осҡан еренән ҡапыл туҡтай ҙа яртышар сәғәт ҡымшанмай ҙа тик тора (Ә.Хәкимов).

3. *Буйынса* бәйләүесе шулай уҡ түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдергәндә ҡулланыла:

а) эш-хәлдең берәй нәмәгә ярашлы рәүештә башҡарылыуын белдерә: Шул ***ғарызнамә буйынса*** бөтә ил яуға сыҡҡан («Башҡорт халыҡ ижады»). Геологтар ***мәғлүмәте буйынса*** бындағы руданың сифаты бер аҙ юғарыраҡ булырға тейеш, – тине шахта начальнигы (Я.Хамматов). Башҡорттар тегеләрҙең икеһе алдында ла, ***ғәҙәт буйынса***, уң ҡулды түшкә ҡуйып бил бөктөләр (Б.Рафиҡов). Айбулат ***йәше буйынса*** киләһе яҙ айҙарында ғына һалдатҡа алынырға тейеш булһа ла, уға саҡырыу ҡағыҙы килеп төштө (Һ.Дәүләтшина). Драгин ҡатынының ***әмере буйынса*** түрәләр Әмин менән бергә бөтә башҡорт егеттәрен ҡулға алып, алмас башаҡлы уҡтың кемдеке булыуын белергә тырышалар («Башҡорт халыҡ ижады»);

б) берәй эш төрөн, эш өлкәһен: ***Вазифам буйынса*** мин халыҡ дружинаһы командиры булып иҫәпләнәм (Б.Рафиҡов). Улай тимә, Әхәт, ***хужалыҡ эштәре буйынса*** урынбаҫарың итеп алырҙай кешеләр бар хәҙер (Н.Мусин). Ләйлә ***практикант-секретарша буйынса*** юғары белем алған ҡыҙ (Д.Бүләков). Нинаның художестволы әҫәрҙәре әҙ ине, күберәк ***тимер юл транспорты буйынса*** техник белешмә китаптары (Б.Бикбай).

**Һайын** бәйләүесе ваҡыт, урын һәм сәбәп мөнәсәбәттәрен белдерә:

1. Ваҡыт мөнәсәбәте. *Һайын* бәйләүесе ваҡытты белдереүсе төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, ваҡыт мөнәсәбәтен аңлата һәм эш-хәрәкәттең билдәле бер ваҡыт эсендә ҡабатланып тороуын күрһәтә: Ҡуштирәк магазинына ***аҙна һайын*** район үҙәгенән ап-аҡ ҡалас килтерәләр (Ә.Хәкимов). Әсирҙәр әллә нисәмә төрлө сорттағы ондо ***көн һайын*** унарлаған бот эшләп сығарһалар ҙа, үҙҙәренең тамағы кәбәк ҡушып бешерелгән ҡара икмәккә лә йүнләп туймаңы (М.Кәрим). Ҡышҡы туйҙан һуң килен төшөрөүгә тиклем кейәү кеше ***кесаҙна һайын*** ҡыҙ йортона «кәләш кейәүләргә» ҡуна бара (М.Кәрим). ***Көн һайын*** үҙенә генә хас нәзәкәтлек менән кейенеп килергә ғәҙәтләнгән Нәфисә, һығылмалы буй-һыны, һөрмәле зәңгәр күҙҙәре, бер аҙ ялҡауыраҡ, әммә һауалы ҡыланыштары менән унын ҡараштарын иркәләп, председатель кабинетына инде (Д.Бүләков).

2. Урын мәғәнәһе. *Һайын* бәйләүесе эш-хәрәкәттең йәки берәй хәлдең айырым объекттарға таралыуын күрһәтә: Бандиттар үҙҙәренең ғәҙәттәре буйынса, ***ауыл һайын*** яңғыҙ ярым ҡалған совет эшселәрен, уҡытыусыларҙы аҫып, киҫеп, атып йөрөргә сығып киттеләр (Һ.Дәүләтшина). Инде, иптәштәр, был мәсьәләне ***собрание һайын*** ҡуйып, ҡайта-ҡайта ҡоро һүҙ

генә һөйләп тора торғаны юҡ (Һ.Дәүләтшина). Юл йөрөгәндә ***ауыл һайын*** таныш-белеш булыуы бик яҡшы эш тә, ләкин Фәсхиҙәрҙең был ауылда күҙгә күренгән таныштары булманы (Т.Йәнәби).

3. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә үткән заман сифат ҡылым менән берлектә ваҡыт һәм сәбәп мөнәсәбәттәрен белдерә. Мәҫәлән: Эйе, *йылдар* ***уҙған һайын***, беҙ уны нығыраҡ иҫкә алырбыҙ (Һ.Дәүләтшина). Ошо кәкүк тауышын ***ишеткән һайын***, мин, уның яҙғы тауышына ҡушылып, күп иҫтәлектәр, йырҙар, ышаныуҙарҙы иҫкә төшөрәм (Һ.Дәүләтшина). Күҙ күреме ***алыҫайған һайын***, ҙураттар ҡуйыра бара (Ж.Кейекбаев). Тыуған ил, тыуған төйәк тигән төшөнсәләр унан ***алыҫлашҡан һайын*** ҡәҙерлерәк була бара икән (Н.Мусин).

**Арҡаһында, айҡанлы, сәбәпле** бәйләүестәре. Был бәйләүестәр төп килештәге исем йәки исем ҡылымдарҙан һуң килеп, сәбәп мөнәсәбәтен белдерәләр: Тәүҙә йәшерен, ә һуңынан асыҡтан-асыҡ алып барылған ***агитация арҡаһында*** беҙҙең һалдаттар Дутовҡа ҡаршы барыу өсөн яҡшы әҙерләнгәйне (З.Вәлиди). Ошо ***Арыҫланы арҡаһында*** хисләнеп, иҫәрләнеп, әлегеләй иләҫләнеп киткән мәлдәрендә уны моң ҡотҡара (Д.Бүләков). Сәхнәнән аҫҡа ҡарап, бөйөк Еңеүҙең ***утыҙ йыллығы айҡанлы*** мәжлескә тантаналы йыйылған халыҡты күҙәтеп ултырыуы бөгөнгөләй хәтерендә Мансурҙың (Ә. Хәкимов). Берҙәм тырышлыҡ, уртаҡ мәшәҡәттәр ырыуҙан ***айырылыу арҡаһында*** тыуған яңғыҙлыҡ тойғоһон, һәр төрлө мыжыу, шик-шөбһәне еңергә ярҙам итте (Б.Рафиҡов).

Әле атап үтелгән бәйләүестәр шулай уҡ эйәртеүле ҡушма һөйләмдәге сәбәп эйәрсән һөйләмдең хәбәренән һуң килеп, эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе грамматик сара вазифаһын да үтәп йөрөйҙәр: Ҡотлау телеграммалары ***күп булыу сәбәпле,*** иртәгә яңы йыл тигән көндө телеграф бик көсөргәнеп эшләне (Х.Мохтар). Кейеменең ***йоҡа һәм насар булыуы сәбәпле***, һөйәк һәм еләктәренәсә һалҡын үткәргән Фатима үҙенең улы менән өйөнә ҡайтҡанда, беренсе әтәстәр ҙә ҡысҡырҙы (Ғ.Хәйри).

**Тип** бәйләүесе *өсөн* бәйләүесенең синонимы булып йөрөй, исем һәм ҡылым формалары менән килеп, предметлыҡты ла, маҡсат мөнәсәбәтен дә белдерә. Миҫалдар: Тик тороуҙы, бушҡа һәлпәнләүҙе яратмай Алдарбай, йә йылҡы көтөүҙәрен барлап ҡайта, йә ***һөнәрго тип*** сығып китә (Н.Мусин). Ғүмер-ғүмергә ***эш тип*** йәнеңде бирҙең дә баһа (З.Биишева). Шуны кер төшөрмәй, ***Бибешемә тип*** һаҡлай инем (З.Биишева).

**Тарафынан** бәйләүесе эш башҡарыусы, субъект мәғәнәһендә килгән исемдән һуң ҡулланыла. Миҫалдар: Эшмәкәр М.В.Камалов, ***аҡтар тарафынан*** язалап үлтерелгән 15 йәшлек Петр Калмыков һәм башҡа кешеләр *тураһында* күп һөйләргә була (Р.Солтангәрәев). Бына шул рәүешле берләшеп хәрәкәт иткән ваҡытта ғына беҙ хәҙерге кеүек мөһим бер ваҡытта ***тарих тарафынан*** өҫтөбөҙгә йөкмәтелгән бурыстарҙы тулыһы менән үтәй аласаҡбыҙ (Р.Байымов). Башҡортостан ере ***Колчак тарафынан***

баҫып алынған мәлдә, май башынан август уртаһына саҡлы, Башҡортостан хөкүмәте Саранск ҡалаһында эвакуацияла булды (Ф.Иҫәнғолов). Үҫмер сағынан уҡ батрак, һуңынан революция һуғышсыһы, ауылда колхоз ойоштороусыларҙың береһе булған, ауыл Советы башҡарма комитеты председателе посында ***кулактар тарафынан*** үлтерелгән Ибраһимдың ҡәберен улар оҙаҡ эҙләнеләр (Б.Рафиҡов).

**Аша, арҡылы, утә** бәйләүестәре бер-береһенә синоним булып торалар һәм контекста бер-береһен алмаштырып киләләр. Улар исемдәрҙең төп килеше, алмаштарҙың эйәлек килеше менән килеп, түбәндәге төшөнсәләрҙе белдерә:

1. Эш-хәрәкәттең берәй кеше (субъект) ярҙамында башҡарылыуын. Миҫалдар: Кисә бер студент ***дуҫы аша*** ҡыҙҙарының кавалерын эҙләп тапты (Д.Бүләков). Ул эштең ниҙә икәнен төшөнә һалып аптырап ҡалырға өлгөрмәне, был хәбәр малайҙар, ***егеттәр аша*** ҡоҙаларға килеп етте, йәшен тиҙлеге менән бөтә ауылға таралды (Һ.Дәүләтшина).

2. Пространство мөнәсәбәтен: а) нимәнең дә булһа бер яғынан икенсе яғына табан булған йүнәлеште белдерә: Хәбибулла Сөнәғәткә заводта уҡ, ҡайтҡанда мотлаҡ беҙҙең ***ауыл утә*** ҡайт, атайымдарға сәләм әйтерһең, тип ҡалғайны (Ж.Кейекбаев). Мин хаҡлымын, Уттар, ***һыуҙар аша*** Үтте был иптәш, тип әйтергә (Р.Ниғмәти);

б) ниндәйҙер бер пространство, аралыҡ: Рәшиҙә уларҙан ***бер өй аша*** өләсәһе менән тора (Б.Рафиҡов). Ана урамдың уң яғында, ***бер өй аша***, Гөлйөҙөмдәрҙең өйө (Һ.Дәүләтшина). Бер ун минут самаһы үткәнме икән, юҡмы икән, ҡуйы ботаҡтарын тарбайтып, ***урам аша*** арҡыры ятҡан тополь ағасына килеп төртөлдөләр (Ғ.Байбурин);

в) предметтың, әйберҙең бер яғынан икенсе яғына үтәләй мәғәнәһендә: Бына ул ҡараштарын ***тәҙрә аша*** офоҡтарға ташланы (Д.Бүләков). Сәлиха ***тәҙрә үтә*** күреп, аласыҡҡа энеһе янына сыҡты (Ж.Кейекбаев). Бейек ҡаяға баҫып, тирә-йүнде ***бинокль аша*** байҡап тора ла Мансур, шиклерәк тауыш ишетелһә, шул тарафҡа юллана (Ә.Хәкимов). Бала-саға көндәр буйы шул тирәлә уралды, өлкәндәрҙән дә шулай уҡ «Кинйәһолтанды» ***япма аша*** һәрмәп ҡараусылар булды (Б.Рафиҡов). Улар үткән юлда күпереп ятҡан туғайҙар, көтөүлектәр тупраҡ менән бергә бутала, ат тояҡтары аҫтынан күтәрелгән ***туҙан аша*** көндәр буйы ҡояш нурҙары үтә алмай (Р.Байымов);

г) нимәнең дә булһа өҫтөнән мәғәнәһендә: Айбулат үҙе һыбай килгән аттан төшөп, уны буш ебәрҙе лә, эйәр, туҡымын ҡулына алып, йүгәнен ***яурыны аша*** һалып, тирмәләр һалынасаҡ ҡалҡыуға табан атланы (Һ.Дәүләтшина). Малайҙар килә биргәс, Зөләйха әбейҙең дә бында булыуын, ***кәртә аша*** һөйләшеп торған кешенең ул икәнен күрҙеләр (З.Биишева). Мәликәнең ҡаҡ һөйәк кәүҙәһе һике ҡаҙнаһынан иҙәнгә шыуышып төштө, ул иҫәнгерәп ятты ла, аҡтыҡ көсөн йыйып, ишеккә табан үрмәләне, башын ***тупһа аша*** һалды (Ф.Иҫәнғолов). Ул, ҡорт борлап оҫҡан

кейә тәңгәленә еткәс, кирәмен ипләберәк ҡуйҙы ла, ҡайыш бауын ***ботаҡ төбө аша*** ырғытып, тәпәлдереген таҡты (Н.Мусин).

3. Сара мәғәнәһендә: Кеше донъяны күңелендә, күҙ алдында яңынан тыуҙыра, һүҙ, буяу, ***өндәр аша*** һынландыра («Ағиҙел» журналы). Бөгөн ул да ҡыҙын тыңлай кеүек, ***Радио аша*** алыҫ ауылдан (Ғ.Сәләм). ***Телеграф сымдары аша*** морзе аппараты ошо ике һүҙҙе туҡылдатты: «Сержант Зух…» (М.Кәрим). Туҡтап, бик оҙаҡ ***рентген аша*** төшөрөлгән һүрәткә ҡарап онотолдо (Д.Бүләков).

4. Ваҡыт мөнәсәбәтен белдерә: Ул, ***быуаттар аша*** атлап, һәр быуынды йәшәүгә, көрәшкә, хеҙмәткә рухландыра (З.Биишева). Уларҙың моңло йыры, гүйә, ***йылдар аша*** миңә ишетелде (Р.Ғарипов). ***Көн аша*** үҙем атланып йөрөй торған ерән ҡашҡа ат эҫе көндә ауыр арбаһын, арбаһында атайҙы һәм миңә таныш булмаған кешене һөйрәгән килеш ҡапҡа ҡырына килеп туҡтаны (Ш.Насиров).

5. Эш-хәрәкәттең башҡарылыу рәүеше:

Ҡояш! Ямғыр!...

Ҡоя ямғыр бирҙең.

***Күҙ йәше аша***

Йылмайғанды күрҙең (Р.Ғарипов).

Әхмәткә килгәс, үҙенең иҫән-һау икәнен йәшерен ***юлдар аша*** хәбәр итте итеүен (Р.Байымов).

**Арҡылы б**әйләүесе берәй эш-хәлдең ниндәй сәбәптән булғанын күрһәтә: Бынау йылдарҙа ***һеҙҙең арҡылы*** башланған талаштан башы ҡатып йөрөй (Һ.Дәүләтшина). (Диләфирүз) Ғәзимәнең үҙен әрләүен *Хаяттың ошағы арҡылы* булғанын белһә лә, әсәһенең былай аҙапланыуына төшөнә алманы (Һ.Дәүләтшина)».

**Килеш, көйө, көйөнә, көйөнсә** бәйләүестәре. Улар төп килештәге исем, шулай уҡ сифат, күрһәтеү алмашы һәм үткән заман сифат ҡылымдан һуң килеп, эштең эшләнеү рәүешен белдерәләр. Миҫалдар: Бөтә ғүмер юлын тап ошолай, кеше арбаһына аяҡ һалындырып, арҡаға арҡа биреп ***ултырған көйө*** үтмәҫме икән был икәү, тим (М.Кәрим). Яубаҫаров ишек төбөндә ***көйөнсә*** генә газеталағы мәҡәләне уҡый башланы (Д.Бүләков). Ошолай ялған ант итеп, бинахаҡҡа ярлы-етемде рәнйетмәһә, байҙар уны яратыр инеме лә тома ***һуҡыр көйө*** ике бисә алып типтереп йәшәй алыр инеме ул! (З.Биишева). Зәки Вәлиди яҙыуынан туҡтап, ғәҙәтенсә ***ултырған көйө*** башын артҡа ҡайҡайтып, тынып ҡалды (Р.Байымов).

**Урынына** бәйләүесе түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерә:

1. Бер предметты йәки кешене икенсеһе менән алмаштырыу: ***Ат урынына*** һабанға, тырмаға үҙебеҙ егелдек (Р.Байымов). «Тайнов малайҙары» уны ҡыуаларға ла ***уның урынына*** бер Урман-Күҙәй егетен ҡуйырға йөрөйҙәр (И. Насыри). Уларҙың тарыһы уңмай, ***тары урынына*** бил быуарынан билсән, һарут, һөтлөгән, күҙлут үҫә (Ж.Кейекбаев).

Үҙҙәренсә шунда һәр төрлө ғәйбәтте ***кағыҙ урынына*** сәйнәйҙәр ине (Ғ.Хәйри). Ҡайһы ваҡыт ***энә урынына*** сусҡа ҡылы менән тегергә тура килә (Ғ.Ибраһимов).

2. Бер эш-хәрәкәтте икенсеһе менән алмаштырыу: Ул (Имай) кырандаста иреп, ҡалғып ***ҡайтыу урынына***, әле ары, әле бире әйләнеп, күсер Сәйетҡолдоң теңкәһенә тейеүҙән бушаманы (Һ.Дәүләтшина). Усман бай ҙа, ҡатыны ла, улын ***тыйыу урынына***, быға көлөп, уйын итеп кенә ҡаранылар (Ж.Кейекбаев).

3. Сағыштырыу мәғәнәһе: Һин ул яҙыусыларҙы ***һыу урынына*** белергә тейешһең, улыҡайым (Р.Байбулатов). Ниңә кисәнән һуң Наилде ***эт урынына*** туҡманығыҙ? (Р.Байбулатов). Машиналары ла ***себен урынына*** геүләп йөрөп ята (Д.Бүләков).

### *Төбәү килештәге исемдәр менән ҡулланылыусы бәйләүестәр*

Был төркөмгә түбәндәге бәйләүестәр инә: *тиклем, хәтле(м), саҡлы, ҡәҙәр, күрә, ҡаршы, ҡарап, ҡарай, табан, торо, ҡарағанда, ҡарамаҫтан, ҡарата.*

**Тиклем, хәтле(м), саҡлы, ҡәҙәр** бәйләүестәре. Исем, алмаш һәм ҡылым формаларынан һуң килеп, түбәндәге мөнәсәбәттәрҙе сағылдыра:

1. Төбәү килештәге исемдәр менән килгәндә ара (урын) сиген: Михаилдың өйөнә утарҙың ***бер осонан икенсе осона тиклем*** һыҙылып ятҡан яр аҫтынан, һыу буйлап киткән һуҡмаҡ буйлап барырға кәрәк ине (Һ.Дәүләтшина). Беҙҙең атай дошманды ***алыҫҡа тиклем*** ҡыуып барғандыр, шуның өсөн тиҙ генә ҡайта алмайҙыр, эйе бит, Оксана? (М.Кәрим). Әммә Урал, үҙенеке итеп, таш тултырған тоҡто туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы йыйылышып торған ***урынға хәтле*** күтәреп алып барҙы («Башҡорт халыҡ ижады»). Собхан старшиналарҙың һырлап-селтәрләп, зәңгәргә бүлеп эшләнгән өр-яңы ҡапҡаларының алды, урам ***уртаһына хәтле*** тап-таҡыр итеп көрәп ҡуйылған (З.Биишева).

2. Ваҡыт сиген: Ә беҙгә ***таңға тиклем*** ун биш саҡрымлап юл үтергә кәрәк (И.Насыри). Хөршиҙә әбей ауылға ***ут алғансыға саҡлы*** ҡайтып етермен, тип уйланы (С.Агиш). Ваһап ҡарт тәпе ҡороп ***кискә тиклем*** маташты һәм ҡояш байып, күҙ бәйләнер алда ғына ҡайтып килде (Ж.Кейекбаев). Сыуаҡай әбей инде, Байгилде ағай таңдан ***төнгә хәтле*** Ҡормош байҙарҙа эштә булғас, иркенләп, Сәғүрә еңгәне лә имләргә әҙерләнә башланы (З.Биишева). Ямғырҙа ҡарт Үҙәште ҡырҡынындағы баҡсаларҙың барыһына ла күҙ-ҡолаҡ булып тора: ул ***көҙгә тиклем*** ошонда йәшәй (Ж.Кейекбаев).

3. Эш-хәрәкәттең тулылығын: Ул Сөнәғәттең ***башынан аяғына тиклем*** ҡарап төштө лә, уның кейеменә иғтибар итте (Ж. Кейекбаев). Егет уянғас та, үҙ тирмәһенә саҡыртып алып, ***энәһенән ебенә тиклем*** һорашты (К.Мәргән). Хатта Шаһиәхмәт, Баһауға кәләш әйттергән саҡта, күпме ҡалым бирергә кәрәк булыуын, Ғүмәр ауылынан, килен яғынан, нисә дуғалы ҡунаҡ килеүен, уларҙы һыйлау өсөн күпме мал һуйылғанын – ***энәһенән ебенә тиклем*** барыһын да һөйләп сыҡты (Ж. Кейекбаев).

4. Ниндәйҙер эш-хәрәкәттең сиген: Миңлебикәне үҙенә насип итмәгән өсөн, хатта хоҙайға асыу итеп, никах доғаһын ***башынан аҙағына тиклем*** еренә еткереп уҡып та торманы (К.Мәргән). Нисәнсе класта, нисек уҡыуымдан алып, ***зат-ырыуыма тиклем*** төпсөнә (Т.Ғарипова).

5. Объект мөнәсәбәттәрен: Хаммат иген игергә, хатта ауылда һирәк сәскән ***көнбағыш, картуф, ҡауын-карбуздарға хәтле*** үҫтерергә ярата (З.Биишева). ***Сыбыртҡыһына тиклем*** йүкәнән хатта (Ж.Кейекбаев).

**Ҡарай** бәйләүесе. Хәҙерге башҡорт телендә ***ҡарай*** бәйләүесе түбәндәге мөнәсәбәттәрҙе белдерә:

1. Пространство мөнәсәбәтен, йәғни эш-хәрәкәттең йүнәлешен: Алмас менән Ғәлимә, ҡыҙ менән кейәү егете кеүек, арбаға һыйынышып ултырып, ***ауылға ҡарай*** юлландылар (Б.Ноғоманов). Тимербәк, түҙмәйенсә, кискә ***баҫыуға ҡарай*** йүгерҙе («Ағиҙел» журналы). Ул арала Кузьмин байы, баҫҡыстан тамаҡ ҡырып төшөп, ҡапҡа ҡаршыһындағы оло таш ***лавка яғына ҡарай*** китте (Һ.Дәүләтшина).

2. Ваҡыт мөнәсәбәтен: ***Байрамға ҡарай*** Рим ауылына ҡайтып китте («Йәншишмә» газетаһы). ***Кискә ҡарай*** ҡаланан тағы яңы хәбәрҙәр өҫтәлде (Д.Юлтый). ***Кискә ҡарай*** Әнисә тауарҙарын һатып та бөтөрҙө («Йәшлек» газетаһы).

3. Ярашлыҡ, тиңлек мәғәнәһен: *Заманына ҡарай* – көлкөһө, *тауына ҡарай* – төлкөһө (Мәҡәл). *Еренә ҡарай* – йыланы, *тауына ҡарай* – боланы (Мәҡәл).

**Ҡарап** бәйләүесе башҡарыласаҡ эш-хәрәкәтте дәлилләүҙе белдерә: Ғөмүмән, лесхоздың эше тураһында министерствола күберәк бирелә торған ***отчеттарға ҡарап*** фекер йөрөтәләр (Н.Мусин). Петр Максимович, беренсенән, министерство был эште башламаған икән, моғайын, беҙ ***әйткәнгә ҡарап*** ҡына кире уйламаҫ (Н.Мусин). Иркенлектә-ирәүәнлектә бер кемгә илдә баш бирмәҫ төҫлө уйнаҡлап-сабып йөрөгән дүнән-дүнәжендәр, нуҡта кейҙереү менән, ***кешеһенә ҡарап***, ҡулға тиҙ ылыға (Ш.Янбаев).

**Ҡарамаҫтан** бәйләүесе төбәү килештәге исем ҡылымдан һуң килеп, кире һөйләмде баш һөйләмгә бәйләп, ҡапма-ҡаршылыҡ мөнәсәбәтен бирә, мәҫәлән: Былай ***йәш булыуына ҡарамаҫтан***, ғәйрәтле күренә ине әле ул крансы янында (Д.Бүләков). Балтик портына ошо һөжүм Россия империяһы яҙмышына йоғонто яһай алмау ғына түгел, тарих китаптарына ла эләкмәй,

бары архив ҡағыҙҙарында ***ятып ҡалыуына ҡарамаҫтан,*** серлелеге менән оло ваҡиғалар рәтендә өйрәнеүгә лайыҡлы (Р.Байымов). Аш һәм сәй ваҡытында ла Көнһылыу, шат, асыҡ булырға ***тырышыуына ҡарамаҫтан***, ғәҙәттәгегә ҡарағанда ла аҙ һүҙле ине (З.Биишева). Сит-ят илгә килеп ***юлығыуына ҡарамаҫтан***, Һабрау, ожмахҡа тиң ошо ергә аяҡ ҡуйған, өс-дүрт айлыҡ оло сәфәрҙән бик ныҡ арыҡланған тәненә дауа тапты (Ә.Хәкимов).

**Ҡарағанда** бәйләүесе түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерә:

1. Әйтелгән фекерҙең сығанағын: Әсе телле кешеләрҙең, атап әйткәндә, Сыртлановтар лагерының ***һүҙ ҡуйыртыуына ҡарағанда,*** бындай ҡиммәтле исемгә (матрос) һис ниндәй нигеҙ юҡ булып сыға (Ә.Хәкимов).

2. Ике әйберҙе сағыштырыу төшөнсәһен: Урамдар бөгөн ***кисәгегә ҡарағанда*** ла ныҡ үҙгәргән, өйөм-өйөм ҡар тауҙары тапалып, урамдар сүп-сар менән тулған (Р.Байымов). Ләкин ошо йәштәге татар-башҡорт ***ҡатындарына ҡарағанда*** үҙен ирҙәр алдында былай иркен тота торған һәм үҙе ғәйәт һөйкөмлө булған был ханымдың һылыулығы ҡаршында Туҡай баш эймәй булдыра алманы (С.Ҡудаш).

**Ҡарата** бәйләүесе берәй предметҡа, кешегә мөнәсәбәтте белдерә: Шулай ҙа ***Ғиззәткә ҡарата*** уның күңелендә төйөр һаҡланып ҡалған (Н.Мусин). ***Уға (Вафираға) ҡарата*** Мансурҙың тойғоһо әлегә асыҡ түгел, ләкин шуныһы хаҡ: ғүмеренең сағыу бер парсаһы ине ул (Ә.Хәкимов). Бер үк ваҡытта донъялағы бөтә ***ҡатын-ҡыҙ затына ҡарата*** унда (Казарянда) ерәнеү ҡатыш әсе нәфрәт уянды (М.Кәрим). Айбулат уң ҡулын ***уға (Ҡәүи әфәндегә) ҡарата*** һелтәп һөйләй (Һ.Дәүләтшина).

**Табан, таба, ҡарай** бәйләүестәре йүнәлеш мөнәсәбәтен белдерә, мәҫәлән: Таштимер әкрен генә боролдо ла ***машинаһына табан*** атланы (Д.Бүләков). Алдар мылтығын ҡул осона тотоп, текә тау аҫтынан ***таш ҡыуышына табан*** ыңғайланы (Н.Мусин. Шахтерҙар, бер-бер артлы эйәртенешеп, аҡһыл боҫ борҡоп ятҡан ***шахтаға табан*** ағылды (Я.Хамматов). Боҫтау тышлы, бейек яғалы төлкө толобона төрөнгән Ғариф, йортона ла инмәй, тәгәрмәс яһау ***мастерскойына табан*** китте (Ғ.Хәйри). Шунда ғына иғтибарланы Һабрау: урман ауыҙынан ***уларға табан*** уҡтар выжылдап оса, биттәрен ҡара сепрәк менән ҡаплаған һыбайлылар өс юлсыны уратырға ынтыла (Ә.Хәкимов).

Улар ваҡыт мөнәсәбәтен дә белдерәләр. Был мәғәнә башҡорт телендә шулай уҡ ***торо, тартым, оторо*** бәйләүестәре аша ла белдерелә: Һәр йыйылыш, бик һирәктәренән башҡа, ***аҙаҡҡа табан*** шулай күңелләнеп тамамланыусан (Д.Бүләков). Көндәр ныҡлап йылынып, ***төшкә табан*** ҡояш арыу уҡ ҡыҙҙыра башлағайны (Н. Мусин). Китеүенә өс ай тулған көндө, ***төшкә табан***, батшалар кейеме кейенеп, бөтөнләй ят кеше ҡиәфәтенә кереп, Алтынҡойроҡ-Көмөшьялға атланып, батшаның ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай (Әкиәттән). ***Кискә табан***, ауыл осондағы шау-шыуҙы ишетеп,

Сәмиғулла һымаҡ мыйыҡ ебәргән ирҙәр ҙә килә башланы (Ж. Кейекбаев). ***Төшкә торо*** юлдан ситтәрәк ике тирмә күренгәс, атының теҙгенен шунда табан тартты («Ағиҙел» журналы). ***Кискә тартым*** әле утау өҫтөнән, әле ауылдан берәм-һәрәм йәйләүҙән килгән ирҙәрҙең һәр береһен Аллаяр: – Һүҙемде йыҡмауығыҙға рәхмәт инде, ағай-эне... - тип бошонҡо төҫтә һөйләнә-һөйләнә ҡаршылаНЫ (Ф.Иҫәнғолов).

**Ҡаршы** бәйләүесе мәғәнә яғынан дөйөм ҡаршылыҡ, ваҡыт, урын мәғәнә мөнәсәбәттәрен белдерә:

1. Урын мөнәсәбәтен, йәғни кемдеңдер, нимәнеңдер ҡаршыһында икәнлекте күрһәтә: Йылға үҙәненең аръяғында, ***беҙгә ҡаршы*** торған ҡашлаҡта, тау битләүҙәрендә һыйыр көтөүҙәре йөрөйҙәр (Ғ.Ғүмәр). ***Уларға ҡаршы*** торған эшселәрҙең сафтары сайҡалды, ҡыҙыл флагтар юғарыраҡ күтәрелеп елберҙәне (Ғ.Ғүмәр).

2. Ваҡыт мөнәсәбәтен: ***Төнгә ҡаршы*** район үҙәгендәге штабҡа алып барып ябалар (Б.Ноғоманов). Шулай итеп, ***төнгә ҡаршы*** һаҡта ятҡан саҡта Алпамышаның иптәштәре ығы-зығы тауыш ишетәләр («Алпамыша» әкиәте). Баяғы Аҡкейек тауына менәләр, был ***төнгә ҡаршы*** була («Башҡорт халыҡ ижады»).

3. Эш-хәрәкәттең кемгә, нәмәгә ҡаршы йүнәлтелгәнен күрһәтә: Ҡуҙыйкүрпәс ***йылға ағымына ҡаршы*** йөҙөргә тейеш була («Башҡорт халыҡ ижады»). Яҙмыштың әсе ***елдәренә ҡаршы*** шулай, көсәнмәйенсә, атлайһы ине (Б.Ноғоманов). Был батыр Бөрйәндән башланып киткән бер ырыуы менән урыҫтарҙың ***ҡыҙ батшаһына ҡаршы*** баш күтәргән («Башҡорт халыҡ ижады»).

4. Берәй эштең нәмәгәлер яуап рәүешендә башҡарылыуын белдерә: Ҡарабай ҡунаҡ егете Яланбайға һый-хөрмәт күрһәткәндән һуң, ***бүләккә ҡаршы*** бүләк итеп иң яҡшы ике арғымағын бирә («Башҡорт халыҡ ижады»). Хәҙисә апай ҡыҙының ***хатына ҡаршы*** яуап яҙырға булды («Ағиҙел» журналы).

5. Инеш һүҙҙәрҙә ҡулланыла: ***Бәхеткә ҡаршы,*** беҙҙең запас бауыбыҙ бар һәм Кәрәм ағайҙың ҡулдары оҫта булып сыҡты (Ғ.Ғүмәр). ***Ҡыҙғаныска ҡаршы***, Айһылыу өйҙә булмай сыҡты (С.Шәрипов). Уның был һүҙҙәре мине хозурландырманылар һәм мин, ***бәхетһеҙлеккә ҡаршы***, халыҡ араһында ҡулланылып йөрөгән һүҙҙәрҙе ҡыҙыҡ итеп әйтә башланым (Ғ.Ғүмәр). ***Әмәлгә ҡаршы***, Көнһылыуҙың Стәрлетамаҡтан ары киткәне юҡ (Ғ.Ибраһимов).

Хәҙерге башҡорт телендә **күрә** бәйләүесе күп ваҡытта төбәү килештәге исемдәр һәм ҡылымдар менән килеп, түбәндәге мөнәсәбәттәрҙе белдерә:

1. Сәбәп-эҙемтә мөнәсәбәттәрен: Бик ***арыған булғанға күрә,*** ул шунда уҡ йоҡлап китте (Әкиәттән). Колхоз урамындағылар йыш ҡына, шишмә *йыраҡ* ***булғанға күрә,*** ҡоҙоҡ һыуы эсә (Д.Бүләков). Ныязғолдоң бөтә өй эсе

көтөү-көтөү мал менән йәйләүҙә ятып, бер-ике йома элек кенә ҡышлауға ***күсеп ҡайтҡанға күрә***, ҡура-тирәләрҙе әйләндереп үҫкән эре алабуталар тапалмайынса, көҙгө ҡарлы һыуыҡҡа ҡатып ултыралар (Һ.Дәүләтшина). Тик унының, сәйәхәттең маҡсатын яҡшы ***төшөнгәнгә күрә***, ундай ҡағыҙ биреүҙән баш тартты (Р.Байымов). Ғариф ҡарт, кешене бары тик булдыҡлылығына ҡарап ***баһалағанға күрә***, Мәликәне үҙ ҡыҙы урынына ярата ине (Д.Исламов).

2. Ярашлылыҡ, тиңлек. Был мәғәнәһендә ул йышыраҡ мәҡәлдәҙә һәм әйтемдәрҙә осрай: *Атына күрә – санаһы, маҡсатына күрә – сараһы* (Әйтем). *Хеҙмәтенә күрә – хөрмәте. Заманына күрә – туйы, далаһына күрә – ҡуйы* (Әйтем). *Исеменә күрә – есеме* (Әйтем). *Заманына күрә* фырт кейенеп алыр, ҡара ҡаштары сөйөлөп торор, күҙҙәр уйнап торор, һырма мыйығы һыҙылып торор, ҡарашы менән әҙәм ҡурҡытыр ине (Н.Мусин).

3. Ғәҙәти булмағанлыҡты: ***Үҙенә күрә*** түгел икән дә Оҙонкүлдең ҡарасман малайы (С.Шәрипов).

**Була** бәйләүесе, төбәү килештәге исемдәр менән ҡулланылып, сәбәп, маҡсат мөнәсәбәттәрен белдерә, мәҫәлән: атына була (алып ҡайтты), уңғанлығына була (яратты).

**Була** бәйләүесе *өсөн* сәбәп бәйләүесенә синоним булып тора, шуға күрә *аты өсөн, уңғанлығы өсөн* тип тә әйтергә мөмкин. *Ағасҡа була (китте), утынға була (әҙерләнә)* тигәндә *ағасҡа тип китте, утынға тип әҙерләнә* рәүешендә лә әйтеп була. Миҫалдар: 1) *Гармунына була* Ғимаҙиҙы Фатимаһы менән бер туйға саҡырғайнылар (Д.Исламов) — сәбәп мәғәнәһендә; 2) Ике-өс ҡыҙ ишекте *асмаҫҡа була,* келәгә килеп йәбеште (Ж.Кейекбаев) — маҡсат мәғәнәһендә.

**Бәйле** бәйләүесе нимәнеңдер, кемдеңдер нимә менәндер бәйле мөнәсәбәттә булыуын белдерә (бойондороҡлоҡ мөнәсәбәте): Сөнки, берҙән, ***Ғатаға бәйле*** хәлдәрҙе һөйләгәндә ҡаланы ситләп уҙыу мөмкин түгел, ә Одессаның матурлығы, халҡының ҡылыҡ-фиғеле, гөрөф-ғәҙәте – әҙәбиәттә иң ныҡ яҡтыртылған темаларҙан (Ә.Хәкимов).

### *Сығанаҡ килештәге исемдәр менән ҡулланылыусы бәйләүестәр*

Сығанаҡ килеш менән ҡулланылыусы бәйләүестәр башҡорт телендә күп түгел. Был төркөмгә түбәндәге бәйләүестәр ҡарай: *башҡа, бүтән, тыш, бирле, һуң, аҙаҡ, элгәре, элек, борон, әүәл, алда, алып, башлап, ҡала, кире, ары, түбән, ала.*

**Башҡа, бүтән, тыш** бәйләүестәре. Был бәйләүестәр үҙ-ара синонимик мөнәсәбәттә тора: 1) сығанаҡ килештәге исем, исем ҡылым һәм алмаштар менән килеп, улар бер предметты, хәлде, ваҡиғаны башҡаларынан айырыу мәғәнәһен белдерә: Әфтәх нимәнелер тыңлаған шикелле тын ғына ултырһа

ла, мөрйәләге елдәр ***йырынан башҡа*** бер нәмә лә ишетә алманы (Ғ.Хәйри). Зәки бүлмәһендә лә ябай таҡтанан яһалған өҫтәл, ике ***ултырғыстан башҡа*** бер ни юҡ (Р.Байымов). Ятҡан урынынан ара-тирә өрөп ҡалған ***эттәрҙән бүтән*** ауылдың тынлығын боҙоусы булманы (Б. Ишемғол). 2) улар шулай уҡ эш-хәлдең кемдеңдер, нимәнеңдер ҡатнашлығынан башҡа булғанын белдерә, мәҫәлән: Сөнәғәт хәҙер Фатиманы кеше ***ярҙамынан башҡа*** осратырға юл эҙләй (Ж.Кейекбаев).

*Башҡа* бәйләүесенә шулай уҡ ғәрәп теленән алынған *ғәйре* һүҙе лә синоним булып тора: Яҡын-тирәлә ***ерек менән муйылдан ғәйре*** бер ағас та юҡ (Ә.Вахитов).

**Бирле** бәйләүесе эш-хәрәкәттең, хәл-ваҡиғаның башланыу моментын белдерә: ***Шунан бирле*** *ошо* бейек тауҙы Ҡурыуҙы тауы тип атайҙар («Башҡорт халыҡ ижады»). Миңә рәхәт булып китте, ***иртәнән бирле*** туҡмалыуҙан ауыртҡан тәнемә йылы йүгергәндәй булды (Ғ.Ғүмәр). Үҙенә бүленгән махсус вагонда ауыр уйҙарға сумып, ***иртәнән бирле*** ишекле-түрле кәйефһеҙ йөрөгән хәрби комиссар Зәки Вәлидов ирекһеҙҙән тәҙрәгә ҡарап алды (Р.Байымов).

Башҡорт телендә **һуң, аҙаҡ** бәйләүестәре түбәндәге мөнәсәбәттәрҙе белдерә:

1. Эш-хәрәкәттең ниндәйҙер ваҡыттан һуң башҡарылыуын: Көслө май ***ямғырынан һуң*** һауа шул тиклем сафланып киткәйне, хатта һулап туйғыһыҙ (Д.Бүләков). Байтаҡ ***йылдарҙан һуң*** күренекле әҙип Фәрит Иҫәнғолов менән яҡын кешеләр булып, аралашып йәшәрбеҙ, тип ул саҡта кем уйлаған (Б.Ноғоманов). Контора алдында үткәрелгән ***йыйылыштан аҙаҡ*** управляющий ҡурҡты (Я.Хамматов). Йыйылышта йөҙөнә бәреп әйткән ***һүҙҙәрҙән аҙаҡ*** бик ныҡ ҡырылған кәйефе нисек итеп йәһәт кенә көйләнеп, яңырып китһен инде (Н.Мусин).

2. Бер эш-хәрәкәттең икенсеһенән һуң башланыуын күрһәтә: Ғәзим бер нисә йылдар төрлө ерҙәр ҡыҙырып ***йөрөгәндән һуң***, Златоустан алыҫ түгел бер ауылда урынлашып ҡала ла ғүмерен шунда үткәрә (Һ.Дәүләтшина). Аҡһаҡ ҡоланың итен шешкә теҙеп ***ашағандан һуң,*** ҡалған йылҡыларҙы ҡыуып алып ҡайтҡандар, ти (“Аҡһаҡ ҡола” эпосы). Ире *яуға* ***киткәндән аҙаҡ***, Көнбикә малайҙары менән, иҙәненә, стеналарына кейеҙ ябып йылытып, йәйге аласыҡ итеп эшләнгән өйҙә тора (Н.Мусин).

**Алып, башлап** бәйләүестәре түбәндәге мәғәнә мөнәсәбәттәрен беледерә:

1. Ваҡыт: Ошо *көндән алып* Емеш ике аҙна ҡыҙыулыҡ менән ятты (З.Биишева). Ошо ***көндән башлап***, ҡайҙа ғына бармаһын, улын һағынып өйөнә ашҡынды (Г.Ғиззәтуллина). Заятүләк, һин *бөгөндән алып* үҙеңә баш («Заятүләк менән Һыуһылыу» әкиәте).

2. Урын: Ысынлап та, уларҙың тирмәләре тупланған ***төбәктән алып,*** ошо шишмәгә тиклем һуҙылған берләм юлдың буйынан-буйына ҡыраз ҡая хасил булған (Д.Бүләков).

**Элек, элегерәк, борон, әүәл** бәйләүестәре бер-береһе менән синонимик мөнәсәбәттә тора һәм ваҡыт төшөнсәһенә эйә: – Бер аҙна ***әүәл*** инде Кендек тураһында ҡара ҡағыҙ килде (М.Кәрим). Ҡасандыр, әллә йөҙ йыл ***әүәл*** ошо урам шәрәмәтенән, тройка елдереп, губернатор уҙып киткән, имеш, тиҙәр (М. Кәрим). Таң *яктыртмаç* ***борон*** барып килергә кәрәк (Д.Юлтый). Иртәгәһенә, төш *етмәç* ***борон*** уҡ, тәғәйенләнгән ергә өс йөҙҙән ашыу яугир йыйылғайны инде (Н.Мусин). – Тыныңды ла сығараһы булма, яп-яҡын *килеп етмәç* ***борон,*** - ти Самат миңә (Ә.Чаныш).

Башҡорт телендә **элгәре** һүҙе лә бәйләүес функцияһында ҡулланыла һәм сығанаҡ килеш менән ҡулланыла: Ошоға ҡапыл бер юлы уянышып киткән сар-сыбар ҡоштар, *үпкә белдереүҙән элгәре* иламһырап-зарланып шикелле, геү килеп сырҡылдашып алдылар ҙа, ышыҡ урын таба һалып, һағайып тынып ҡалдылар (Д.Бүләков).

**Ала, ары, кире** бәйләүестәре лә сығанаҡ килеш менән ҡулланыла. *Кире, ары* бәйләүестәре ваҡыт мөнәсәбәтен белдерә: *бынан кире*, *төштән кире, бынан ары, күргәндән ары, бөгөндән ары*.

*Ала* бәйләүесе “тиклем” мәғәнәһенә тура килә: *баштан ала* ябыныу; *билдән ала* батыу.

*Ҡала* бәйләүесе объект мөнәсәбәтен белдерә: сәсеү майҙаны буйынса арыш *бойҙайҙан ҡала* икенсе урында тора, *һинән ҡала* мин.

## ТЕКСТАР

*1-се текст*

Текстан киҫәксәләрҙе табып, уларҙың мәғәнә биҙәктәрен асыҡлағыҙ.

Бигерәк тә йәмле шул был тирә! Ҡарайһың - күреп танһығың ҡанмай. Тыңлайһың - тыңлап туя алмайһың. Ниҙәр генә юҡ был яҡтарҙа! Йәшел шәлгә бөркәнгән ағас ботаҡтарына ҡунған ҡоштар сутылдаша. Ниңәлер зарығып кәкүк саҡыра. Саҡ ҡына ят тауыш сыҡтымы, ҡоштар шунда уҡ пыр туҙы шы п урындарын алмаштыралар ҙа, һәр ҡайһыһы үҙ йырын дауам итә. Ҡара башлы тумыртҡа ҡыйҡылдап ағастан-ағасҡа осто, ботаҡтан-ботаҡҡа һикерҙе, үҙенә кәрәкле аҙыҡ таба алмағас, осоп барып, ялан уртаһында торған ҡыу ҡарағайға аҫылынды. Тырнағы аҫтындағы ҡайыр киҫәктәре ергә ҡойолдо. Тумыртҡа башын бороп ергә ҡараны. Ҡурҡырлыҡ нәмә һиҙелмәгәс, ҡыйҡ-ҡыйҡ тип, оҙон суҡышы менән ағас ботағына ары-бире туҡылдатты ла ҡыйғылдап һайыҫҡандар көтөүе янына осто.

Ер өҫтө лә байрамса биҙәлгән. Ҡуйы йәшел япраҡлы ағас ботаҡтары араһынан саҡ беленер-беленмәҫ үткән яҡтыға үлән өҫтөндәге ысыҡ тамсылары ялтырай. Сәскәләр еҫе аңҡый. Иңкеш, бал ҡорттары һәм тағы ла әллә нисәмә төрлә бөжәктәр геүләшә. Улар, аҙыҡ, эҙләп сәскәнән-сәскәгә күсәләр. Үтәнән-үтә күренгән күм-күк һауа тағы ла юғарыраҡ күтәрелгәндәй тойола *(Я.Хамматов).*

*2-се текст*

Тексты тасуири уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ. Йәйәләрҙе асып, күсереп яҙығыҙ. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен табып, уларҙың һөйләмдәге ролен асыҡлағыҙ.

Дала, дала... Иге-сиге юҡ һымаҡ. Бары тик зәңгәрһыу ҡылған бәүелә (лә), тотош йондоҙ менән ҡапланған күк йөҙо сайҡала. Геродот һүрәтләгән замандарҙан бирле бер ниндәй үҙгәреш (тә) кисермәгән, тиерһең. Тегендә (лә), бында (ла) йылҡы ойөрҙәре. Аттар бил бауырынан кисеп һутлы ҡылған ашай. Йылға буйҙарын (да) үҫкән әрем, еләк, шалфый, тимьян, ҡарағай, сейә сәскәләренән шифалы еҫ аңҡый. Һарыҡтар (ҙа) үлән көйшәй, шунда уҡ яңы тыуған бәрәстәр йомарланып ята. Арыраҡ ярымшар тирмәләр теҙелешеп киткән. Йәш-елкенсәк ҡыйҡыулап ат (та) сабыша. Улар әллә ҡайҙарға, күк көмбәҙе менән ҡылғанлы дала тотошҡан ергә, кем уҙарҙан еләләр, осло бүректәре генә күренеп ҡала.

... Бында ваҡыт (та), сәғәт (тә) юҡ—бары төҫтәр генә алмашына: сал ҡылған йә ҡара күк, йә зәңгәрһыу, йә алһыу төҫкә мансыла; йә булмаһа моңһоу шәфәҡ төҫөнә инеп, аҡрын ғына бәүелә. Ҡырағай ҡорттар

безелдәшеп оса (ла), сәскәләргә ҡунғас, иҫерткес хуш һаҙ анҡый; яңы бешкән һаумал ҡымыҙ еҫе таратып, талғын ғына ел иҫә... *(М.Бураҡаева).*

*3-сө текст*

Нөктәләр урынына тейешле киҫәксәләр ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Уларҙың мәғәнә биҙәктәрен асыҡлағыҙ, төркөмсәләрен билдәләгеҙ.

Бөгөн байрам. Ҡорбан байрамы. Күпме замандар мин аҡрын яҡынлашып килгән ошо иртәнең сихыры аҫтында йәшәнем. Уның шаңдығы, алыҫ офоҡ ситендәге аҡ болоттарҙа сағылын уйнаған таң нурҙары һымаҡ, әллә ҡасан ... минең иләҫ күңелемә килеп һарылды.

Ҡояш әле сығып ... етмәгән, донъя инде ...-яҡты. ... бына шулай килә ҡорбан байрамы. Үҙе әле ары — шауҡымы ... бире.

Уҙған төндө мине оҙаҡ йоҡо алманы. Башымдан төрлө-төрлө уйҙар уҙҙы. Байрам килгәс ... ерҙә бөтә нәмә кинәт үҙгәрер төҫлө тойолдо миңә. Оло инәйем һөйләгән әкиәттәге һымаҡ, ут менән һыу бергә ҡушылыр, бүреләр менән һарыҡтар аралашып, бер көтөүҙә йөрөр, яуыздар — изгегә, дошмандар дуҫҡа әйләнер. Быға мин ҡыуанам ... бер аҙ шикләнәм ... . Һарыҡтар өсөн борсолам.

Аңғармаҫтан ... уларҙы мәкерле бүреләр быуып ташламағайы. Ут өсөн ... хәүефләнәм. Абайламаҫтан һыу үҙен һүндереп ҡуймағайы. Дуҫтар өсөн ... күңелем урынында ... түгел. Дошмандар, хәйлә ҡороп, үҙҙәрен харап итмәгәйе, тим... *(М.Кәрим).*

*4-се текст*

Текстағы киҫәксәләрҙе табып, уларҙың мәғәнә биҙәктәрен асыҡлағыҙ.

Өй эсе ҡараңғы. Кескәй генә тәҙрәләр. Уның да яртыһы ҡарындыҡ менән ҡапланған. Әлегә быялаһы төшмәгән тар күҙәнәктәр аша ҡурғаш таҫма булып һыҙылған ай нурҙары, әлбиттә өй эсен яҡтырта алмайҙар. Хәйер, бында яҡтылыҡ кәрәкмәй ҙә. Ғаилә йоҡлай: урындыҡтың түрьяғында, иң төптә, ҡаластай ишелеп, бер малай ята. Ул — Иштуған, Уға ун ике генә йәш әле. Ләкин ул инде ғаиләнең өмөтө, ышанысы. Үҫер, атаһына иш булыр, ярҙамсы булыр, уның атаһы Байгилде ағай шулай уйлай. Шуға үрә уға исемде лә Иштуған тип ҡушҡан бит ул. Өс ҡыҙ араһында бер генә малай — бер генә иш. Тик ҡасан ғына үҫеп, ҡул араһына инер һуң ул?! Иштуғандан бирерәк, иҫке бер ҡорама юрған аҫтында, өс ҡыҙ йоҡлай. Улар: Бибеш, Йәнеш, Емеш. Ҡыҙҙар ҙа үҫеп киләләр. Бибеш — ғаиләлә иң өлкән бала. Уға ун дүрт йәш. Ул инде хәҙер өйҙә бөтә эште тиерлек, эшләй ала. Ә бына Йәнеш менән Емеш кескәйерәктәр әле. Береһенә ете, икенсеһенә

дүрт йәш тула. Эйе, кескәйҙәр әле улар. Ниндәй яҙмыш көтә уларҙы киләсәктә?.. Нимәләр күрергә, ниҙәр кисерергә тура киләсәк?.. Улар әле был хаҡта уйлай белмәйҙәр.Өйҙәң томроҡлоғон да, тарлығын да, юрғандың өс кеше өсөн бәләкәсбулыуын да тоймай, бесәй балалары шикелле татлы мышылдап, йоҡлай бирәләр. Ә бына Байгилде ағай менән Сәғүрә еңгәгә бик етди уйланырға тура килә. Шуға күрәлер, ахыры, төн уртаһы еткән булһа ла, улар һаман йоҡламағандар. Сәғүрә еңгә ҡыҙҙарынан мөмкин тиклем алыҫыраҡ булырға тырышып, түрбаш яҡҡа, иң мөйөшкә һырындырып һалынған ике кешелек урында, май шәм кеүек һыҙып, өнһөҙ тынып ята. Ә Байгилде ағай, сыбалып-ойошоп бөткән көрәк һаҡалын семеткеләп, урындыҡ ситендә баянан бирле һүҙһеҙ ултыра. Күгелйем ай нурҙары уны берсә ҡарҙан яһаған, берсә ҡурғаштан ҡойолған һынға оҡшаталар *(З.Биишева).*

*5-се текст*

Өҙөктәге ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе табып, уларҙың һөйләмдәге вазифаһын билдәләгеҙ. Теркәүес, бәйләүес, киҫәксәләрҙең функциональ үҙенсәлектәрен асыҡлағыҙ.

Бибекәй менән Гөлкәйҙең ҡарттаһы, бәләкәс, арыҡ, еңел кәүҙәле, йылғыр оҫта ҡуллы, йор һүҙле Шәһит ҡартты бында «Сыпсыҡ Шәһит» тип йөрөтәләр. Был ҡушамат хатта уның бөтә ырыуына ла таралған. Шәһит ырыуынан булған бөтә кешеләрҙе лә «сыпсыҡтар» тиҙәр. Был ҡушамат Шәһит бабай нәҫеленең кескәй, еңел кәүҙәле, етеҙ, эшсән ҡуллы булыуы өсөн һөйөп ҡушылғанлыҡтан, уға берәүҙең дә хәтере ҡалмай. Бына ошо Сыпсыҡ Шәһит бабай үҙенә инде һикһән алты йәш булыуына ҡарамаҫтан, таң иртәнән ҡара кискә тиклем бер генә лә тик тормай. Ул балта оҫтаһы.

Үҙҙәренең ишек алдының бер мөйөшөнә эшләп алған станогында көндөң көнө буйына сабып-юнып, нәмәләрҙер эшләп кенә тора. Уның янында һәр ваҡыт яңы ғына эшләнгән иләк, иләк, көрәк, тәртә, тәпәндәр аунап ята. Шәһит ҡарттың улы, Гөлкәйҙәрҙең атаһы Шаһиморат ағай, уға урмандан кәрәкле ағастарҙы алып ҡайтып биреп тора. Ә баҙар еткәс, аҙна буйына эшләнгән был көрәк-мөрәк, ҡамыт-комоттарҙы үҙенең тар оҙон күкрәкле урман арбаһына тейәй ҙә, баҙарға алып барып һатып, аҙналыҡ он, сәй-шәкәр һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алып ҡайта. Ә Шәһит ҡарттың унда эше юҡ. Ул хатта улынан:

— Күпмегә һаттың, нәмә алдың? — тип тә һорамай. Эштең үҙе — юнып-йышып, донъя кәрәген яһап тороу ғына ҡыҙыҡһындыра уны. Ә кескәй Емеш, һәр ваҡыт уларға барып, Шәһит ҡарттың әкрен генә йырлай-мөңрәй эш эшләгәнен ҡыҙыҡһынып ҡарап ултыра. Шәһит бабай ҙа Емеште йәшенән алда үҫкәне, күпте белгәне өсөн ярата. Әсәһе ауырыуы, тормоштары

ауыр булғаны өсөн йәлләй, һәр килгәндә көләмәсләп, шаяртып унын күңелен асырға тырыша.

— Әй ҡыҙым-ҡыҙым, һинең күлдәгең ситсанан ғына бит. Ана Ҡормош байҙың яп-ямаҡ ҡыҙы Ғилмекәй гел сатиндан дә ебәктән генә кейә. Ниңә улай икән ул, ә? Бына һиңә кәрәк ине ул матур күлдәктәр, ҡыҙым? — тип ирештерә ул. Ә Емеш сер бирергә теләмәй: — Минең күлдәгем ситса түгел, ебәк кенә ул, — тип еңешә *(З.Биишева).*

*6-сы текст*

Тексты уҡып, бәйләүестәрҙе барлағыҙ. Уларҙың нindәй төр бәйләүестәргә ҡарағанын билдәләгеҙ.

Ошо көндән һуң әллә, ысынлап та, йылы тире эсендә ятып тирләү килешеп, һауығыу яғына сыҡты. Урынынан тороп, үҙенең дә, әсәһенең дә күҙенә, ауыҙына ябырылып йонсотҡан себен өйөрөн ҡыуып ултыра башланы. Тик тышҡа, уйнарға сығарға ғына унын хәле юҡ ине әле. Сәғүрә еңгәнең хәлен белергә, ғаиләнең ҡайғыһын уртаҡлашырға күрше-күлән, әбей-һәбей һаман килгеләп торҙо. Уларҙың ҡайһы берҙәре, йәшерәктәре, ҡыҙҙарҙың сәстәрен тарап, өҫ-баштарын йыуып, икмәк бешереп китте, олораҡтары илдәге, ауылдағы хәбәрҙәрҙе һөйләне. Был хәбәрҙәрҙең күбеһе хәҙер гел шулай ҡоролоҡ, йотлоҡ килеү тураһында ине. Улар, ауыр кәрһөнә-көрһөнә, шомло тауыш менән, яҙҙан бирле ергә бер тамсы ямғыр яумауы, күктә бер генә болот та күренмәүе, йәш балаларҙың эс китеүе менән ҡырылыуы, ашлыҡ, үлән кибеп-короп бөтәүе тураһында һөйләйҙәр. Ҡасандыр булған ошондай ҡоролоҡта кешеләрҙең эт, бесәй, хатта кеше ашауҙары, ауылы-ауылы менән ҡырылыуы хаҡында береһенән-береһе ҡот осорғосораҡ хәлдәрҙе хәтерләйҙәр. Бер саҡ Сыуаҡай әбей көн буйы тип әйтерлек гел ошондай ҡурҡыныс хәлдәр тураһында ғына һөйләп ултырҙы *(З.Биишева).*

*7-се текст*

Текстағы теркәүестәрҙе табып, һөйләмдәге функцияларын асыҡлағыҙ.

Ҡыуаҡ төбөндә осрашҡан кешенән ҡотолғас, Аҡһаҡ Бүре балалары менән боҫоп ятҡан кәбәнде эҙләп китте. Аяғы ни тиклем һыҙламаһын, ике көсөгөн табырға тейеш ине шул.

Урмандан сығыу менән, моронона әскелтем төтөн, ҡан еҫе килеп бәрелде. Әллә нисә ерҙә кәбән ҡалдыҡтары быҫҡып яна, кайҙа ҡарама, һарыҡ үләкһәләре ҡанға туҙып ята. Йә ҡолас ташлап күккә ҡараған, йә башын үлән ҡурпыһына тыҡҡан кеше кәүҙәләренән туғай сып-сыбар.

Бүре, кәбән урынына барып, бер тегеләй, бер былай әйләнде лә, ҡапыл туктап, ниндәйҙер йомғаҡты мороно менән һаҡ ҡына ҡуҙғалып ҡуйҙы. Яртылаш янып, ҡойка есе аңкытып ятҡан йомғаҡ — Бүренең ғәзиз балаһы ине. Әсә ирекһеҙҙән ҡырға тайшанды, артҡы аяҡтарына ултырып, ҡайғыһын эсенә һыйҙыра алмай, олорға кереште.

Байтаҡ ултырҙы ул. Яҡында ғына әрнеп-әрнеп һыҡташҡан, низер һөйләшкән ҡатын-ҡыҙ төркөмөнә лә иғтибар итмәне, амғыпыд, утҡа бешкән ҡабырғаһының һыҙлауын да онотто.

Әгәр ҙә януар әҙәм телен белһә, сәсе-башы туҙған бер ҡатындың ике-өс йәшлек кенә бәпесен ҡосаҡлап, илай-илай һөйләгән һүҙҙәрен аңлар ине. Ә бахыр әсә, балаҡайының үле кәүҙәһен бәүетә-бәүетә: «Эй күҙ нурым, әй бәләкәс шөңгөрөм! — тип һамаҡлай. — Ас йондоҙ кеүек яҡты күҙкәйҙәренде, өндәш әсәйеңә... Ни гонаһтарым өсөн мине язаланылар?.. Ни хәлдәр итеп йәшәйем бынан аҙаҡ?»

Әгәр ҙә Бүренең үҙ ҡайғыһы көслө булмаһа, моғайын, иғтибарлар ине: икенсе бер олораҡ ҡатын, әсәнең ҡулынан тубырсыҡтай ғына мәйетте алып, яулыҡҡа урап тотто. Тағы ике бисә йәш әсәне, ике яғынан ҡосаҡлап, аяҡ үрә баҫтырҙы ла төркөм ауылға табан йүнәлде. Урталағы ҡатындың бер аяғы ҡан һарҡып торған сепрәккә ураулы. Ул еңелсә аҡһаҡлап, түгелеп илай-илай, саҡ атлап бара. Әхирәттәреме, осраҡлы таныштарымы, уға ниндәйҙер йыуатыу һүҙҙәре өндәшә ине...

Ләкин Бүре быларҙың береһен дә аңламаны, иғтибарламаны, һыҙып-һыҙып байтаҡ олоғас, балаһын һаҡ ҡына тешләп, ҙур соҡор төбөнә күсерҙе, өҫтөнә дымлы балсыҡ өйөп, сүп-сар менән ҡапланы ла, артына боролоп ҡарай-ҡарай, урман эсенә инеп китте. Икенсе көсөгөн тапманы. Ниндәйҙер үлән орлоҡтары, әскелтем еләктәр ашай торғас, Бүре әкренләп һауыға, яраһы ла бөтәшә башланы. Тик ул ғүмерлеккә аҡһаҡ булып ҡалды. Элекке һымаҡ ҡомарланып, ярһып төнгө һунарға сығыуҙар бөттө. Хәйер, утлы ташҡын ҡояш сығышына табан үтеп киткәне бирле, аҙыҡҡа ҡытлығы юҡ ине Бүренең. Ҡайҙа барып төртөлмә, йә боҙолоп өлгөрмәгән ат үләкһәһе осрай, йә хатта яраланып тора алмай ятҡан малға тап була.

Юҡ, тамаҡ хәстәре түгел инде унда. Һыуынып бөткән элекке өңөнә ҡайтып ятыу менән, күңелен әллә ниндәй борсоу биләп ала. Тороп, тирә - яҡты еҫкәп йөрөй-йөрөй ҙә тағы аҡһаҡлап сығып китә. Донъяның йәме бөткәйне, мәғәнәһе ҡалмағайны уға. Шуға көндөҙҙәрен берәй төпкөлдә боҫоп ята ла, күҙ бәйләнеү менән, маҡсатһыҙ-ниһеҙ ҡыҙырырға тотона... *(Ә.Хәкимов).*

*8-се текст*

Текста ҡулланылған теркәүес, бәйләүес, киҫәксәләрҙе табығыҙ, уларҙың һөйләмдә ниндәй вазифа үтәүҙәрен билдәләгеҙ.

...Әүәле замандарҙа бер хандарҙың ханы, яҡын-тирәләге бөтә халыҡтарҙы буйһондороп, ҡол итеп бөткәс, артабан үҙенең ҡөҙрәтен кемгә күрһәтергә белмәйенсә, йыйын йыйған да былай тип яр һалған: «Минең барлыҡ биләмәләремдәге башҡа төрлө ағастар ҡырҡылып бөтөп, тик һәр саҡ йәшел ҡарағайҙар менән шыршылар ғына ҡалырға тейеш. Мин йыл әйләнәһенә йәшел урман эсендә йәшәргә теләйем!» Хан ҡул аҫтындағы бөтә кешеләрҙе ҡушып, ҡарағай менән шыршынан башҡа ағастарҙы киҫтереп бөткән, ти. Иң ҙур ҡарағай урманының уртаһына алтын-көмөштән ғәжәйеп шәп һарай һалдырып йәшәй башлаған хан. Тәүге мәлдә уйым-уйым ултырған ҡарағай, шыршы урмандары, ысынлап та, харап матур тойолған. Ләкин йылдар үтеү менән, кешеләр тормошона бер-бер артлы ҡытлыҡ килә: йәйә бөгөргә — артыш менән саған, уҡ юнырға — ҡайын, суҡмар, һөңгө һабы эшләргә — имән, ашарҙарына муйыл, балан, сәтләүек таба алмай яфа сигәләр икән. Бер-бер артлы йылғалар ҡорой, эсер һыу етмәй, һауа бысраныуҙан кешеләрҙең тыны тарыға икән. Өҫтәүенә, һауала ылыҫ еҫе үтә күбәйеп киткәнлектән, яман еҫ ауырыуы таралып, тәүҙә мал-тыуар ҡырыла, шунан төбәге-төбәге менән кешеләр үлә башлай. Ул да булмай, ҡарағай, шыршы ағастары ҡорой, ылыҫтары һарғайып ҡойола. Әйтерһең, яңы ғына гөлтләп ултырған урмандарҙы утлы ел ялмап үткән. Хан үҙе лә сәсрәп ауырып китә, ти, бер заман. Тәғәм ризыҡ, йотом да һыу һеңдерә алмай икән был. Ул, аптырағас, муллаларҙың өшкөрөү-төкөрөүҙәренән һис кенә лә файҙа булмағас, ниндәй сир менән ауырығанлығын белеү өсөн, ил ағаһын — йөҙ йәшәр аҡһаҡалды саҡыртып алған. «Эй, тәңре ханым, — тигән ил ағаһы, — әгәр биләмәләреңдәге урмандарҙы тергеҙергә бойорһаң, мин һине был сиреңдән ҡотҡарыр инем».

Боғаҙына әжәл тырнағы йәбешкән хан түҙмәгән, баш нәзирен саҡыртып алып: «Барлыҡ халыҡты урман ултыртырға ҡуш», — тигән. Ил ағаһы ошонан аҙаҡ ханға үҙе йылдар буйы һаҡлап йөрөткән йүкә сәскәһен сайҡатып, балан ҡағы ҡушып, мәтрүшкә ҡатыш ҡарағат сәйе эсергән, ҡаҙаяҡ, андыҙ ҡушып бәйләнгән ҡайын миндеген парлап, шуны күкрәгенә ҡуйған да муйыл һәм балан сәскәһен еҫкәткән, һәм ханыбыҙ һин дә мин шәбәйгән дә киткән, ти. Ошонан аҙаҡ хан оло йыйын йыйған, халыҡҡа ер йәннәтенә ҡул күтәрмәҫкә әйтеп ҡалдырған икән, ти... *(Н.Мусин)*

*9-сы текст*

Ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәре буйынса айырығыҙ. Уларҙың һөйләмдәге ролен асыҡлағыҙ.

**Башҡорт йәйләүендә**

Төн ҡараңғы. Төпһөҙ күк диңгеҙендә күҙҙәрен ҡыҫып-ҡыҫып уйнашҡан һанһыҙ йондоҙҙар ҙа, әллә нимә юғалтҡан кеүек, ҡараңғы төндөң ҡара пәрҙәһе үтә эҙләнеп ҡарайҙар. Бөтөн тараф тыныслыҡ, серле бер моңлолоҡ эсендә күмелеп ҡалған. Әллә ҡайҙа яңғыҙ ябалаҡтың ғына анда-һанда бер килгән әсе, вайымһыҙ тауышынан башҡа был моңло тыныслыҡты боҙоусы һис бер нәмә юҡ.

Моңло ҡараңғылыҡ оҙаҡҡа һуҙылманы: ҡояш сығышынан һап-һары булып, ай шары бик әкрен генә күтәрелә башланы. Түйә, ул, был моңло ҡараңғылыҡтың хөкөм һөрөүенә риза булмағандай, төҫһөҙләнгән, йөҙөн һытҡан ине.

Ай, юғары күтәрелеп, йәйләүҙе яҡтыртырға тырышһа ла, ҡалын урманлыҡтан болотҡа көнләп юғары күтәрелеп торған ағастары ҡараңғылыҡҡа булышалар, уның асыуланып ебәргән яҡтылыҡ тамсыларына юл бирмәйҙәр кеүек. Ай күтәрелгән һайын яҡтыра, ағара, кесерәйә һәм етеҙләнә бара. Ул ҡараңғылыҡ менән тартыша вә уны ҡыуа ине.

Айҙың яҡтылыҡ биреүен көтөп кенә торған шикелле, әллә ҡайҙа ғына бер һандуғас үҙенең моңло, дәртле һайрауы менән урманды яңғыратты. Алтын тәңкәләрҙең сыңғырлауы шикелле булған был моңло тауышты тыңлаған Ай ҙа, үҙенең асыуын онотоп, урманға көлөп кенә ҡарай башланы. Әллә нимә эҙләгән кеүек күҙҙәрен йылпылдатып торған йондоҙҙар ҙа күҙҙәрен йомоп, уйға ҡалған шикелле булдылар. Урман да, яҡтылыҡҡа ҡаршы тартышыуын онотоп, оҙон ҡара ҡоластарын йәйә башланы. *(Ф.Сөләймәновтан).*

*10-сы текст*

Текста ҡулланылған теркәүестәрҙе төркөмсәләргә айырып яҙып алығыҙ. Уларҙың функцияларын асыҡлағыҙ.

**Мин китапты нисек уҡый инем**

Миндәге китап уҡырға булған ихласлыҡ миңә ни тиклем ауыр түбәнһетелеүҙәр, йәберләнеүҙәр, тынысһыҙланыуҙар килтергәнлеген хәтерләү — хәҙер күңелһеҙ ҙә, көлкө лә.

Күршеләге кейем киçеүсе ҡатындан алған китаптар миңә шул тиклем ҡиммәт тойолалар ине,— мин, уларҙы ҡарт хужабикәнең мейескә яғыуынан ҡурҡып, унан тағы ла китап алып ҡайтыу тураһында уйламаçҡа ла тырыша инем, ә иртә менән сәйгә икмәк алырға барған ерҙә лавканан төрлө төçтәге ваҡ китаптар алып ҡайта башланым.

Мин был китаптарҙы уҡый инем һәк укыған өсөн һәр береһенә берәр тин түләй инем.

Мин уларҙы, һыуыҡ һәм уңайһыҙ булыуына ҡарамаçтан, утын ярған ерҙә, һарайҙа йәки сарҙаҡта уҡый торғайным. Ҡайһы ваҡыттарҙа, китап бик ҡыҙыҡлы йәки тиҙерәк уҡып сығырға кәрәк булғанда, миңә төндәрҙә шәм яндырып ултырырға ла тура килә ине. Ләкин ҡарт хужабикә, төндә шәмдең ҡыçҡарғанын һиҙеп, шәмдәрҙе сыра менән үлсәй һәм үлсәүен йәшереп ҡуя башланы. Әгәр ҙә иртә менән шәм кәмегән булһа, йәки мин, унын үлсәүен табып, шәм менән тигеҙләп ҡуя алмаһам, аш бүлмәһендә әсе тауыш күтәрелә торғайны. Был хәл мине ғәрләндерә, ләкин уҡыу теләге миндә нығый ғына бара ине. Мин нисек тә уҡыу юлдарын табам ә ҡарсыҡ минең китаптарымды бер нисә тапҡыр юҡ итте, һәм мин лавкасыға **47** тингә бурыслы булып сыҡтым. Мин барған һайын, ул минән аҡса даулай башланы.

— Бурысыңды килтерҙеңме?

— Юҡ.

— Нисек була инде. Судҡа биреп, нәмәләреңде яҙҙырырға, үҙеңде колонияға ебәрергәме ни, ә?

Минең бер ерҙән дә аҡса алыр урыным юҡ. Эш хаҡымды ла олатайыма түләйҙәр ине,— ни эшләргә? Миң өс көнләп яфаландым, һәм. хужа, минең был хәлемде һиҙеп:

— Нимә һин, Пешков, бик күңелһеҙ йөрөйһөң, әллә ауырыйһыңмы?—тип һораны. Мин үҙемдең ҡайғымдың низән тороуын асыҡтан-асыҡ һөйләп бирҙем. Ул борсоулы ҡиәфәткә инде:

— Бына күрәһең, ул китап тигәнең ни нәмәгә алып бара. Нисек кенә булһа ла уларҙан хәсрәт кенә!..

Илле тин аҡса биреп, үҙе киçкен кәңәш бирҙе:

– Ҡара уны, бисәмә һәм әсәйгә әйтмә, шау-шыу булыр. Яңы йылдан газетаға яҙылам. Бына унан һуң инде уҡырһың.

Бынан һуң инде кистәрен ҡысҡырып газета уҡый башланым. Мин газета һәм иçке журналдарҙан икенсе ҡалаларҙың һәм икенсе халыҡтарҙың тормоштарын белә башланым, һәм мин инде кистәрен генә түгел, шулай уҡ төндәрен дә уҡыйым. Миңә төндәрҙә уҡырға ут бирмәйҙәр, ә шәм һатып алырға аҡса юҡ, шунан һуң мин шәм төбөнә аҡҡан майҙарҙы йыя башланым, уларҙы балыҡтан бушаған һауытҡа һалып, уға ептән филтә яһайым һәм төндәр буйы мейес башында төтөнлө һәм күңелһеҙ ут яндыра торғайным. *(М. Горький)*

*11-се текст*

Ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәре буйынса айырығыҙ. Уларҙың һөйләмдәге ролен асыҡлағыҙ.

**Ниңә мин философ булманым**

Башҡорт педагогия институтында башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәндем, һуңғы курстарҙа философия менән мауыға башланым. Платон, Аристотель, Конфуций, Вольтер, Гегель, Кант, Фейербах исемдәрен ишеткән һайын ниндәйҙер бер тылсымлы, серле донъяға тартылаһың һымаҡ. ДӨРӨҪ, бөйөк аҡыл эйәләре тыуҙырған хеҙмәттәрҙең төп нөсхәләрен күргән дә юҡ. Улар ғилеменән бүтәндәр сәйнәп, үҙҙәренсә тоҙлап-борослап биргәнде генә үҙләштерәбеҙ.

Ошо фәнгә ҡағылышлы байтаҡ нәмә уҡыным. Хатта Гегелдең революцияға тиклем русса сыҡҡан бер китабы ла ҡулға төштө. Аңларға тырыштым, аңлай алманым, әлбиттә. Шулай ҙа философ булырға хыял бар ине.

Николай Александрович Маслин, беҙҙең яратҡан уҡытыусыбыҙ, тарихи материализм буйынса минән имтихан алды. Һорауҙар менән күп яфаламаны, «бишле» ҡуйҙы. Аҙаҡтан ул миңә тағы бер һорау бирҙе:

— Кем булырға уйлайһың?

Әле генә ҡуйылған «бишле» менән ҡанатланып, уның да күңелен күтәрмәксе булып, шик-шөбһәһеҙ әйтә һалдым, әйткәнем, һис шикһеҙ, уға оҡшар, тинем:

— Философ булырға хәл иттем.

Ғәҙәтенсә башын баҫыбыраҡ ултырған Маслин миңә күтәрелеп ҡараны. Байтаҡ һүҙһеҙ торҙо. Унан ҡырт киҫте:

— Һинән философ сыҡмай.

Минең шаңҡыуым аяҡ табаныма барып етте.

— Шулай, сыҡмай, — тип ҡабатланы ул. — Әле хәҙер, һин яуап биргәндә, төшөндөм быны.

— Үҙегеҙ «бишле» ҡуйҙығыҙ... — Мин тамам юғалып ҡалдым.

— «Бишле»не дөрөҫ ҡуйҙым. Башында бар нәмәләр осон ҡуйҙым мин уны. Һинең башың буш мискә түгел, хатта тулы ул.

— Ләкин мискәлә бер генә тишек, бер генә бөкө булырға тейеш, һинең башында эреле-ваҡлы әллә нисә тишек, һин шуларҙың тығындарын бер юлы һурып алдың да, мин төп ағышты тота алмай аптыраушта ҡалдым. Ҡуш усымды һуҙып әле бында, әле тегендә ташландым. Өлөшләп йыйырға тура килде. Философтың башы тулы уҡ булмаһа ла, фекер бер генә урындан ағып сығырға тейеш, шуның өсөн аҡылы аҙыраҡ булһа ла, бәрәкәтле күренәсәк. Һин шиғырҙар яҙаһың бит. Шағир бул. Бер юлы теләһәң биш

ҡылды, теләһәң ете ҡылды сирт. Уй-хисеңде йомарт тотон, йәлләмә. Тарҡалып китһәләр, үҙҙәре йыйылыр.

— Ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтеп китте. Юҡ-юҡ та ошо өгөт иҫемә килеп төшә. Дөрөҫ әүлиәлек иткән булыр аҡыллы Маслин. Мин ғүмерем буйынса уй-фекерҙәремде бер генә епкә теҙеп һөйләй алманым, яҙғанда ла йыш ҡына бураҙнанан сығып китәм, һуҡмағымдан тайпылам.

— Ваҡыты менән көрәҙәгә лә ышаныу кәрәктер... *(М. Кәрим).*

*12-се текст*

Ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәре буйынса айырығыҙ. Уларҙың һөйләмдәге ролен асыҡлағыҙ.

Оҙон яллы ерән ат бьшҡыра-бышҡыра тар ғына тау юлынан юғарыға үрмәләй. Хәйер, юл тиһәң, хәтере ҡалыр. Өҫтән ағып төшкән ямғыр, ҡар һыуҙары уны осло таштары сосайып торған йырынға әйләндергән. Ҡырандасҡа оҡшатыбыраҡ эшләнгән бейек арба бына-бына түңкәрелеп китер кеүек. Ася түҙмәне, ямғыр баҫыла төшөү менән арбанан һикереп төштө. Бер яҡтан, үңәсе өҙөлөрҙәй булып тартҡан малҡай йәл, икенсенән, ана ауам, бына ауам тип ҡурҡып барыуы ҡыйын. Тик атлауы бигерәк уңайһыҙ, аяҡ аҫты еүеш. Тиҙ арала оҙон итәге еүешләнде. Ҡамасауламаһын өсөн уны бөрөп тотоп арбаның әле бер, әле икенсе яғынан йүгергеләне ҡатын. Сос булырға тырышты, бер-бер хәл була ҡалһа, балаларын йолҡоп алып өлгөрә, йәнәһе. Ул арала малайҙар ҙа уянды. Бығаса атты дәртләндерә-дәртләндерә етди генә барған Буранбай бөтөнләй ирәүәнләнеп китте: дилбегәне Вадимға тотторҙо. Үҙе, атҡа менгәндәй ҡыуанған малайҙы, күңелен тағы ла үҫтереп маҡтаны ла урман эсенә йомолдо. Унан ҡып-ҡыҙыл булып бешкән бөрлөгән тәлгәштәре тотоп сыҡты. *(Г.Гиззәтуллина)*

*13-сө текст*

Текста ҡулланылған бәйләүестәрҙе табығыҙ. Уларҙың ҡайһыларының синонимдары бар? Шулар менән алмаштырып уҡып ҡарағыҙ. Мәғәнә үҙгәрәме?

Һул яғымда Ҡаратау ятһа, уң яғымда үҫкән талдарҙы уртаға ярып Ташкисеү аға. Тәбиғәттең иң матур ваҡыты, тип әйтер инем, әгәр минән илле-алтмыш метр самаһы ерҙә, талдар араһында үҫкән ҡарт ҡайын башында, бер туҡтауһыҙ шыҡырлап ултырған һайыҫҡан булмаһа. Тәбиғәттең бар булған йәмен шул боҙа. Ошо көнгә тиклем һайыҫҡанды ҡошҡа ла һанамай торғайным, иғтибар менән ҡарағаным булманы, әле ятҡан килеш тегене күҙәтә башланым. Оҙон, һайғауға оҡшаған ҡойроғо,

ҡырҙан ҡарағанда ҡара төҫтә күренһә, яҡындан күк, йәшел ҡатыш һымаҡ, күҙҙәре муйыл кеүек дөм ҡара икән. Шыҡырыҡлаған һайын ҡойроғон күгәреп төшөрә лә кәүҙәһен ҡалҡытып ҡуя. Һайыҫҡандан да матур ҡош юҡтыр тигән фекергә килдем. Беҙ уны кәртә араһында осоп, себеш урлағанын ғына күрәбеҙ ҙә үҙебеҙсә фекер йөрөтәбеҙ икән. Мин һәр бер рәссам менән бәхәсләшергә әҙермен, ул һайыҫҡандың үҙенә ҡарамайынса һүрәткә төшөрә алмаясаҡ. (*Ғ.Кейекбаев*)

*14-се текст*

Текста ҡулланылған киҫәксәләрҙе төркөмсәләргә айырып яҙып алығыҙ, мәғәнә биҙәктәрен асыҡлағыҙ.

Төн. Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле, күҙҙең яуын алып, йымылдап торған аяҙ күктә, алтын табаҡтай, тулған ай йөҙә. Таллыҡта һандуғастар сутылдаша. Тирәк башында кәкүк саҡыра. Күләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы, үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандуғас моңдарына мансып, ҡыуана-көлә бер өҙлөкһөҙ сылтырап аға ла аға. Ағастар, сәскәләр, хайуандар, хатта ҡоштар ҙа йомшаҡ, еләҫ елдән һөйөлөп, көндөҙгө эҫе кәмегәнгә һөйөнөп, байрам итә. Иҫ киткес рәхәт, гүзәл яҙғы төн тышта. Ә өйҙә, Емештәрҙең өйөндә, бөтөнләй икенсе күренеш. Тәбиғәткә нимә?! Кеше яҙмышында уның ҡайғыһы бармы ни! Үҙе гүзәл, мөһабәт, шат булғас, шул еткән уға.

Өй эсе ҡараңғы. Кескәй генә тәҙрәләр. Уның да яртыһы ҡарындыҡ менән ҡапланған. Әлегә быялаһы төшмәгән тар күҙәнәктәр аша ҡурғаш таҫма булып һуҙылған ай нурҙары, әлбиттә, өй эсен яҡтырта алмайҙар. Хәйер, бында яҡтылыҡ кәрәкмәй ҙә. Ғаилә йоҡлай: урындыҡтың түрьяғында, иң төптә, ҡаластай ишелеп бер малай ята. Ул – Иштуған. Уға ун ике генә йәш әле. Ләкин ул инде ғаиләнең өмөтө, ышанысы. Үҫер, атаһына иш булыр, ярҙамсы булыр. Уның атаһы Байгилде ағай шулай уйлай. Шуға күрә уға исемде лә Иштуған тип ҡушҡан бит ул. Өс ҡыҙ араһында бер генә малай — бер генә иш!

Тик ҡасан ғына үҫеп, ҡул араһына инер һуң ул?! Иштуғандан бирерәк, иҫке бер ҡорама юрған аҫтында, өс ҡыҙ йоҡлай. Улар: Бибеш, Йәнеш, Емеш. Ҡыҙҙар ҙа үҫеп киләләр. Бибеш ғаиләлә иң өлкән бала. Уға ун дүрт йәш. Ул инде хәҙер өйҙә бөтә эште тиерлек эшләй ала. Ә бына Йәнеш менән Емеш кескә йеләктәр әле. Береһенә ете, икенсеһенә дүрт кенә йәш тула. Эйе, кескәйҙәр әле улар. Ниндәй яҙмыш көтә уларҙы киләсәктә?.. Нимәләр күрергә, ниҙәр кисерергә тура киләсәк?.. Улар әле был хаҡта уйлай белмәйҙәр. Өйҙөң томороҡлоғон да, тарлығын да, юрғандың өс кеше өсөн бәләкәс булыуын да тоймай, бесәй балалары шикелле татлы мышылдап, йоҡлай бирәләр. Ә бына Байгилде ағай менән Сәғүрә еңгәгә бик етди уйланырға

тура килә. Шуға күрәлер, ахыры, төн уртаһы еткән булһа ла, улар һаман йоҡламағандар. Сәғүрә еңгә ҡыҙҙарынан мөмкин тиклем алыҫыраҡ булырға тырышып, түрбаш яҡҡа, иң мөйөшкә һырындырып һалынған ике кешелек урында, май шәм кеүек һыҙып, өнһөҙ тынып ята. Ә Байгилде ағай, сыбалып-ойошоп бөткән көрәк һаҡалын семеткеләп, урындыҡ ситендә баянан бирле һүҙһеҙ ултыра. Күгелйем ай нурҙары уны берсә ҡарҙан яһаған, берсә ҡурғаштан ҡойолған һынға оҡшаталар *(З.Биишева).*

*15-се текст*

Ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәре буйынса айырығыҙ. Уларҙың һөйләмдәге ролен асыҡлағыҙ.

Бибекәй менән Йәнеш күгәренеп, тештәре тешкә тейеп шаҡылдағанса һыу инделәр. Емеш, ялынып:

— Ҡайтайыҡ, асыҡтым,— тип иламһырай башлағас ҡына улар күлдәктәрен кейҙеләр. Бәкәлдән генә булған һыуҙа йөрөгәнлектән, арҡаһына һыу ҙа теймәгән, туҙан ҡатыш тир ағып бысранған бите лә йыуылмаған Емеш тә таһылдай-мышылдай күлдәген кейҙе. Йәнеш унының күлдәгенең алды артҡа кейелеүен дә абайламай етәкләп ҡайтып китте. Бибекәйҙәр Ҡыҙылъяр урамы яғынан ҡайтырға булдылар. Йәнеш тә уларға эйәрҙе. Ҡыҙылъяр башына менгәс, улар күкһел йәшел булып, өйөрөлөп ағып яткан тәрән тымыҡ урында бер ҙә ҡурҡмай йөҙөп йөрөүсе ҙурҙарға һоҡланып ҡарап торҙолар. Бында, еткән ҡыҙҙар, еңгәйҙәр, тулҡын өҫтөндә ятҡан аҡҡоштар шикелле ҡалҡынып-ҡалҡынып, Оло Эйек уртаһында йөҙөп йөрөйҙәр. Бирьяҡ ярҙан арьяҡ ярға кем уҙарҙан ярышалар. Йөҙгәндә ҡыҙҙарҙың яңы ғына ҡалҡып килгән нәфис аҡ күкрәктәре күренеп-күренеп ҡала. Ошоноң өсөнмөләр бында ҡыҙҙар, килендәр араһында күкрәкте ҡалҡытып, аяҡтарҙы һыуға таҡмаҡлатып һуғып йөҙөү иң матур йөҙөү иҫәпләнә. Ҡыҙҙарҙан арыраҡ, Ҡыҙылъяр аҫтында, «төпһөҙ» упҡында малайҙар, егеттәр һыу инә. Улар өс-дүрт метрлы текә ярҙан һыуға һикереп төшәләр ҙә бик оҙаҡ һыу аҫтында юғалып торалар. Унан бөтөнләй икенсе урындан, алыҫтан, ҡалҡып сығып, ҡолас ташлап арьяҡҡа йөҙөп китәләр. Унда сыҡҡас, йомшаҡ һары ҡом өҫтөндә ятып ял итәләр. Ҡайһы берҙәре салҡан йөҙөүҙә ярышалар. Ҡыҫҡаһы, һәр ҡайһыһы үҙенсә йөҙә, ярыша, өйрәк балалары шикелле һыу эсендә уйнай. Бында ҡыҙға, малайға айырып бер-береһенә ҡул тейҙереү, ҡурҡытыу, оялтыу йәки берәй ҡырын һүҙ әйтеү кеүек әҙәпкә һыймаған бер генә нәмә лә юҡ. Һыуҙа улар бөтәһе лә бер тигеҙ, тәбиғәт балалары. Бында, оло һыу буйында, борон-борондан ошо ғәҙәт йәшәп килгән. Ул әле лә, шулай дауам итә. Яҙғы һыу ташыу ваҡытынан алып көҙгө һыу туңа башлағанға хәтле йылға өҫтө һәр көн, бигерәк тә иртән-кис шулай йөҙөү, уйнау-көлөү, һыу сәсрәтеү тауыштары менән шау-

гөр килеп тора. Кешеләр бында иң ҡыҙыу бесән-ураҡ өҫтөндә лә, һыуһынға туҡтаған арала ғына булһа ла һыуға төшөп сығырға ваҡыт табырға тырышалар *(З.Биишева).*

.

*16-сы текст*

Тексты киҫәксәләрҙе төшөрөп ҡалдырып уҡығыҙ, уларҙың функцияларын, мәғәнә биҙәктәрен асыҡлағыҙ.

Бибекәй менән Гөлкәйҙең ҡарттаһы, бәләкәс, арыҡ, еңел кәүҙәле, йылғыр оҫта ҡуллы, йор һүҙле Шәһит ҡартты бында «Сыпсыҡ Шәһит» тип йөрөтәләр. Был ҡушамат хатта уның бөтә ырыуына ла таралған. Шәһит ырыуынан булған бөтә кешеләрҙе лә «сыпсыҡтар» тиҙәр. Был ҡушамат Шәһит бабай нәҫеленең кескәй, еңел кәүҙәле, етеҙ, эшсән ҡуллы булыуы өсөн һөйөп ҡушылғанлыҡтан, уға берәүҙең дә хәтере ҡалмай. Бына ошо Сыпсыҡ Шәһит бабай үҙенә инде һикһән алты йәш булыуына ҡарамаҫтан, таң иртәнән ҡара кискә тиклем бер генә лә тик тормай. Ул балта оҫтаһы. Үҙҙәренең ишек алдының бер мөйөшөнә эшләп алған станогында көндөң көнө буйына сабып-юнып, нәмәләрҙер эшләп кенә тора. Уның янында һәр ваҡыт яңы ғына эшләнгән иләк, иләк, көрәк, тәртә, тәпәндәр аунап ята. Шәһит ҡарттың улы, Гөлкәйҙәрҙең атаһы Шаһиморат ағай, уға урмандан кәрәкле ағастарҙы алып ҡайтып биреп тора. Ә баҙар еткәс, аҙна буйына эшләнгән был көрәк-мөрәк, ҡамыт-ҡомоттарҙы үҙенең тар оҙон күкрәкле урман арбаһына тейәй ҙә, баҙарға алып барып һатып, аҙналыҡ он, сәй-шәкәр һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алып ҡайта. Ә Шәһит ҡарттың унда эше юҡ. Ул хатта улынан:

— Күпмегә һаттың, нимә алдың? — тип тә һорамай. Эштең үҙе — юнып-йышып донъя кәрәген яһап тороу ғына ҡыҙыҡһындыра уны. Ә кескәй Емеш һәр ваҡыт уларға барып, Шәһит ҡарттың әкрен генә йырлай-мөңрәй эш эшләгәнен ҡыҙыҡһынып ҡарап ултыра. Шәһит бабай_Емеште йәшенән алда үҫкәне, күпте белгәне өсөн ярата. Әсәһе ауырыу, тормоштары ауыр булғаны өсөн йәлләй, һәр килгәндә көләмәсләп, шаяртып уның күңелен асырға тырыша.

— Әйҡыҙым-ҡыҙым, һинең күлдәгең ситсанан ғына бит. Ана Ҡормош байҙың яп-ямаҡ ҡыҙы Ғилмекәй гел сатиндан да ебәктән генә кейә. Ниңә улай икән ул, ә? Бына һиңә кәрәк ине ул матур күлдәктәр, ә, ҡыҙым? — тип ирештерә ул.

Ә Емеш, сер бирергә теләмәй:

— Минең күлдәгем ситса түгел, ебәк кенә ул,— тип еңешә *(З.Биишева).*

## ТЕСТАР

1. Ҡайһы һөйләмдә бәйләүес төп килештән һуң килгән?

   1. Кистән башлап таңға тиклем Беҙ йөрөйбөҙ походта (Бәйеттән).
   2. Сөнәғәттәр Ергәнгә тиклем ат ялланылар (Ж.Кейекбаев).
   3. Улар өсөһө, өс юрғаға атланып, оло юлға табан саптылар.
   4. Дүрт-биш ҡыҙылармеец алып, һинең менән үҙем дә барам.
   5. Егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә (Мәҡәл).

2. Һүҙҙең мәғәнәһенә көсәйтеү, артыҡлыҡ төҫмөрө өҫтәп килгән көсәйтеү киҫәксәләре бирелгән юлды күрһәтегеҙ:

   1. Һаулыҡмы, балалар иҫәнме, барамы ни, киләме әллә, бармы һуң
